Таныштарығыҙ, хеҙмәттәштәрегеҙ араһында "Киске Өфө"гә яҙыла алмай ҡалғандар булһа, иҫтәренә төшөрөгөҙ: улар гәзитебеҙгә әле лә яҙыла ала, тик уны февралдән йә марттан ғына алдыра башлаясаҡ. Шулай уҡ февраль-мартта 2011 йылдың тәүге ярты йыллығы хаҡтары менән 2011 йылдың икенсе яртыһына ла яҙыла башларға мөмкин. Беҙҙең индекстар: 50665 (алты айға - 330 һум 24 тин), 50673 - (предприятие һәм ойошмалар өсөн 360 һум 24 тин).

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

15 - 21 ҒИНУАР (ҺЫУЫҒАЙ) 2011 ЙЫЛ

www.kiskeufa.ru 2002 йылдан башлап сыға Һатыуҙа хаҡы ирекле №3 (421)

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Йәйғор остарын тоташтырыусы... хыялый Урал йәшәй арабыҙҙа 6

Ҡол Ғәли (1170 йылдар тирәһе - XIII быуаттың тәүге яртыһы) 7

Ҡараңғы төндә әрләгәнсе, 8-9 яҡты көн тураһында хыяллан...

Айыуға ағайың менән бар, йәки Һәр ир-егет күңеле менән һунарсылыр... 12

14 ТВ-программа









ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Граждандары бәхетле булһын өсөн йәмғиәт ниндәй булырға тейеш?

*Ташбулат УСМАНОВ, Әбйәлил районы:* Йәмғиәттә барлыҡ мөнәсәбәттәр ғәҙеллек принциптарына ҡоролған осраҡта ғына граждандар бәхетле була ала. Беҙҙең илдә бер ниндәй ижтимағи ҡоролош та, сәйәси фирҡә лә, төрлө кимәлдәге етәкселек тә илебеҙ граждандарына ҡарата ғәҙел була алманы. Ғәҙеллек беҙҙә бары тик лозунгылар рәүешендә генә йәшәй. Булды ул ғәҙеллек, тик ябай кешеләр араһында ғына. Тормошобоҙҙо ғәҙеллек принциптарына ҡороп төҙөү өсөн төп шарт - иман, ә иман дини ҡанундарҙа. Шулай булғас, йәмғиәтебеҙ тик дини принциптарға нигеҙләнеп төҙөлгән осраҡта ғына ғәҙеллек урынлаштырып һәм уның граждандарын бәхетле итеп була. Әммә бында тағы ла бер ҡурҡыныс бар: власты үҙ маҡсатында файҙаланыусылар динде шулай уҡ үҙ мәнфәғәтендә файҙаланыуы ихтимал.

*Рәүеф БИКТАШЕВ, Сибай ҡалаһы:* Был һорауға яуап бирер алдынан иң тәүҙә "Кеше нисек бәхетле була ала?" тигән һорауға яуап эҙләргә кәрәктер. Йәшерәк саҡта нисек уйлағанмындыр, әле олоғая килә был һорауға шулай итеп яуап бирә алам: хәҙерге заманда булғанына ҡәнәғәт була белеү ҙә, шөкөр итә белеү ҙә кешене үҙен бәхетле тойорға булышлыҡ итә ала. Ә инде ниндәйҙер байлыҡҡа ҡомһоҙланып ынтылыу һәм шуға өлгәшеү бәхетле булыуҙы аңлатһа, бындай кеше бер ваҡытта ла үҙен бәхетле итеп тоя алмайҙыр, тием. Сөнки ҡомһоҙлоҡтоң, нәфсенең сиге юҡ. Байлыҡҡа эйә булыуға килгәндә, бынан 15-20 йыл элек кенә ауыл кешеһе коляскалы мотоциклға эйә булыуҙы ҙур маҡсатҡа өлгәшеү тип иҫәпләп, ғаиләһен шуға ултыртып йөрөтөп, үҙен бәхетле итеп тоя ала ине. Хәҙер инде ауыл кешеһе "Москвич" машинаһы менән дә мөрхәтһенмәй, сит ил машинаһына ынтыла. Йәшәү шарттары ла үҙгәрҙе, йәғни кешегә һәр йәһәттән ирек бирелде һәм һәр кемдең бәхете үҙ ҡулында. Тик сиктәрҙе, самаларҙы ғына оноторға ярамайҙыр. Әлбиттә, проблемалар бар, элек тә булған, киләсәктә лә буласаҡ. Ул проблемалар булмаһа, тормош та булмаҫ ине.

*Закирйән ӘМИНЕВ, юрист:* Граждандары бәхетле булһын өсөн йәмғиәттә шәхес ирекле булырға тейеш. Был, әлбиттә, башбаштаҡланыуҙы аңлатмай. Йәмғиәттә закон алдында барыһы ла бер тигеҙ яуаплы булырға тейеш. Рәсәйҙә, үкенескә ҡаршы, был хәлдең киреһе күҙәтелә. Тағы ла фекер иреклеге мотлаҡ. Кеше үҙен борсоған һорауҙарҙы властарға үҙен эҙәрлекләүҙәрҙән ҡурҡмай бирә алһа, шул уҡ ваҡытта етәкселәр уның һорауына мотлаҡ яуап бирһә, был саҡта тигеҙлеккә өлгәшкән булыр ине. Әлегә Рәсәй Федерацияһы Конституцияһында иғлан ителгәнсә, милли, дини, раса йәһәтенән тигеҙлектәргә лә ирешә алғаныбыҙ юҡ әле. Әле Мәскәүҙә Манеж майҙанында үткән сыуалыштарҙа "Рәсәй урыҫтар өсөн генә" тигән лозунгылар күтәрелде. Ә, улай булғас, "Башҡортостан башҡорттар өсөн", "Татарстан татарҙар өсөн генә" булып сығамы? Әгәр ҙә ошо һүҙҙәрҙе әйтеп, һәр милләт үҙенең "милли өйөнә" инеп бикләнһә, Рәсәй дәүләте юҡҡа сығасаҡ бит. Быға юл ҡуйырға ярамай.

**Әмир ҒҮМӘРОВ әҙерләне.**

ХӘҠИҠӘТИ ҺҮҘ

# САРМАТ АЛТЫНЫНЫҢ ВАРИҪЫ КЕМ?



**"Сармат алтыны"... 1987 - 1988 йылдарҙа билдәле археолог А.Х. Пшеничнюктың Ырымбур өлкәһенең көньяғындағы Филиппов ҡурғандарында тапҡан беҙҙең эраға тиклем V - IV быуаттарға ҡараған үҙенсәлекле алтын изделиелары археология фәненә ошондай атама менән инеп ҡалды. Ғалимдың табышы донъя әһәмиәтендәге фәнни асыш булараҡ баһаланды, ул табыш ғалимдарҙы Көньяҡ Уралға Дала Евразияһының оло мәҙәни, иҡтисади һәм сәйәси үҙәктәренең береһе булараҡ иғтибар йүнәлтергә мәжбүр итте. Бөгөн төбәктең бик боронғо һәм боронғо тарихы буйынса бер генә мәҡәлә лә Филиппов ҡурғандары табышын телгә алмайынса яҙылмай. Ләкин ошо хазинаның ысын хужаһы, һуңынан уның вариҫы кем булған, тигән һорау әлегә тиклем аҙ өйрәнелгән. Беҙ гәзит уҡыусыларға ошо тема буйынса үҙ фекеребеҙҙе еткерергә уйлайбыҙ.**

(Дауамы 7-се биттә).

УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

**"Киске Өфө" гәзитенә мин бик рәхмәтлемен. Унда баҫылған бер генә мәҡәлә лә мине битараф ҡалдырмай. Тик, ниңәлер, беҙ фекерҙәребеҙҙе яҙып ебәрергә өйрәнмәгәнбеҙ шул. Уңайһыҙланабыҙ, дөрөҫ аңламаҫтар, тибеҙ.**

# ГӘЗИТТЕ УҠЫП БӨТМӘЙЕНСӘ...

## балалар менән дә һөйләшмәй торам

Беләм, "Киске Өфө"лә күпте белгән, донъяға үҙенсәлекле ҡарашы булған аҡыллы кешеләр эшләй. Гәзиттең һәр һанында күтәрелгән проблемаларға үҙ фекеремде белдереп шандауҙар яҙмаһам да, улар хаҡында уҡыусыларыма, коллегаларыма һөйләйем, фекерҙәрен тыңлайым, шулай итеп, үҙенә күрә "түңәрәк өҫтәл" ойошторабыҙ. Сәйәсәт буйынса Таһир Ишкининдың мәҡәләләре бөтәбеҙҙә лә ҙур ҡыҙыҡһыныу уята. Әҙәбиәт дәрестәрендә ер мәсьәләләрен күтәргән проблемалар тураһында һөйләшкәндә Иҫәнбаев Мәзһар ағайҙың мәҡәләләре бик ярҙам итә. "Халыҡ дауаһы", "Уңыш ҡаҙан" рубрикалары күңелемә бик яҡын.

Шәмбе көндө минә ситтә йәшәгән балаларым шылтыратмай тора, сөнки улар белә: мин "Киске Өфө"нө уҡымайынса бер эш тә эшләмәйем һәм бер кем менән дә һөйләшмәйем. Унан "Йәшлек", "Башҡортостан" гәзиттәрен уҡыйым да, тағы аҙна буйы "Киске Өфө"нө ҡабат-ҡабат уҡып сығам. Ул минең өсөн дөрөҫ йәшәргә өйрәтеүсе, һәр ваҡыт алға әйҙәүсе, өмөтләндереүсе, рухымды күтәреүсе. Әгәр күңелеңдә рух, халҡым, телем тип янған йөрәгең юҡ икән, гәзит һинең өсөн бер нәмә лә түгел. "Киске Өфө" битарафтар өсөн тәғәйенләнмәгән.

**Ғәлимә ҒӘЛИЕВА,**
**башҡорт теле уҡытыусыһы.**
**Илеш районы Үрге Йәркәй ауылы.**

ИШАРА

# ИҠТИСАДҠА ШӘХСИ ҠАРАШ,

## йәки Нисек итеп байҙар менән ярлыларҙы тигеҙләргә була?

**Бөгөн Рәсәй Федерацияһында йәшәү кимәле буйынса төрлө ҡатламдар барлыҡҡа килде: байҙар, тәьмин ителгәндәр, ярлылар һәм фәҡирҙәр. Үкенескә ҡаршы, байҙар менән ярлыларҙың килемен сағыштырғанда икенселәре өсөн ҡыуанырлыҡ түгел. Әле Яңы йылдан күп кенә тауарҙарға хаҡтар артты. Был хәл иң тәүге нәүбәттә тәьмин ителгәндәрҙең, ярлыларҙың һәм фәҡирҙәрҙең кеҫәһенә һуҡты.**

Статистика, һалым һәм хоҡуҡ һаҡлау органдарынан алған мәғлүмәттәр буйынса Өфө ҡалаһы күрһәткестәрен анализлап, мин түбәндәге һандарҙы сығарҙым:

**1.** Өфөлә байҙар дөйөм халыҡтың 0,2 процентын тәшкил итә. Уларға эре эшҡыуарҙар, ҙур урын биләүсе чиновниктар инә.

**2.** Тәьмин ителгәндәр - 15-20 процент. Улар - юғары һәм урта звено чиновниктары, уңышлы эшҡыуарҙар, менеджерҙар, юғары квалификациялы хеҙмәткәрҙәр, "күләгәләгеләр".

**3.** Ярлылар - 60-70 процент. Бюджет хеҙмәткәрҙәре, ялланып эшләүселәр, карьера башлаусы чиновниктар, шәхси, бәләкәй эшҡыуарҙар.

**4.** Фәҡирҙәр - аҙ тәьмин ителгән ҡатлам, эшһеҙҙәр, хеҙмәт пенсионерҙары, асарбаҡтар.

Йәмғиәттә социаль шартлауға юл ҡуймау һәм үҫешкә юл алған йәмғиәт төҙөү маҡсатында тәьмин ителгәндәр ҡатламын 3-4 тапҡырға арттырыу маҡсатка ярашлы булыр ине. Был осраҡта байҙарҙың килемен кәметеү еңел хәл итерлек мәсьәлә, бының өсөн табышҡа ҡарата билдәләнгән һалымдың кимәлен үҙгәртеү ҙә етә. Минеңсә, мәле еткәс, был мәсьәлә ҡараласаҡ.

Ә бына ярлылар һәм фәҡирҙәр ҡатламын тәьмин ителгәндәр кимәленә күтәреү мәсьәләһенән юғары даирәләрҙә ашығыс һәм төплө ҡарарҙар ҡабул итеү юлы менән генә хәл итергә була. Дәүләттең эшҡыуарлыҡты үҫтереүгә булышлыҡ итеүе, инновация һәм модернизация проекттарын рекламалауы яҡшы, әммә был ғына аҙ. Шуға күрә мин түбәндәге сараларҙы тәҡдим итеүҙе зарури тип һанайым:

**Беренсенән,** йыллыҡ тауар әйләнеше 10 миллиондан аҙыраҡ тәшкил иткән эшҡыуарҙарҙы (ваҡ-төйәк менән сауҙа итеү, фермерҙар, шәхси эшҡыуарҙар һ.б.) һалымдарҙан һәм һәр төрлө отчеттарҙан азат итеү. Был дәүләткә өҫтәмә табыш килтерәсәк, сөнки уларҙан йыйылған һалым дәүмәле һалым, контроль, күҙәтеү, яза үтәү органдарын тотоуға ҡарағанда күпкә түбәнерәк. Икенсе төрлө әйткәндә, дәүләт бөгөн 1 тин һалым йыйыу өсөн 10 тин аҡса сарыф итә. Был кимәлдәге эшҡыуарҙарҙың энергоресурстар, милек, транспорт, сеймал өсөн түләүе лә баштан ашҡан. Уларҙың лозунгыһы шулай булһын: "Кешеләр өсөн эш урындары булдыр, күршеңә ярҙам ит һәм табыш ал!"

**Икенсенән,** етештереү өлкәһе һәм финанс араһындағы юғалған бәйләнеште киренән урынлаштырыу фарыз. Быының өсөн дәүләт эшмәкәрлеге һәм контроле ярҙамында яңы структуралар - Ислам дине принциптары буйынса эшләүсе, коммерция менән шөғөлләнмәүсе банктар, кооперативтар, идаралыҡ компаниялары ойоштороға мөмкин. Ябайлаштырып әйткәндә, яңы структуралар аҡса килеме тураһында түгел, иң тәүге сиратта етештерелгән тауар ихтыяжынан сығып эш итергә бурыслы. Был саралар урта һәм кесе эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнеүселәрҙең һанын һәм уларҙың эшмәкәрлек сифатын арттырыуға, сит ил аҙыҡ-түлегенән баш тартырға булышлыҡ итер ине.

**Өсөнсөнән,** яңы ойошторолған эшҡыуарлыҡ структураларын финанс менән тәьмин итеүҙе йәйге һалыу. Ислам принциптары менән эшләүсе бай илдәр уларға үҙ ресурстарын һалыуға әҙер, мәҫәлән, Ҡаҙағстан. Икенсе яҡтан, был юл менән кризис мәлендә банк өлкәһенән һаҡлап алып ҡалырға мөмкин. Беҙҙә ундай средстволар бармы? Булһа, уларҙың күпме өлөшө етештереү тармағына һалынған? Яуапһыҙ ҙа аңлашыла. Дәүләт финанс ресурстарын матди байлыҡ тыуҙырыусы етештереү тармаҡтарына һалырға һәм уларҙың эшмәкәрлегендә әүҙем ҡатнашырға бурыслы.

**Дүртенсенән,** халыҡты хәләл көс менән йәшәргә өйрәтеү. Шулай уҡ дөйөм мәҙәни кимәлде күтәреү ҙә мөһим. Телеканалдарҙа эшләмәйенсә генә гәмһеҙ йәшәү өлгөһөн күрһәтеүҙе лә тыйырға кәрәк беҙгә. Бындай тапшырыуҙар тик түләүле каналдарҙа ғына күрһәтелһен.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Власть эшмәкәрлеге менән риза булмаусылар артыуының төп сәбәбе иҡтисадта ята. Был сәбәпте бөтөрөү ил етәкселегенең иҡтисадҡа йөҙ менән боролоуына бәйле. Мин быға ышанам.**

**Сәғит хажи ИСМӘҒИЛЕВ.**




Шаран районының башҡорт теле уҡытыусылары.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов республикала тау саңғыһы буйынса балалар һәм үҫмерҙәр спорт мәктәптәре асыу инициативаһы менән сығыш яһаны. Бындай мәктәптәрҙе "Абҙаҡ", "Яҡтыгүл", "Кандрагүл" һәм "Өйәҙетау" (Октябрьский ҡалаһы) кеүек тау саңғыһы курорттары базаһында асыу планлаштырыла. "Башҡортостандағы бөтә тау саңғыһы курорттарында тау саңғыһы мәктәптәре эшләргә тейеш, - тине Рөстәм Хәмитов. -Бөтә донъяла шулай ҡабул ителгән, һәм был чемпиондар тәрбиәләү өсөн нигеҙ булып тора".

✓Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаттары БР Хөкүмәте тарафынан индерелгән "Башҡортостан Республикаһында балалы (балаларҙы) уллыҡҡа (ҡыҙ итеп) алған граждандарға бер тапҡыр бирелә торған аҡсалата пособие тураһында" БР Законы проекты өҫтөндә эш башланы.

✓Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаттары Өфөлә йәшәүселәрҙең ҡала архитектураһы өлкәһендәге етешһеҙлектәргә ҡарата күмәк ялыуын ҡараны. Депутат Наил Ҡотлогилдин әйтеүенсә, баш ҡаланың Баш архитектураһы тарафынан Ҡала төҙөлөшө кодексын боҙоу осраҡтары бик күп. Элиталы йорттарҙы кварталдарға тығыҙлап килтереп төҙөү арҡаһында ихаталарҙа боролорлоҡ, машина ҡуйырлыҡ та урындар ҡалмай. Баш ҡаланың баш архитекторы Рәмзит Маскулов бындай төҙөлөштәрҙе сикләү тураһында ҡарар ҡабул ителеүе тураһында хәбәр итте.

✓Башҡортостан Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығы "Башҡортостан Республикаһының айырыуса һаҡланыусы тәбиғәт биләмәләре реестры" тигән китапты мәғлүмәттәрҙе яңыртып, яңынан баҫтырып сығарҙы. Китапта өс дәүләт тәбиғәт ҡурсаулығы, дүрт тәбиғәт паркы, 29 дәүләт тәбиғәт заказнигы, 179 тәбиғәт ҡомартҡыһы, "Башҡортостан" милли паркы, Ботаника баҡса-институты, "Зилим" ландшафт тәбиғәт паркы, шулай уҡ ете дауалау-һауыҡтырыу урыны һәм курорттары тураһында мәғлүмәт урынлаштырылған.

✓Былтырғы йыл өсөн транспорт һалымын һәм ер һалымының икенсе өлөшөн 31 ғинуарҙан да һуңға ҡалмай түләргә кәрәк, тип хәбәр итә РФ Федераль һалым хеҙмәтенең БР буйынса идаралығы.

*АҘНА ШАНДАУЫ*

# ТЫЙЫРҒАМЫ? ТЫЙЫЛЫРҒАМЫ?

## Цензураның ҡайһыһы ҡурҡынысыраҡ - тыштан баҫҡанымы, әллә күңелгә ояланғанымы?

**Йәмәғәт, бөгөн цензура хаҡында һөйләшеп алайыҡ. Күрәһең, был темаға ла сират еткәндер. Баштан уҡ һүҙҙең мәғәнәһен асыҡлау мотлаҡ. Латинсанан цензура - "баһалау, фекер белдереү", тигәнде аңлата. Башҡорт теле һүҙлегендә (1993 йыл, 639-сы бит), цензура - ул матбуғатта баҫыла торған яҙмаларҙы, ваҡытлы матбуғат сараларын күҙәтеүҙең дәүләт системаһы һәм шул эште башҡарған дәүләт ойошмаһы. Йәғни, ябайыраҡ итеп әйткәндә, гәзиттәр һәм журналдар, радио һәм телевидениеның "теләһә нәмә" яҙып, һөйләп йәки күрһәтеп ҡуймауын күҙәтеп һәм (быныһы бик мөһим!) иҫкәртеп тороусы орган.**

Цензура, йәмәғәт, борон-борондан килә икән. Тәүҙә ул эш менән сиркәү шөғөлләнгән. Руханиҙар, тимәк. Ҡайҙа-ҡайҙа, әммә был өлкәлә тыйыуһыҙ булмай бит инде. Рухи цензура башлыса еретик (йәғни, рәсми сиркәү тарафынан ҡанунлаштырылмаған, тимәк, "боҙоҡ" һаналған) баҫмаларҙы тыйыу менән мәшғүл булған. Хатта ташҡа баҫтырырға ярамаған китаптарҙың исемлеге төҙөлгән. Ғөмүмән, феодализм ваҡытында ла, капитализмда ла цензура булған, йәғни, теләһә ниндәй ижтимағи ҡоролош осоронда киң массаларҙың аңына "зыян" килтерерлек мәғлүмәт табылып ҡына торған.

Әйтергә кәрәк, цензура ижтимағи-сәйәси мәғлүмәткә генә түгел, ә әҙәбиәттә лә, сәхнә әҫәрҙәренә лә, хатта музыкаға ла ҡағылған. Рәсәй империяһында, мәҫәлән, драматургтар үҙҙәренең һәр бер ижад емешен цензура аша үткәрергә мәжбүр булған. Батша цензорҙары мәҫәлсе Иван Крылов, яҙыусы Николай Гоголь, композитор Михаил Глинка һәм башҡа күп кенә рус ижадсыларын әҫәрҙәрен төҙәтергә, үҙгәртергә, яңынан эшләргә мәжбүр иткән.

Ҙур Совет энциклопедияһында (әйтергә кәрәк, Советтар Союзы юҡҡа сыҡҡанға егерме йылдан ашыу ваҡыт үтһә лә, был баҫма һаман үҙ әһәмиәтен юғалтмай. Идеологияға ҡағылышлы өлөшөнә иғтибар итмәһәң, әлбиттә) "цензура" төшөнсәһенә байтаҡ урын бирелгән. Баҡһаң, цензураның да төрлөһө була икән. Алдан үткәрелгәне, йәғни, баҫма донъя күрмәҫ борон, һәм, артабанғыһы, тимәк, гәзитме ул, журналмы, әллә китапмы, ташҡа баҫылғандан һуң күҙәтелеүе, баһаланыуы һәм, һөҙөмтә булараҡ, тыйылыуы. Ә Советтар илендә цензура булдымы һуң, тип һорарһығыҙ. Әлбиттә. Асыҡтан-асыҡ эш итһенме, әллә йәшерен булһынмы, эшмәкәрлеген башҡа берәй атама аҫтында үткәрһенме, цензура теләһә ниндәй дәүләттең айырылғыһыҙ бер өлөшө ул. Юғиһә, дәүләт үҙенең именлеген нисек һаҡлаһын һуң? Советтар Союзында "зарарлы" мәғлүмәткә сик ҡуйыр өсөн ни генә ҡыланманылар. Сталин СССР-ҙа донъя күргән һәр бер китапты, айырыуса тарихи өлкәләге, һәр бер кинофильмды тиерлек тәүҙә үҙе уҡып, үҙе ҡарап сыҡҡандан һуң ғына халыҡ иғтибарына сығарырға рөхсәт иткән. Ә "ВКП(б)-ның ҡыҫҡаса тарихы" тигән "фундаменталь" хеҙмәтте үҙе яҙған һәм мөхәррирләгән. Хрущев, мәҫәлән, рәссам-авангардсыларҙың күргәҙмәһен бульдозер саҡыртып эттертеүе менән билдәле. Был да бит цензура. Брежнев осоронда иһә цензура йәмғиәт тормошоноң бөтә өлкәләрен дә солғап ала. Айырым әҫәрҙәр генә түгел, яҙыусылар һәм шағирҙар, драматургтар, йырсылар һәм рәссамдар, музыкаль төркөмдәр тыйыла. Сит ил "радиотауыш"тарын тыңлау иһә енәйәткә тиңләнә. Ваҡытлы матбуғат саралары хаҡында әйтәһе лә түгел. Шулай итеп, тотош илдең халҡы күп йылдар буйына "тимер шаршау" артында йәшәй. Башҡа илдәрҙә нимә булғанын да, ситтә Советтар Союзы тураһында ниндәй фекерҙәр йөрөгәнен дә белмәй, тыныс ҡына, вайымһыҙ ғына. Белмәгәндең бәләге тыныс бит инде.

Әбөгөнгө Рәсәйҙә нисек һуң, тип һорарһығыҙ. Бармы беҙҙә цензура? Тәүҙә Конституциябыҙға күҙ һалайыҡ. Һүҙ араһында ғына әйтеп үтергә кәрәктер: һуңғы арала Төп Законбыҙ өҫтәл китабына әүерелде. Шулай булырға ла тейештер - ул бит тарихи йәки декларатив документ түгел, ә дәүләтебеҙҙең хоҡуҡи нигеҙе. Түрәләр генә түгел, ябай халыҡ та үҙенең һәр аҙымын Төп Закон менән үлсәргә, уға таянырға, унда теркәлгән хоҡуҡтарын яҡларға, эш итергә бурыслы. Шунһыҙ беҙҙең гражданин тип аталырға хаҡыбыҙ юҡ.

Рәсәй Федерацияһы Конституцияһының 29-сы статьяһы 5-се пунктына ярашлы, дөйөм информация азатлығы гарантиялана. Цензура тыйыла. Цензура тураһында Төп Законда башҡа бер ниндәй ҙә һүҙ юҡ. Шулай булғас, нимә бында гәзит битен бысратып, уҡыусыларҙың ваҡытын әрәм итеп, күҙ нурҙарын һурып, цензура тураһында һүҙ ҡуйыртып торорға һуң, тиерһегеҙ. Эйе лабаһа. Хәҙер илдә асыҡлыҡ. Бөтә нәмә мөмкин. Мәғлүмәт сығанаҡтары бихисап. Телевизор күрһәтеп тора, радио һөйләп тора. Ярты сәғәт һайын яңылыҡтар. Кем нимә тип әйткән, кем нимә тип белдергән, ҡайҙа барған, ҡайҙан килгән - бөтәһен дә шул сәғәттә түгел, шул минутта еткереп торалар. Янғындар һәм ташҡындар, енәйәттәр һәм үлтерештәр. Тегендә самолет ҡолаған, бында эстрада "йондоҙо" иренән туҡмалған, тегендә автобус менән тепловоз "осрашҡан", бында цунами ҡупҡан. Теләйһегеҙме-юҡмы уларҙы ишетергә - һеҙҙән берәү ҙә һорап тормай. Һеҙҙең фекерегеҙ бөгөн берәүгә лә мөһим түгел. Мәғлүмәт дарья булып аға. Унда файҙалыһынан бигерәк сүп-сары күберәк. Ташҡын ваҡытында ла шулай - барлыҡ бысраҡ, буръяҡ өҫкә ҡалҡып сыға ла баһа. Тик уны айырырлыҡ әмәл юҡ. Йә йотаһың, йә юғалтаһың.

Йә, йәмәғәт, ышандырҙыммы инде Рәсәйҙә һәм уның төбәктәрендә цензура булмағанлығына? Илебеҙ ысынлап та Конституцияға ярашлы йәшәгәненә? Хәйер, ул хәтлем мәғлүмәт араһынан цензураға дусар ителгәнен, тыйылғанын нисек күрәһең дә, ҡайҙан ғына айыраһың инде? Эйе, бөгөн берәү ҙә гәзиттәрҙе ташҡа баҫылмаҫ борон уҡып ултырмай. Әммә был цензураның булмағанын бер нисек тә аңлатмай. "Зыянлы" мәҡәләне (йәғни, дәүләттең именлегенә "янаусы", уның етәкселәренең имиджын "боҙоусы" һ.б.) һуңынан да уҡырға, баһа бирергә, уны яҙыусының, баҫтырып сығарыусының башына һуғырға, оло кабинеттарға саҡыртып алып тетмәһен тетергә, янарға, ахыр сиктә, ҡурҡытырға мөмкин. Бына ошо ваҡытта инде кешенең йөрәгенә эске цензор "оялай". Намыҫты тыйыусы, ғорурлыҡты баҫыусы бер нәмә ул. Ҡайһы берәүҙәр уны "айыҡ аҡыл" тип атап, үҙ-үҙен ышандырырға тырыша. Икенселәр иһә уны күрмәмеш тә ишетмәмеш. Әммә ул хәл иткес мәлдәрҙә тауыш бирһә, йәнде өшөтә. Ул бит кешенең бар бушаҡ урынын белә. Шулар менән оҫта файҙалана. Тышҡы цензорҙан арынып була ул. Эскеһенән ҡотолоуы бик ауыр. Хатта, ҡайһы берәүҙәр өсөн бөтөнләй мөмкин түгел...

Цензура кәрәкме һуң бөгөн, тигән һорауға яуап эҙләп ҡарайыҡ, булмаһа. Нисек кенә ғәжәп тойолмаһын, әлбиттә, кәрәк. Фекеремде аңлатыр өсөн тағы ла тарихҡа төшәйек. "СССР-ҙа секс юҡ" - 1986 йылда Америка Ҡушма Штаттары менән Советтар Союзы араһында ойошторолған телекүперҙәрҙең береһендә совет ҡатын-ҡыҙҙарының вәкиле ошолайтып белдергәйне. Енси мөнәсәбәттәр, Советтар Союзында, әлбиттә, булған. Юғиһә, тим, балалар был донъяға нисек килер ине һуң? Уларҙы, балаларҙы тим, Советтар Союзында кәбеҫтә араһында табып алғандарына, йәки совет ата-әсәләренә бәпестәрҙе ҡауҙы килтергәненә ышанмайһығыҙҙыр, моғайын. Тәбиғәт барыбер үҙенекен иткән. Бөйөк Ватан һуғышында ла, унан һуң да, Сталин осоронда ла, Хрущев ваҡытында ла, Брежнев хакимлыҡ иткән йылдарҙа ла ике енес вәкилдәре - ҡатын-ҡыҙ һәм ир-егет бер-береһеҙ тора алмаған. Ратҡан, көнләшкән, ҡауышҡан, айырылышҡан. Башҡа ерҙәрҙә, сит илдәрҙә, океан аръяғында быны "секс" тип атағандарҙыр, бәлки. Беҙҙә иһә - мөхәббәт, тип. Эйе, Советтар Союзында секс булмаған. Секс - ул бит бөтөнләй икенсе нәмә. СССР-ҙа бит шәрә ҡатын-ҡыҙҙар һәм ир-егеттәр төшөрөлгән журналдар башҡа гәзит-журналдар менән бер рәттән урамдарҙа һатылманы, йөҙәр мең тираж менән таралған гәзиттәрҙә асыҡтан-асыҡ "һатлыҡ мөхәббәт" тәҡдим иткән иғландар баҫылманы, телеэкрандарҙан асыҡтан-асыҡ фәхишәләрҙең "аяныс" яҙмышы, "ыҙа" сигеп аҡса эшләүҙәре тураһында сериалдар күрһәтелмәне, "ирекле" мөхәббәт пропагандаланманы. Тап ошо күренештәрҙе "секс" һүҙе һүрәтләй ҙә инде. Шуға ҡарамаҫтан, кеше бер-береһенә ғашиҡ булды, өйләнеште (йәки, өйләнешмәгән килеш кенә осрашты), ярашты, балалар тапты, "һулға" йөрөнө, айырылышты. Түшәктәге, юрған аҫтындағы ҡыуаныстарҙы, йыуаныстарҙы, проблемаларҙы ир белә лә, ҡатын белә торғайны. Уҙа китһә, ир-егеттең дуҫтары, ҡатын-ҡыҙҙың әхирәттәре. Ни өсөн тип һорайһығыҙмы? Сөнки был һәр бер кешенең шәхси эше. Был хаҡта асыҡтан-асыҡ һөйләргә, күрһәтергә, яҙырға ярамай ине. Был тыйылған тема булды. Шул иҫәптән, цензура тарафынан да.

Бөгөн улай түгел. Бөгөн секс телеэкрандарҙан, гәзит һәм журнал биттәренән, рекламанан ағылыпмы ағыла. Кем, ҡасан, кем менән, нисек "йоҡлаған"- бөтәһе лә асыҡ. Ҡайһы бер баҫмаларҙы, валлаһи-биллаһи, гинекология буйынса әсбап урынына ҡулланырға мөмкин. Мостай Кәрим данлаған "сер" (хәтерләйһегеҙме, "Өс нәмә мине әсир итте: Ер, йәнә Күк, йәнә ҡатын кеше") юҡҡа сыҡты. Ҡала урамдарында ла һәр мөйөштән тиерлек ярым шәрә ҡыҙ һүрәте баға. Бына ошо бысраҡ "ташҡын"ға сик ҡуйыр, ярҙарға индерер өсөн кәрәк тә инде бөгөн цензура. Шулай түгелме?

**Таһир ИШКИНИН.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Быйыл республикала Өфө-II ҡаласығы участкаһын иң яҡшы архитектура үҙләштереү концепцияһына Бөтә Рәсәй конкурсы үтәсәк. Конкурс март башында иғлан ителәсәк, әле БР Төҙөлөш һәм архитектура буйынса дәүләт комитетында уны үткәреү шарттары эшләнә. Белеүегеҙсә, ҡаласыҡ Өфөнөң тарихи үҙәк өлөшөндә урынлашҡан. Уға 1500 йәш тирәһе. Быны раҫлаусы материалдар бихисап. Археологик ҡомартҡы биләмәһендә эре музей комплексы төҙөү планлаштырыла.

✓БР Йәштәр сәйәсәте һәм спорты буйынса министрлыҡ әҙәбиәт, сәнғәт һәм архитектура өлкәһендә Шәйехзада Бабич исемендәге Дәүләт республика йәштәр премияһына материалдар ҡабул ителә башлауы тураһында иғлан итте. Шарттар буйынса ижади коллективты премияға күрһәткәндә дәғүәселәр 16-35 йәштәге 5 кешенән дә артмаҫҡа тейеш. Премияның күләме 50 мең һум. Материалдар 1 апрелгә тиклем ошо адрес буйынса ҡабул ителә: 450000, Өфө ҡалаһы, Ленин урамы, 10, 24-се бүлмә. Белешмәләр өсөн телефон: (347) 276-45-87.

✓Башҡортостанда мәктәп уҡыусыларының Бөтә Рәсәй олимпиадаһы төбәк этабы старт алды. Унда республиканың 2800 тирәһе 9-11 синыф уҡыусылары ҡатнашыуы күҙаллана. Олимпиадалар 21 предмет буйынса үтәсәк. 13 ғинуарҙа физика, технология, немец теленән һынауҙар үтте. 17-18 ғинуарҙа уҡыусылар биология һәм инглиз теленән һынау тотасаҡ. Төбәк этабы 5 февралдә астрономия, әҙәбиәт, физкультура һәм иҡтисад буйынса олимпиадалар менән тамамлана. Яҙын иң лайыҡлылар Бөтә Рәсәй олимпиадаһының йомғаҡлау этабында ҡатнашасаҡ. Былтыр республика олимпиада еңеүселәре һәм призерҙары һаны буйынса иң яҡшы ун төбәк эсендә ине.

✓Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге оператив кәңәшмәлә 2010 йылда "Ҡайнар пейджер" эше йомғаҡтары тураһындағы мәғлүмәт тыңланды. Билдәләнеүенсә, былтыр "Ҡайнар пейджер"ға 2177 мөрәжәғәт килгән. Уларҙың 1970-е ҡаралған, 809 мөрәжәғәт ыңғай хәл ителгән, 1161 мөрәжәғәт буйынса аңлатма бирелгән. Иң күп мөрәжәғәттәр Калинин районынан килгән. Иң көнүҙәк тема - торлаҡ йорттарҙы ремонтлау, уларҙы хеҙмәтләндереү торошо. Шулай уҡ ихаталарҙы ремонтлау мәсьәләһе лә актуаль булып ҡала.

*✓ 31 декабрҙә Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов Ирәмәл тауына бүләк яһаны - тәбиғи парктың дирекцияһын ойоштороу тураһында ҡарарға ҡул ҡуйҙы.*



ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# СУСҠА ҺӘМ ҠОШ ИТЕНӘН...

## ваҡытлыса баш тартып тор

➔ Рәсәй Президенты Дмитрий Медведев яңы указға ҡул ҡуйҙы. Уға ярашлы, сит ил граждандары, гражданлыҡтары булмаусылар, сит ил предприятиелары һәм ойошмалары сик буйындағы ерҙәрҙе хосусилаштыра, үҙ милкенә ала алмай. Исемлеккә сиктәге 380 район һәм ҡала ингән: Төньяҡ Кавказдың барлыҡ райондары, күпселек Себер һәм Алыҫ Көнсығыш төбәктәре. Был илдең именлегә хаҡына эшләнә. Бындай сикләүҙәр донъяның башҡа илдәрендә лә бар.

➔ Роспотребнадзор башлығы Геннадий Онищенко рәсәйлеләргә сит илдән индерелгән сусҡа һәм ҡош итенән ваҡытлыса баш тартып торорға кәңәш итте. Сәбәбе: Германияның дүрт федераль округында фермерҙар малдар һәм ҡоштарға ҡурҡыныс ағыу - диоксины булған аҙыҡ ашатҡан. Тикшереүҙәр күрһәтеүенсә, бер фермала етештерелгән ҡош итендә ул норманан 2,5 тапҡырға күберәк булған. Әле Рәсәйҙең санитар врачтарын иттәрҙең зарарланыу факты ғына түгел, ә һаман да Евросоюздағы коллегаларынан бер ниндәй ҙә рәсми мәғлүмәт булмауы борсой.

➔ 1 ғинуарҙан баҙарҙарҙа, дауаханаларҙа, шарап-араҡы магазиндарында эшләүсе сит ил граждандары эш урындарына сыҡманы. Хөкүмәт ҡарарына ярашлы, быйылдан башлап сит ил граждандары бары тик магазиндарҙа ғына эшләргә тейеш. Был рәсәйлеләргә эш урындары булдырыу маҡсатынан эшләнә, икенсе яҡтан, гастарбайтерҙарҙы баҙарҙарҙа аулау бик ауыр. Быйыл дөйөм алғанда 1,7 миллион мигрант ҡына рәсми эшләй ала. Бөгөн, эксперттар фекеренсә, Рәсәйҙә легаль булмаған гастарбайтерҙар 10 миллиондан ашыу.

➔ 31 декабрҙә Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов Ирәмәл тауына бүләк яһаны - тәбиғи парктың дирекцияһын ойоштороу тураһында ҡарарға ҡул ҡуйҙы. Хәҙер 21 кеше закон нигеҙендә тауҙы һаҡлаясаҡ һәм уның тирә-яғында тәртип урынлаштырасаҡ. Тимәк, изге тауыбыҙҙа йөҙҙәрсә турист сүп-сар ҡалдырып китә алмаясаҡ, ә автомобиль һөйөүсе экстремалдар джиптарҙа һәм квадроциклдарҙа ярыш ойоштормаясаҡ һәм беҙ уникаль тәбиғәтебеҙҙе килер быуындарға ла тапшыра аласаҡбыҙ.

➔ Яңы йылдың беренсе көнөндә генә өфөләләр "Тиҙ ярҙам" хеҙмәтенә 2353 тапҡыр шылтыратҡан. Уларҙың бер өлөшөнә медиктар телефон аша ярҙам күрһәткән, әммә 1300 адрес буйынса барырға тура килгән. Әскән граждандарға был көндә ғәҙәти көндән айырмалы дүрт тапҡыр йышыраҡ ярҙам кәрәк булған. Бынан тыш, аҙыҡ-түлек менән ағыуланыу, тайғаҡтан һәм фейерверктарҙан йәрәхәттәр алыу, туңыу осраҡтары бар. Торлаҡ-коммуналь хужалығы хеҙмәтенә лә ял бик тәтемәгән. Яңы йыл төнөндә 35 юл-транспорт һәләкәте булып, унда 5 кеше үлгән, 35-е йәрәхәттәр алған. Ә Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы хеҙмәткәрҙәре байрам көндәрендә 124 янғын һүндергән.

**Шәрифә САЛАУАТОВА әҙерләне.**

ҠАРА ҺИН УНЫ!

**Беҙҙең илдә һәр йыл башында аҙыҡ-түлеккә, транспортҡа, коммуналь хеҙмәттәргә хаҡтар күтәрелеүе ғәҙәти күренешкә әйләнгән. Хәйер, хаҡтар ни йыл башында ғына түгел, ә йыл дауамында ла гел генә үҙгәреп тора, иғтибар итеп өлгөрһәң - өлгөрәһең, өлгөрмәһәң - юҡ.**



# АҠРЫН ҒЫНА, ҺИҘҘЕРМӘЙСӘ...

## хаҡтар юғарыға үрләй

● Ошоларҙы иҫәпкә алып, ғинуар башында Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов БР-ҙың Сауҙа һәм ҡулланыусылар хоҡуҡын яҡлау буйынса дәүләт комитеты һәм Рәсәй Монополияға ҡаршы федераль хеҙмәтенең төбәк идаралығына көндәлек ҡулланыу тауарҙары һәм хеҙмәттәргә хаҡтарҙы тикшерергә ҡушҡайны. Белгестәр республиканың сауҙа нөктәләрендә аҙыҡ-түлеккә, иң кәрәкле тауарҙарға, бензинға һәм дизель яғыулығына хаҡтар күтәрелеүенең нигеҙле булыу-булмауын асыҡлауға тотондо ла инде.

БР буйынса Монополияға ҡаршы федераль хеҙмәт мәғлүмәттәренә ярашлы, аҙыҡ-түлеккә хаҡ 2010 йылдың декабрендә үк күтәрелгән. Быны сауҙа нөктәләре хеҙмәткәрҙәре лә дәлилләй. Мәҫәлән, Өфөнөң Революцион урамындағы бер магазин директоры әйтеүенсә, "Восход" берекмәһенең икмәк ризыҡтарына хаҡтар 25 декабргә тиклем үк артҡан. "Матрица" сауҙа селтәрҙәре менеджерҙары билдәләүенсә, хаҡты башлыса тауар етештереүселәр күтәрә. Халыҡ араһында "киммәтле магазин" исемен йөрөткән "Матрица"ла икмәк, һөт, шәкәр, ярмаларға хаҡты былтырғы кимәлдә һаҡларға тырышалар, мәҫәлән, бында "Уныш" икмәге 17 һум тора (сағыштырыу өсөн, "Матрица" эргәһендәге бәләкәй генә магазинда ул 18 һум 50 тин, ә "Үҙәк баҙар"ҙа - 19 һум). Әммә 1 литрлы "Биомакс" кефиры 44 һумға тиклем күтәрелгән.

● Шулай ҙа Өфө магазиндарында республикала етештерелгән аҙыҡ-түлеккә хаҡтар сағыштырмаса осһоҙораҡ. Бөрө икмәген 16 һумдан ашыуыраҡҡа һатып алырға була, Цюрупа исемендәге агрофирманан алып килелгән мискәләге һөттең литры - 20 һум. Бәләбәй сырының хаҡы 270 һумдан 290 һумға тиклем барып баҫҡан. Һатыусылар әйтеүенсә, әлегә магазиндар яңы йылға тиклем алынған тауар запасы менән сауҙа итә, тимәк, улар иҫке хаҡ менән һатыла. Быйыл сырҙың хаҡы 300 һумдан да кәмерәк булмаясаҡ, ти улар. Шишмәлә етештерелгән үҫемлек майының бер литры 72 һумға еткән...

● Артабан нимә көтөргә һуң? Һатыусылар белдереүенсә, хаҡтар 15 ғинуарҙан һуң тағы ла күтәреләсәк. Булмаҫ, тимә, ана, ҡала буйынса пассажирҙар ташыусы ҡайһы бер "йүнсел"дәр автобусҡа хаҡтарҙы 10 һумдан 15 һумға күтәргән дә инде, ә "Газель"дәр күптән 20 һум. Был көндәргә хаҡтар, ә киске 10-дан һуң был хаҡтарҙың тағы ла юғарыраҡ булыуын барыһы ла белә.

● 2011 йыл тағы ла нимәгә хаҡтар өҫтәлеүен көтөргә һуң? Яңы йылдан Рәсәйҙә бензинға акциз үҙ көсөнә инде, 2011 йылда ул 1 литр яғыулыҡҡа 1 һум тәшкил итәсәк. Киләһе ике йылда акциз йылына бер һумға күтәреләсәк, етмәһә, 2012 йылда - 6, ә 2013 йылда тағы ла 5,4 процентҡа индексацияланған. Эксперттар иҫәпләп сығарыуынса, был ошо көндәрҙә заправкаларҙа 1 литр яғыулыҡтың хаҡы яҡынса 50 процентҡа күтәрелеүенә килтерәсәк. РФ Хөкүмәте уйлауынса, бензинға акциз юл фондын тулыландырыусы сара буласаҡ. 2011 йылда уның 84 миллиард һумы юл ремонтлауға тотоноласаҡ. РФ Хөкүмәте вице-премьеры, финанс министры Алексей Кудрин билдәләүенсә, был юл фонды ун йыл эсендә Рәсәй юлдарын Европа кимәлендәге юлдарға әйләндерергә мөмкинлек бирәсәк.

● Этил спиртына акциз да йыл башынан 10 процентҡа индексацияланды. Рәсәй территорияһында етештерелгән араҡының минималь хаҡы ла күтәрелде, хәҙер был спиртлы эсемлектең 0,5 литры 89 һумдан 98 һумға тиклем барып етәсәк. Коньяктың иң осһоҙо быйыл 193 һумдан кәм булмаясаҡ. Фильтрлы сигареттарҙың мең данаһына акциз 280 һум буласаҡ. Был иң осһоҙло сигареттарға хаҡтың 20-30 процентҡа артыуына килтерәсәк, ти эксперттар. 2013 йылға был акциз 460 һумға артасаҡ. Өс йылда акциз ставкаһы 5 һумдан 12 һумға күтәрелеүе көтөлә. Был Украина менән сағыштырғанда - ике тапҡырға, ә Румыния менән сағыштырғанда ун тапҡырға аҙыраҡ.

● Рәсәй халҡы 1 ғинуарҙан электр энергияһына һәм газға ла күберәк түләй башласаҡ. Газ быйыл ике тапҡыр - ғинуарҙа 5 процентҡа, апрелдә тағы ла 9,5 процентҡа күтәреләсәк. Граждандар өсөн электр энергияһының хаҡы уртаса 13-15 процентҡа үҫәсәк. Коммуналь хеҙмәттәргә хаҡтар 15 процентҡа артасаҡ.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Аҙыҡ-түлек һәм сәнәғәт тауарҙарына хаҡтар үҫеүе тураһындағы хәл Башҡортостан Республикаһы Президенты Хакимиәтендә, республиканың махсус ведомство-ара комиссия ултырышында ла ҡаралды. Был комиссия социаль продукттар, орлоҡ, яғыулыҡ-майлау материалдары, минераль ашламалар һәм ауыл хужалығы тәғәйенләнешендәге тауарҙар төркөмө баҙарында килеп тыуған мәсьәләләрҙе хәл итеү менән шөғөлләнә. Сауҙа һәм ҡулланыусылар хоҡуғын яҡлау буйынса комитет белдереүенсә, Башҡортостанда 2011 йылдың башынан алып икмәк, һөт кеүек аҙыҡтарға хаҡ уртаса 1,5 процентҡа күтәрелгән. Һыйыр ите, ҡарабойҙай, картуф, һуған һәм тары ярмаһы 9 процентҡа ҡиммәтләнгән. Комиссия ултырышында төрлө сауҙа нөктәләрендә урынһыҙға хаҡтар үҙгәреп тормаһын өсөн систематик рәүештә тикшереүҙәр үткәрергә, социаль тауарҙарға хаҡтар билдәләүгә тәьҫир итә торған яңы һәм файҙалы ысулдар эшләргә кәрәклеге билдәләнде. Шулай уҡ ведомство-ара комиссия ағзаларына Рәсәй һәм сит ил инвесторҙарын йәлеп итәсәк логистик үҙәктәр булдырыу проектын әҙерләргә ҡушылды. Был Рәсәйҙең башҡа төбәктәрендә һәм сит илдәрҙә етештерелгән аҙыҡ-түлек менән республиканы тәьмин итергә мөмкинлек бирәсәк. Ҡулланыусылар хоҡуғы боҙолған осраҡтар тураһында түбәндәге телефондарға шылтыратып белдерергә мөмкин: +7(347)223-95-85 (Сауҙа һәм ҡулланыусылар хоҡуғын яҡлау буйынса комитет); +7(347)273-34-05 (Монополияға ҡаршы федераль көрәш идаралығы).**

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфө трикотаж фабрикаһында яңы йыл ҙур үҙгәрештәрҙән башланды. Етештереү корпусында немец фирмаһының иң заманса теген машиналары урынлаштырыла. Улар фабрикағы етештереү күләмен ике тапҡыр арттырыуға булышлыҡ итәсәк. Шулай уҡ бында яңы эш урындары ла булдырылды. Әле тегенсе һөнәрен һәм бәйләүселәрҙе эшкә ҡабул итеү бара.

✓Башҡортостанда эре наркокартель фашланған. Унда 93 кеше ҡулға алынған. Еңәйәт төркөмөндә барлығы 200 кеше ағза булып торған, төркөмдөң наркотиктар һатыуҙан килгән айлыҡ килеме 1,5 млн доллар тәшкил иткән. Наркоконтроль идаралығы матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, был операция ҡырғыҙ трафикаһын фашлауҙың сиратағы, бәлки, һуңғы этабы булды.

✓ "Рәсәй Федерацияһында мәғариф тураһында" Закон проектын тикшереү 1 февралгә тиклем дауам итәсәк. Zakonoproekt2010.ru сайтында документҡа тәнҡит йәки аңлатма ҡалдырырға мөмкин.

✓ "Башкирнефтепродукт" асыҡ акционерҙар йәмғиәте автозаправкаларында һатылыусы "Евро" стандартлы дизель яғыулығы 2,97 процентҡа ҡиммәтләнгән. Әле ошо төр яғыулыҡтың бер литры 24,3 һум тора. Бензинға хаҡтар үҙгәрешһеҙ ҡалған.

✓Быйыл федераль бюджеттың "Фән" бүлеге өсөн тотоноласаҡ аҡсаһы 227,8 млрд һум тәшкил итәсәк. Был былтырғы менән сағыштырғанда 32 процентҡа күберәк. Бында ғалимдарға эш хаҡын, аспиранттарға һәм докторанттарға стипендияларҙы арттырыу ҙа инә.

✓ 21 ғинуарҙа Өфөлә Башҡортостан мәҙәниәте һәм сәнғәтен үҫтереү проблемалары буйынса түңәрәк ҡор үтәсәк. Был юлы һөйләшеүгә рәссамдар һәм уҡытыу системаһы вәкилдәре саҡырыласаҡ. Сараны БР Президентының мәҙәниәт буйынса кәңәшсеһе Олег Киреев ойоштора.

✓ Ошо көндәрҙә Өфөлә мотоциклдарҙа боҙҙа уҙышыу буйынса Рәсәйҙең 51-се чемпионаты үткәйне. Яҡташыбыҙ, боҙҙа уҙыш буйынса дүрт тапҡыр Рәсәй чемпионы Николай Красников унда көмөш миҙал яуланы. Уны бер генә мәрәйгә Тольятти ҡалаһының "Мега-лада" командаһы уҙышсыһы Дмитрий Хомицевич уҙып китте.

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# ҠУНАҠТАРЫҢДЫ ОҘАТ ТА,

## тейешле урынға хәбәр ит!

**Миграция тураһындағы законды боҙоуҙарҙы иҫкәртеү маҡсатында "Рәсәй Федерацияһында сит ил граждандарын һәм гражданлыҡ алмаған кешеләрҙе миграция иҫәбенә алыу тураһында"ғы 2006 йылдың 18 июлендәге федераль законды, шулай уҡ "Рәсәй Федерацияһында сит ил граждандарын һәм гражданлыҡ алмаған кешеләрҙе миграция иҫәбенә алыуҙы башҡарыу тәртибе тураһында"ғы 2007 йылдың 15 ғинуарындағы РФ Хөкүмәте ҡарарының ҡайһы бер положениеларын аңлатып үтмәксебеҙ.**

Рәсәй Федерацияһына ваҡытлыса килеүсе сит ил граждандары тәғәйенләнгән урынға килгәс өс көн эсендә килгән урындары буйынса иҫәпкә торорға тейеш.

Сит ил граждандары һәм гражданлыҡ алмаған кешеләр тарафынан был тәртиптең үтәлмәүе РФ Административ хоҡуҡ боҙоуҙар кодексының 18.8 статьяһы буйынса административ яуаплылыҡ йөкмәтә, шул уҡ ваҡытта 2 мең һумдан 5 мең һумға тиклем штраф һәм илдән ҡыуыу ихтималлығы ҡаралған.

Рәсәй Федерацияһы менән Беларусь Республикаһы араһындағы Килешеүгә ярашлы, Беларусь Республикаһынан килеүсе граждандар килгән ваҡыттарынан 30 көн дауамында иҫәпкә тороуҙан азат ителә.

Рәсәй Федерацияһы менән Украина Хөкүмәттәре араһында төҙөлгән Килешеү буйынса Украина граждандары, Рәсәй Федерацияһы территорияһына ингән саҡта ил сиге контроле органдарының билдәһе ҡуйылған миграция картаһы булған хәлдә 90 көн дауамында иҫәпкә тормаһа ла була.

Миграция иҫәбенә ҡуйыу өсөн физик шәхес йөҙөндәге ҡабул итеүсе яҡ тейешле бланк тултырып, уға сит ил гражданы документтарының (паспорт, виза, миграция картаһы) күсермәләрен беркетә.

Сит ил граждандары ҡайтып киткәндән һуң ике көндән дә һуңға ҡалмайынса ҡабул итеүсе яҡ сит ил гражданы булған урын буйынса миграция хеҙмәтенең территория подразделениеһына бынан алда тултырылған бланкының йыртма өлөшөн, сит ил гражданының ҡайтып киткән көнөн күрһәтеп, һалып ебәрергә (йәки заказ-хат менән) тейеш.

Физик шәхес йөҙөндәге ҡабул итеүсе яҡ тарафынан миграция иҫәбен башҡарыу менән бәйле бурыстарҙы үтәү һанға һуғылмаған осраҡта РФ Административ хоҡуҡ боҙоуҙар кодексының 4-се өлөшө 18.9 статьяһы менән административ яуаплылыҡ, 2 мең һумдан 4 мең һумға тиклем административ штраф ҡаралған.

Мәҫәлән, былтыр июлдә Өфө районы биләмәһендә Башҡортостан Республикаһы буйынса Рәсәй Федераль миграция хеҙмәте идаралығы хеҙмәткәрҙәре тарафынан иҫкәртеү саралары үткәргән ваҡытта өйөндә өс сит ил гражданын "теркәткән" М. исемле ҡатын асыҡланды. Сит ил ҡунаҡтары дүрт ай элек үк ҡайтып киткән, ә хужабикә был хаҡта миграция хеҙмәтенә хәбәр итергә "онотҡан" булып сыҡты. Һеҙөмтәлә М.-ға административ хоҡуҡ боҙоу хаҡында протокол төҙөлдө һәм һәр мигрантҡа ике мең һум иҫәбенән бөтәһе 6 мең һум штраф һалынды. Хужабикә был штрафты түләһә, бөтәһе лә һәйбәт булыр ине, ләкин штрафты ваҡытында түләмәгәне өсөн ул ҡайтанан яуаплылыҡҡа тарттырылды: суд был эште ҡарағандан һуң элек тәғәйенләнгән штраф күләменә таҡы 6 меңде өҫтәне.

Ошоноң менән бәйле БР буйынса Федераль миграция хеҙмәте идаралығы сит ил граждандарын миграция иҫәбенә алыу аҙаҡ уларҙы иҫәптән төшөрөү кеүек үк бик яуаплы бурыс, был хаҡта онотмаһағыҙ ине, тип иҫкәртә. Югиһә, был эштең ҙур күләмдә штрафҡа әүерелеүе бик мөмкин.

**Салауат ХИЛАЛОВ,**
**БР буйынса Федераль миграция хеҙмәте идаралығы хеҙмәткәре.**

ҺОРАУ-ЯУАП

## МИЛИЦИЯҒА ЯЛЫУ

**Хоҡуҡ һаҡлау органдары хеҙмәткәрҙәре, атап әйткәндә, милиция патруле ҡылығы менән риза булмаған хәлдә, мин кемгә, ҡайҙа мөрәжәғәт итә алам?**

- "Милиция тураһында" РФ законының 39-сы статьяһына ярашлы, әгәр милиция хеҙмәткәренең ҡылығы йәки уның битарафлығы граждандарҙың хоҡуҡтарын, иркен һәм законлы мәнфәғәттәрен боҙған хәлдә, юғары органдарға йә милициялағы вазифалы кешегә, прокурорға йә судҡа мөрәжәғәт итергә була.

## ҠУЛҒА АЛЫУ

**Административ ҡулға алыу төшөнсәһе нимәне аңлата? Күпме ваҡытҡа тиклем ултыртa алалар һәм уға кем тарафынан күрһәтмә бирелә?**

- РФ Административ хоҡуҡ боҙоуҙар кодексының 3.9 статьяһына ярашлы, административ ҡулға алыу - тәртип боҙоусыны йәмғиәттән айырым шарттарҙа тотоу. Был 15 тәүлеккә тиклем ваҡыт менән билдәләнә. Ә ғәҙәттән тыш хәл режимының йәки терроғға ҡаршы хоҡуҡи режим талаптарын боҙған өсөн - 30 тәүлек. Административ ҡулға алыу судья тарафынан тәғәйенләнә.

## ПРОКУРОР ҠАТНАША АЛА

**Ҡайһы бер эштәрҙе ҡарағанда суд процесында прокурорҙың ҡатнашыуы ихтимал, тип ишеткәнем бар. Ул унда ниндәй осраҡта һәм кем мәнфәғәтендә сығыш яһай?**

- Граждандар һәм ҡайһы бер башҡа төркөм кешеләре мәнфәғәтен, йә булмаһа Рәсәй Федерацияһы, РФ субъекттары, муниципаль берәмектәрҙең законлы мәнфәғәттәрен, хоҡуҡтарын, азатлығын яҡлап, прокурор судҡа ғариза менән мөрәжәғәт итергә хоҡуҡлы.

Прокурор граждандарҙың хоҡуҡтарын, азатлығын һәм законлы мәнфәғәттәрен яҡлап, гражданин һаулығы, йәше, аҡылға зәғифлеге булғанда һәм башҡа ғәфү итерлек сәбәптәр менән үҙе мөрәжәғәт итә алмаған осраҡтарҙа ғариза бирә ала. Әле күрһәтелгән сикләүҙәр прокурорҙың уға граждандар тарафынан хеҙмәт мөнәсәбәттәре, ғаиләне, әсәлекте, атайҙар һәм балалар хоҡуҡтарын яҡлау, социаль тәьминәтте индереп, социаль яҡлау, дәүләт һәм муниципаль торлаҡ фондтарында торлаҡҡа хоҡуҡты тәьмин итеү, медицина ярҙамын индереп, сәләмәтлек һаҡлау, унайлы тәбиғи мөхит, белемгә хоҡуҡты тәьмин итеү хоҡуҡтарын яҡлау тураһында мөрәжәғәттәре нигеҙ булып торған ғаризаларға ҡағылмай.

Ғариза биргән прокурор бөтә профессиональ хоҡуҡтары менән файҙалана һәм юллаусының бөтә профессиональ бурыстарына эйә була (мировой килешеү төҙөүгә хоҡуҡтан һәм суд сығымдарын түләүҙән тыш). Әгәр ҙә гражданин йәки уның законлы вәкиле юллауҙан баш тартыуы хаҡында белдермәһә, прокурор кемдеңдер булһа законлы мәнфәғәтен яҡлап сығыш яһау тураһындағы ғаризаһынан баш тартҡан хәлдә, эште ҡарау барыбер дауам итә.

Прокурор процесҡа ҡушыла һәм йорттан сығарыу, эш урынына ҡайтарыу, ғүмергә йә һаулыҡҡа килтерелгән зыянды ҡаплатыу эштәре буйынса һәм ғәмәлдәге кодекс һәм башҡа федераль закондар тарафынан ҡаралған башҡа осраҡтарҙа һығымта яһай. Ваҡыты һәм эште ҡарау урыны тураһында хәбәрҙар булған прокурорҙың килмәүе эште ҡарауға тотҡарлыҡ була алмай. (РФ Гражданлыҡ-процессуаль кодексы, 45-се статья).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләнә.**

ХОККЕЙ

# НИҺАЙӘТ - ЕҢЕҮ!

**Яңы йыл байрамдарынан һуң "Салауат Юлаев" командаһы көйәрмәндәре әллә ни кинәнес кисерә алманы. Ул бер-бер артлы "Югра", "Барыс" һәм "Авангард" командаларынан отолдо. Бына хәҙер үҙ майҙанында Ярославль ҡалаһының "Локомотив" командаһы менән көс һынашырға тейеш. "Локомотив" һуңғы ваҡыттарҙа айырыуса көслө уйнай, осрашыуҙарҙы ул еңеү менән тамамлай. Юлаевсылар был юлы ла отолормо?**

Уйын башланыр-башланмаҫтан юлаевсы Кутейкин 2 минутҡа штраф эскәмйәһенә ултырҙы. Хәҙер "Салауат Юлаев" аҙсылыҡта уйнай. "Локомотив" бындай уңайлы мәлде ҡулдан ысҡындырманы. Ҡунаҡтарҙың һөжүм итеүсеһе Александр Королюк тәүге шайбаны Виталий Колесник ҡапҡаһына сәпәне. Бынан һуң ике минут үтеүгә майҙан хужалары капитаны Виктор Козлов иҫәпте тигеҙләне.

Икенсе осорҙа ҡунаҡтар хатта алға сыҡты, улар Виталий Колесник ҡапҡаһына 2 шайба индерҙе. Артабан юлаевсы Владимир Антипов йәнә иҫәпте тигеҙләне. Иҫәп 3:3 булды.

Өсөнсө осорҙоң беренсе минуттарында уҡ тиерлек "Локомотив" йәнә алға сыҡты.Майҙан хужалары ҡапҡаһына 2 шайба "ояланы". Иҫәп хәүефле: 5:3. Юлаевсыларҙың 4-се тапҡыр еңелеүе бик мөмкин ине. Юлаевсылар ысын-ысыны менән сәмләнде. Улар тулҡын-тулҡын булып "Локомотив" ҡапҡаһына ябырылды. Һөҙөмтә оҙаҡ көттөрмәне: Якуб Клепиш, Сергей Зиновьев, Виктор Козлов һәм Александр Свитов 4-5 минут эсендә иҫәпте 7:5 итте. Ҡунаҡтар тик бер гол менән генә яуап бирә алды.Бына шулай, "Салауат Юлаев" яңы йылда беренсе тапҡыр еңеү яулаһы.

**Юныс ӘХМӘҘИЕВ.**

Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



# ҺИМЕРЕҮҘӘН ҠУРҠҺАҢ...

## йәшел сәй эс

**Яңы йыл байрамы ялдары мәлендә бер аҙ тулыланып китеүселәргә түбәндәге кәңәштәр артыҡ ауырлыҡтан ҡотолорға ярҙам итер.**

❖ 1 ҡалаҡ йөҙөмгә 1 алма, ярты лимон, 1 тотам сельдерей һәм башҡа тәмләткес үләндәр турап, 1 балғалаҡ зәйтүн майы ҡушып болғатып ашарға.

❖ Тәндең ауырлығы кәмеһен өсөн мунса ингәндә йәки унан һуң эсеү өсөн әскелтем сәй әҙерләгеҙ: әфлисун ҡабығын, розмаринды, корицаны, ҡәнәферҙә самалап алып бешекләгеҙ. Был сәй көйефте күтәрә, көс-ҡеүәтте арттыра, йылыта, һауыҡтыра.

❖ Көндөң беренсе яртыһында ҡара сәй эсһәң, кискә табан күберәк йәшел сәй эсергә кәрәк. Ҡара сәйҙе шул уҡ йәшел сәй япраҡтарын технология буйынса киптереп яһайҙар, шуға ла унда тонусты күтәрә торған матдәләр барлыҡҡа килә. Сәй бешергәндә 1 балғалаҡ шәкәр ҡомо өҫтәһәң, катахин бүленеп сыға, был сәйҙең иң файҙалы матдәһе. Яңы бешерелгән сәй ҡан тамырҙарын киңәйтә, ҡаҡшаған нервылар системаһын яҡшырта, арыу бөтә.

❖ Ябығырға теләгәндәр аҙыҡҡа тоҙҙо әҙерәк һалһын. Ҡайһы саҡта уны лимон һуты менән алыштырырға була. Мәҫәлән, кәбеҫтәне турап, ҡырғыстан сөгөлдөр үткәреп ҡушҡас, тоҙ урынына лимон һуты һығып болғатырға була.

❖ 4 теш һарымһаҡты иҙеп, ярты стакан ҡайнатып һыуытылған һыу, 1 балғалаҡ бал өҫтәп, 4-5 сәғәт тоторға. Ашар алдынан 1-әр ҡалаҡлап эсергә. Ябығырға ла ярҙам итә, ҡан тамырҙарын да таҙарта.

**Флора БИКЕМБӘТОВА.**

*✓ Автор ижад иткән һәр әҫәр юғары поэтик кимәлдә. Уларҙа фекер көсө, һынлы тел, сатнап торған рифмалар, халыҡсан алымдар сағыулығы ярылып ята. Уның ижадының тағы бер сағыу үҙенсәлеге - сәсәнлек.*



ШУНДАЙ КЕШЕЛӘР БАР!

**Һуңғы йылдарҙа Урал Мостафиндың исеме беҙҙең Баймаҡ районында ғына түгел, Башҡортостанда ла танылa бара. Уның "Тәүбә тәсбихем", "Йәшәү - яҙмыш", "Илһам көсө", "Ғүмер - атылған уҡ" исемле китаптары уҡыусылары тарафынан йылы ҡабул ителде. Был китаптарҙа бирелгән фәһемле шиғырҙар, робағиҙар һәм мәҡәләләр һәр кемгә лә тормош һабаҡтары булырлыҡ ҡиммәткә эйә.**

# ЙӘЙҒОР ОСТАРЫН ТОТАШТЫРЫУСЫ...

## хыялый Урал йәшәй арабыҙҙа

Авторҙы беҙ ҡатмарлы яҙмышҡа дусар булған шәхес тип беләбеҙ. Әммә ул үҙе былай тип уйламай ғына түгел, башҡаларға ла ул турала һөйләргә ирек бирмәй. "Башынды түбәнерәк эйгән һайын, түбәңә төкөрөүсе күбәйә", - ти ул. Урал алсаҡ күңелле, көслө рухлы, етеҙ аҡыллы кеше булараҡ, ҡаршылыҡтарға, ауырлыҡтарға баш эймәҫкә тырыша. Үҙенең түҙемлеге менән башҡаларға дәрт өҫтәй:

*Донъя ғәмен эсәм услап-уртлап,*
*Һис тә юҡтыр уның ахыры.*
*Ғәзиз йәнем йәшәй наҙлап-һыҙлап,*
*Түгелмен мин әҙәм бахыры...*

Урал Мостафин Баймаҡ районы 2-се Этҡол ауылында 1951 йылдың 17 ғинуарында тыуған. Ауыл мәктәбенән һуң Өфөләге 1-се интернат-мәктәптә урта белем ала. 1968-1973 йылдарҙа Өфө авиация институтының авиация моторҙары факультетын тамамлап, инженер һөнәрен үҙләштерә. 1973-1975 йылдарҙа армия сафтарында хеҙмәт итә. 1975-1982 йылдарҙа Стәрлетамаҡ ҡалаһының "Красный Пролетарий" заводында инженер-конструктор, инженер-технолог вазифаларын атҡара. 1982 йылда Баймаҡ районы партия комитеты саҡырыуы буйынса тыуған яғына ҡайтып, яуаплы вазифалар башҡара.

Бәлә - аяҡ аҫтында, тип, халыҡ тоғро әйтәләр. Яҡшы ғына эшләп йөрөгән ерҙән ҡазаға осрай Урал. Фажиғә һөҙөмтәһендә умыртҡа һөйәге имгәнә, аяҡ-ҡулдары хәрәкәтһеҙ ҡала. Өфө, Мәскәү дауаханаларында дауалана. Әммә аяҡҡа баҫа алмай. Шул уҡ ваҡытта бөгөлөп тә төшмәй. Күңел ашҡыныуҙары уны ижад юлына алып килә. "Хәрәкәтһеҙ ҡалыуыма 16 йыл булып та китте, ләкин өмөтөмдө өҙмәгәнмен әле..." ти Урал Сабирйән улы. Һау кешеләр, туғандарым, дуҫтарым миңә ҡарап сәмләнеп йәшәргә өйрәнһен, сөнки ғүмер кешегә бер тапкыр ғына бирелә, уның ҡәҙерен белеп, заяға үткәрмәһәк, бер-беребеҙҙе ҡурсалап йәшәргә өйрәнһәк ине, тип көйөнә. Бер кемгә лә һуҡранмайым, минең менән кәңәшләшәләр, әйткәнемә ҡолаҡ һалалар, тыңлайҙар, хәлдәренән килгәнсе ярҙам итергә әҙер торалар, донъяла яҡшы кешеләр күберәк барыбер, тип ҡыуана. Кеше ярҙамына мохтаж әҙәм балаһына кешеләрҙең алсаҡ йөҙө, яғымлы һүҙе, йылы ҡарашы йәшәүгә өмөт, дәрт, күтәренкелек саткылары бирә, яҡшыраҡ йәшәргә сәмләндерә, тип тә өҫтәй.

УЙЛЫҒА - УЙ

**"Хәрәкәтһеҙ ҡалыуыма 16 йыл булып та китте, ләкин өмөтөмдө өҙмәгәнмен әле..." ти Урал Сабирйән улы. Һау кешеләр, туғандарым, дуҫтарым миңә ҡарап сәмләнеп йәшәргә өйрәнһен, сөнки ғүмер кешегә бер тапкыр ғына бирелә, уның ҡәҙерен белеп, заяға үткәрмәһәк, бер-беребеҙҙе ҡурсалап йәшәргә өйрәнһәк ине, тип көйөнә. Бер кемгә лә һуҡранмайым, минең менән кәңәшләшәләр, әйткәнемә ҡолаҡ һалалар, тыңлайҙар, хәлдәренән килгәнсе ярҙам итергә әҙер торалар, донъяла яҡшы кешеләр күберәк барыбер, тип ҡыуана.**

*Ҡәһәрем юҡ таш бәғерле туғаныма,*
*Дәғүәм юҡ үҙ ғәменә тулғанына,*
*Һуҡранам тик үҙем мыжыҡ булғаныма,*
*Туғаныма бәлә булып тыуғаныма...*

Эйе, күпме йылдар аяҡтары ер йылыһын тоймаһа ла, уның күңеле саф, ниәттәре изге, рухы күтәренке. Уралдың ижадында моң, һағыш, һыҙланыуҙар сағылған кеүек булһа ла, ул үҙ яҙмышы өсөн генә көйөнмәй, уҡыусыларын эскерһеҙлеккә, сабырлыҡҡа өндәй.

*Барыһы ла булды. Ҡыҙғаныс та,*
*Үкенес тә, һағыш, ҡыуаныс.*
*Ғүмер үтә, йәшәү дауам итә,*
*Хур булманым, шуныһы йыуаныс,* - тип әйтә алған кешенең рух көсө ниндәй кимәлдә икәне яҡшы аңлашыла. Автор ижад иткән һәр әҫәр юғары поэтик кимәлдә. Уларҙа фекер көсө, һынлы тел, сатнап торған рифмалар, халыҡсан алымдар сағыулығы ярылып ята. Уның ижадының тағы бер сағыу үҙенсәлеге - сәсәнлек, ҡобайыр жанрына эйәреүе. Был донъяла булған теге йәки был хәл-ваҡиғаларҙы һүрәтләгәндә ул үҙен ысын мәғәнәһендә һүҙ оҫтаһы итеп таныта.

*Йәшәр булһаң, яуыз менән килешмә лә,*
*Аһ-зарыңды ҡуштан менән бүлешмә лә,*
*Хистәреңде, шиктәреңде ары йәшер,*
*Яман килеп хәл-мәлеңде белешһә лә...*

Урал Мостафинды уҡыусылары шәхсән зар-кисерештәре тураһында ғына уйланыусы итеп түгел, заманының, йәмғиәттең, милләтенең мөһим проблемалары тураһында фекер йөрөтөүсе, теләк-ышаныстарын, хыял-ынтылыштарын сағылдырыусы, үҙенсә баһа биреүсе тип белә. Ул әҫәрҙәрендә мәғәнәһеҙ хискә бирелмәй, ә көндәге тормошта ябай Ер кешеһен борсоған, тетрәндергән, хисләндергән кисерештәр тураһында, әҙәм балаһының һағыш, шатлыҡ, ҡайғылары тураһында уйланып, яҡшылыҡҡа юлдар, күперҙәр эҙләй, һуҡмаҡтар, баҫмалар һала. Шуға күрә лә уй-теләктәре уҡыусыларының күңеленә яҡын, яғымлы һәм фәһемле. Урал шиғырҙарында елдәрҙә елпенеп ерҙәр гиҙә, осконға әүерелеп күктәргә оса, ағымдарға ятып хистәрҙә йөҙә, яҡшылыҡҡа һыйынып үрҙәргә менә, яманлыҡҡа эйәреп гүрҙәргә төшә. Бөтәһен дә үҙ күҙҙәре менән күреп, үҙе тойоп, татып, кисереп, түҙеп белгеһе килә. Белмәгәндәре тураһында ул өндәшмәй ҙә. Тәбиғәт балаһы бала саҡ хәтирәләрен барлай: яланаяҡ йүгереп йөрөгән ысыҡлы үләнде, балыҡ ҡармаҡлаған ятыуҙарын, сиңерткә баҫтырған яр баштарын, донъяһын киңәйткән бейек тау таштарын, йәйге селләлә тәнен рәхәтләндергән йылғаһын, еләктәренә ләззәтләнгән туғайҙарын һағына, балалыҡ хистәренә рәхәтләнеп һөйөнә. Шул тәбиғәт байлыҡтарын, күңел сафлыҡтарын һаҡлай алһа ине халҡым, тип көйөнә. Шәхсән уй-һығымталары, дәлилдәре башҡаларҙың кисерештәре менән ауаздашлығына инанып, әйтергә форсаты юҡтарҙың фекерен дә йәмғиәткә еткергеһе килә. Һәр бер әҫәрендә яҡшыларҙың яғында үҙе булырға тырыша һәм башҡаларҙы ла өндәй. Йыһан киңлегендә тере йәндәр булһа, бәлки, улар бер-береһе өсөн йән атып торалар ҙыр, бәлки, унда ярлыҡау барҙыр, бәлки, унда йәшәгәндәр бәхетлелер, тип, һағыштарға батып, ҡарғыштарҙан ялҡып, алҡыштарҙан ҡалҡып, Ай, Ҡояш, йондоҙҙарға ынтыла, камиллыҡҡа хыялдарында ашҡына ул.

"Хәҙерге мәрхәмәтһеҙ донъяның тауҙай яҙыҡлыҡ, ҡаршылыҡтары араһынан тәүбә тәсбихенә затлы таштар эҙләүсе, йәйғорҙоң остарын тоташтырып маташыусы шул хыялый Урал ғына ҡалғандыр инде арабыҙҙа", - тип яҙғайны Буранбай Исҡужин уның "Йәшәү - яҙмыш" исемле китабын уҡығас. Дөрөҫтөр! Аҫылғужа Баһумановтың: "Уралдың шәхсән фажиғәһен донъяуи фажиғәгә әйләндермәүенә һоҡланам, тән һыҙлауҙарына түҙеп, йән һыҙлауҙарын үҙ итә белгән кеше шиғриәттә үҙ урынын табыр", - тигәне лә тоғро. Уның тураһында ҡәләмдәштәренең , мәҫәлән, Лира Яҡшыбаеваның: "Көслө рухлы, сая ҡәләмдәшем, кем һоҡланмаҫ һинең булмышыңа", Гөлназ Ҡотоеваның: "Уҡыусыһы күңеленә күперҙәрҙе ул, күңел йылыһын ихлас өләшергә ҡолас йәйеп килеп, үҙе һала", Гөлфиә Янбаеваның: "Үҙ тормошо, үҙ яҙмышы һынауҙарының иң яҡшы тәжрибәләрен кешелеккә еткереүсе", Мөхәммәт Нурмөхәмәтовтың: "Яҙмышына һылтанып, төшөнкөлөккә бирелмәй, хисләнеп уҡырлыҡ шиғырҙар ижад итеүе үҙе батырлыҡ", Ҡәҙим Аралбайҙың: "Тормош хәлдәренә үҙ ҡарашлы, үҙ фекерле кеше генә тәрән мәғәнәле әҫәрҙәр ижад итә ала", - тип әйтеүе Урал Мостафинға яңа башлағандан бире көс, дәрт, ҡыйыулыҡ, яуаплылыҡ бирәлер. Ул шулай уҡ үҙенә ярҙамға килергә әҙер торған дуҫтарына сикһеҙ рәхмәтле. Тимербулат Үҙбәков, Әхәт Байсурин, Миңлеғәле Ғүмәров, Нурғәли Ҡарасов, Мирза Хисмәтуллин, Нур Тажетдинов, Рәфҡәт Дәүләткилдин һәм башҡа улар кеүек ихлас күңелле дуҫтары булыуына ҡыуанып бөтә алмай. Аҡса ла, хөкүмәт тарафынан ҡабул ителгән ҡарар-закондар ҙа, ярҙам да әҙәм балаһының кеше менән аралашыу ихтыяжын ҡәнәғәтләндерә алмай шул. Нисәмә йылдар буйы яңғыҙлыҡта йәшәгән, йоҡоһоҙ үткәргән төндәрендә һыҙланып-уйланып ятҡанда йөрәк әрнеүе менән яҙылған "Яңғыҙлыҡ" шиғыры быға асыҡ миҫал.

*Яҙанан да яман яңғыҙ булыу,*
*Кеше көнлө булыу - ғәрәсәт.*
*Ярлыҡаһа Хоҙай түҙгәндәрҙе,*
*Барҙыр әле бәхет күрәсәк.*
*Үҙ башынан үтмәҫ аңламаҫты*
*Тормош миңә һүҙһеҙ аңлатты.*
*Кешеләрҙән ялҡһаң, минән һора,*
*Аралашмай йәшәү анһатмы?*

Ғөмүмән, Хоҙай Тәғәлә ярлыҡауына мохтаж кеше яҙмыш янауҙарына, тормош һынауҙарына бирешмәй, милләттәштәренең яҡшыраҡ, инсафлыраҡ була алыуына, киләсәк быуындың рухи именлегенә өмөтләнеп, тамсылай ҡыуанысына, осҡондай бәхетенә лә рәхмәтле булып йәшәй, һыҙланыуҙарҙан күңелен төшөнкөлөк болото баҫа башлаһа, ҡулына баянын ала ла, бөтә һағыш, зарҙарын уйнаған көйөнә һалып, тышҡа сығара. Ҡайғыларынан йырлай, шатлыҡтарынан илай алған кеше ул замандашыбыҙ -Урал Мостафин. Бөгөнгө көндәрҙә ул 60 йәшен тултырҙы. Был йылдарҙа шатлыҡ-ҡыуаныстарын да татыны, тормоштоң әсе һурпаһын да әрһеҙ эсте. Әммә ул "бирешмәҫкә, йәшәргә, кешесә йәшәргә" тигән девизына тоғро ҡалды. Шундай ауыр хәлдә лә рухын юғары кимәлдә һаҡлауы, ҡатмарлы ижад эшен үҙләштереп, лайыҡлы әҫәрҙәр тыуҙырыуы беҙҙе һоҡландырмай ҡалмай.

Урал Мостафин кеүек юғары рухлы шәхес менән аралаша алыуыбыҙға, уның менән замандаш булыуыбыҙға бер заман ғорурланырбыҙ әле, биллаһи!

60 йәше тулыуы айҡанлы Урал Мостафинды - Баймаҡ Корчагинын уҡыусылары исеменән ҡотлайбыҙ. Артабан да рух көсөң юғары булһын! Ижади уңыштар теләйбеҙ.

**Азамат ТАЖЕТДИНОВ.**
**Сибай ҡалаһы.**



*ХӘҠИҠӘТИ ҺҮҘ*

# САРМАТ АЛТЫНЫНЫҢ ВАРИҪЫ КЕМ?

**(Башы 1-се биттә).**

### Филиппов ҡурғандары

Филиппов ҡурғандары бик ҙур: диаметры 80-дән 100 метрға тиклем, бейеклеге - 6-9 метр. Археологтар уларҙы "батша ҡурғандары" тип атай, улар фекеренсә, был ҡурғандар хан статусындағы айырыуса арҙаҡлы кешеләр ерләнгән урындарҙа төҙөлгән.

1-се ҡурған үҙәгендә, мәҫәлән, 2 метр тәрәнлектәге ерләү камераһы (21х19 м) табыла. Уның стеналары үҙ ваҡытында ағас буранан төҙөлгән, өҫтө лә рәтләп бүрәнә менән ябылған. Ул соҡорға оҙон, тар, һарҡыу коридор (дромос) алып бара, коридор иҙән кимәлендә камера менән тоташа. Тоташҡан урында ике яҡлап ағас бағаналар эҙе бар. Был камераға инеү юлында ошо бағаналарға нығытылған ишектәр булған, тигән фараз бар.

Ҡурғанда элек кемдер булған, ваҡ ҡына алтын һәм бронза әйберәләрҙең йоҙләгән кисәге унда ғәйәт ҙур хазина булыуы хаҡында һөйләй. Ҡурғанды төҙөүселәр, замандаштарының уны талауы ихтималлығын белгәнгә күрә, ерләү камераһы янында 1 метр тәрәнлегендә йәшерен соҡор эшләй. Соҡорға хазиналы ағас һандыҡ (йәшник) урынлаштыра. Унда 26 алтын болан һыны, алтын ҡомған һәм тышҡы яҡтан ҡатмарлы орнамент менән биҙәлгән бик күп ағас сынаяҡтар була. Һуңғыларында һыбайлы, болан, балыҡ, айыу, ҡош һәм башҡа һындарҙы танырға мөмкин.

Төҙөлөшө буйынса ҡатмарлы ерләү камераһы өҫтөндә үҙ ваҡытында 100 кв.м самаһы майҙанлы бейек ағас ҡоролма була. Уның өҫтөнә тупраҡ өйөлгән. Ҡурған тау мәлдә түңәрәк көмбәҙле ғәйәт ҙур пирамиданы хәтерләтеүенә шик юҡ. Ваҡыт үтеү менән ағас нигеҙ серей, тупраҡ өйөмө ишелә һәм ҡурғандың өҫтөндә тәрән (6 метрға тиклем) һәм киң (диаметры 40 метрға тиклем) соҡор хасил була.

2004 йылдан алып Филиппов ҡурғандарын Мәскәүҙең билдәле профессоры Л.М. Яблонский тикшерә. Ул 10-дан ашыу ҡурған таба. Улар төҙөлөшө һәм табышы буйынса үрҙә һүрәтләнгән 1-се ҡурғандан әллә ни айырылмай. Ҡурғандарҙа бик күп биҙәүес табыла, шулар араһында алтын беләҙектәр, ун тинлектәр, биҙәлгән кейемдәр, көмөш амфора айырылып тора. Филиппов табыштарының йәше, нигеҙҙә, беҙҙең эраға тиклемге V - IV быуаттар тип билдәләнә.

Көньяҡ Уралда әле Филиппов ҡурғандарына оҡшаш 10 ҡурған билдәле: мәҫәлән, Башҡортостандың Хәйбулла районында, Силәбе һәм Ырымбур өлкәләрендә. Урал өлкәһендәге диаметры 160 метрлыҡ, 18 метр бейеклектәге ошондай уҡ ҡурған иғтибарға лайыҡ. Ул беҙгә билдәле булған ҡурғандарҙың иң ҙурыһы һәм үҙенең тикшереүселәрен көтә.

Үрҙә атап үтелгән ҡомартҡылар шул дәүер йәмғиәтенең урта һәм түбән ҡатлам кешеләрен ерләү урыны булып хеҙмәт иткән уртаса һәм ҙур булмаған тиҫтәләрсә, йөҙҙәрсә ер һәм таш ҡурғандар солғанышында урынлашҡан.

### Ҡомартҡыларҙы кем ҡалдырған?

Көньяҡ Уралдағы иртә тимер быуат ҡурғандарының фәнни танып-белеү әһәмиәтен Дала Евразияһы буйлап таралған ошондай меңләгән ҡомартҡыны иҫәпкә алмайынса объектив баһалап булмай. Күп кенә ғалимдар уларҙы һундар (Монголия), сактар (Ҡаҙағстан, Көньяҡ Себер), скифтар (Төньяҡ Ҡара диңгеҙ буйы) менән бәйләй. Тәбиғи, гәзит уҡыусыларҙы ниндәй ҡәбиләләр ошондай мөһабәт ҡомартҡылар ҡалдырған һәм башҡорттарҙың боронғо ата-бабаларына уларҙың ниндәй ҙә булһа мөнәсәбәте бармы, тигән һорау ҡыҙыҡһындырыр. Эйе, мөнәсәбәте бар, улай ғына ла түгел, туранан-тура бәйләнеше бар.

Көньяҡ Урал ҡәбиләләре тураһындағы боронғо һәм дөрөҫ мәғлүмәттәр беҙҙең эраға тиклемге V быуатҡа барып тоташа. Уларҙы бер ни тиклем ваҡыт Ҡырымдың грек ҡалаларында йәшәгән грек тарихсыһы Геродот асҡан. Тикшеренеүселәр уйлауынса, уның мәғлүмәт биреүселәре араһында Ра (бөгөнгө Волга) йылғаһынан көнсығышҡа табан Рифей тауҙарының (Урал тауҙары) таулы-урманлы ерендә - даи (был этнонимдың варианты дайыҡ, дахо), исседон, аримасп, аргиппей, иирк, көньяҡтараҡ их-сак һәм массагеттар кеүек ҡәбиләләр йәшәүен хәбәр иткән скифтар ҙа була. Һуңғыларын боронғо грек, фарсы һәм ҡытай авторҙары бер тауыштан Урта Азия, Ҡаҙағстан, Ҡырғыҙстан менән бәйләй. Улар урынлашҡан төньяҡ сик Көньяҡ Урал далаларынан үтә.

Атап үткән ҡәбиләләрҙә беҙҙе айырыуса даи (дайыҡ) ҡыҙыҡһындыра. Уның этнонимы башҡорттарҙың йайыҡ, шулай уҡ Яйыҡ йылғаһының боронғо һәм бөгөнгө атамаһынан бик айырылмай. Был Джайыҡ гидронимы тәүге тапҡыр Рим авторы Птоломейҙың (беҙҙең эраның II быуаты) картаһында аныҡ ҡына билдәләнә.

Йәғни Даи (Геродот) этнонимы менән Джайыҡ (Птоломей) гидронимының тамырҙары уртаҡ булыуында шик тыуымай. Дайыҡ этнонимының Йайыҡ гидронимына әүерелеүе дайыҡтарҙың ошо йылға бассейнында оҙаҡ ваҡыт көн итеүенә бәйле, тип иҫәпләргә нигеҙ бар. Ә был ул ваҡытта дайыҡтар Көньяҡ Уралдың иң эре төркөмө булған тигән фекергә килтерә. Ошо ҡараштың асыҡлауҙа бәхәсһеҙ бер факт ҡыҙыҡһыныу уята.

Беҙҙең эра башындағы Рим географтары үҙҙәренең картаһында дайыҡтарҙы Каспий диңгеҙенең көньяҡ ярында урынлаштыра. Был беҙгә Көньяҡ Урал дайыҡтары үҙҙәренең сығышы менән Көньяҡ Каспий буйындағы дайыҡ ҡәбиләләренә бәйле, тип фекер йөрөтөргә нигеҙ бирә. Тимәк, улар Уралға күсеп килгән халыҡ. Дайыҡтар Көньяҡ Уралға Геродотҡа тиклем үк (беҙҙең эраға тиклем V быуат) килгәнгә оҡшай. Улар өсөн яңы ерҙәр уңдырышлы яҡ булған һәм улар ошонда төп халыҡ булып киткән. Уларҙың килеһе йоҙйыллыҡ ҡәбиләләр менән бәйләнеше гидроним атамаһында ғына түгел, йайыҡ этнонимының бөгөнгө Ырымбур башҡорттары араһында һаҡланып ҡалыуында ла асыҡ күренә. XX быуаттың 70-се йылдарында профессор С.Ф. Миржанова тарафынан теркәлгән йайыҡ һүҙенең ырыу атамаһы (этнонимы) булыу факты ошоға дәлил булып тора.

Был төшөнсә башҡорт халҡының һәм, дөйөм алғанда, Көньяҡ Уралдың боронғо тарихында бик күп үҙәк проблемаларҙың сиселешенә үҙенсәлекле асҡыс булып хеҙмәт итә.

Мәҫәлән, "Урал батыр" героик эпосы боронғо башҡорттарҙың күренекле ҡомартҡыһы булып тора. Ул идея-композиция планында, геройҙарҙың исеме һәм ғәмәлдәре буйынса бик боронғо дәүерҙән алып VIII быуат башына тиклем Урта Азия, Иран, Афғанстан дәүләттәрендә рәсми йәшәгән зороастрия диненең төп тексы Авестаға бик яҡын. Был оҡшашлыҡты хәҙер барыһы ла таный: тикшеренеүселәр бер тауыштан "Урал батыр" героик эпосы зороастризм диненең көслө йоғонтоһонда барлыҡҡа килгән, тип белдерә.

Зороастризм дине буйынса донъя ике ҡапма-ҡаршылыҡлы башланғыстар: изгелек һәм яуызлыҡтың көрәше берҙәмлегенән тора. Изге көстәр башында - алла Ахура мазда, ә яуыз көстәрҙекендә Ахриман тора. Тимәк, тәүгеһен - ҡояш, ә икенсеһен ер аҫты (һыу аҫты) батшалығы менән тиңләйҙәр.

"Урал батыр" эпосының сюжеты шул уҡ принцип буйынса төҙөлгән. Унда Урал батыр изге көстәргә етәкселек итә, ә ер аҫты батшалығы хакимы - Шүлгән образы уға ҡаршы ҡуйыла. Йыма, Дахака һәм Ардви-Сура исемле геройҙар башҡорт эпосындағы Һомай, Ҡаһҡаһа, Сура батыр образдарына оҡшаш, улар ҙа шундай уҡ сифаттарға эйә. Был исемлекте дауам итергә мөмкин, әммә был персонаждарҙың билдәле бер тәбиғәт күренештәренә хакимлыҡ итеүен билдәләү өсөн үрҙә әйтелгәндәр ҙә етер. Мәҫәлән, Һомай һәм Йыма образдары бөтә хайуандар һәм ҡоштар донъяһына хакимлыҡ итә.

**Нияз МӘЖИТОВ,**
**БР Фәндәр академияһы академигы.**

**(Дауамы бар).**

*АРҘАҠЛЫ БАШҠОРТТАР*



Рәфис БАТЫРҠАЙ һүрәте.

# ҠОЛ ҒӘЛИ

## (1170 йылдар тирәһе - XIII быуаттың тәүге яртыһы)

Урал-Волга төбәгендә Болғар осоро яҙма әҙәбиәте һәм мәҙәниәте тарихында иң мөһим урынды тотҡан, шиғриәтебеҙҙең шишмә башын хасил иткән берәгәйле поэтик ҡомартҡы бар. Ул - башҡорттар һәм татарҙар араһында телдән дә, ҡулъяҙма хәлендә лә (күп төрлө күсермәләрҙә.- **Авт.**) киң таралған, оҙон быуаттар буйы быуындан-быуынға, ҡулдан-ҡулға тапшырыла килгән, халыҡ араһында киң танылыу яулаған һоҡланғыс һәм илаһи мөхәббәт дастаны - "Кисса-и Йософ" (йә иһә "Йософ китабы", "Йософ үә Зөләйха"). Был бөйөк әҫәрҙең авторы - боронғо башҡорт һәм боронғо болғар шағиры, Әйле ырыуы башҡорто Ҡол Ғәли.

Шағирҙың тормошо һәм ижады хаҡында үҙе йәшәгән дәүерҙә теркәлгән тарихи сығанаҡтар һаҡланмаған. Уның исемен, затын аныҡ ҡына күрһәткән мәғлүмәттәр күренекле башҡорт уҡымышлыһы, шағир һәм ғалим Тажетдин Ялсығолов әл-Башҡордиҙың XVIII быуат аҙағында - XIX быуат баштарында яҙылған "Тәуарихе Болғарие" тигән киң билдәле тарихи-әҙәби хеҙмәтендә Әйле ҡәүеме башҡорттарының шәжәрәһе рәүешендә урын алған. Был әҫәрҙә Т. Ялсығолов Әйле ырыуы башҡорттарының шәжәрәһен килтерҙе, үҙенең ун һигеҙенсе быуын боронғо нәҫеллек ебе Ҡол Ғәлигә барып тоташҡанлығын раҫлай.

Иң әүәл - Әйле башҡорттарының Ҡол Ғәлигә тиклемге быуындарының ил башы, башҡорт ханы Иштәктән (йә иһә Истәктән) башланған өлөшөн күрһәтәйек: Иштәк - (уның улы) Бәкатун - Әйле - Туҡый хан - Айҙар хан - Сәйет хан - Әмир хан - Солтанморат хан - Сәлим хан - Илһам хан - Ғәбдулла хан - Ғәлим бәк - Мирхажи - Ҡол Ғәли. Шәжәрәнең был өлөшөнән күренеүенсә, Ҡол Ғәлиҙең ата-бабаларының Туҡый хандан алып Ғәлим бәккә тиклем туғыҙ быуыны Болғар дәүләтендә арҙаҡлы хандар династияһын билдәләй.

Ҡол Ғәлиҙең үҙе һәм үҙенән һуңғы нәҫел-нәсәплек ебе тураһында түбәндәгеләр билдәле. Ҡол Ғәлиҙең атаһы Мирхажи, уның атаһы Ғәлим бәк, уның атаһы Ғәбдулла хан булған. Ғәбдулла хан Болғарҙа илле йыл ханлыҡ ҡылған. Әммә Ғәлим бәк заманында ханлыҡ һәләкәткә осрай. Болғар дәүләтен татар-монгол яуы баҫып ала. Ғәлим бәк тә, уның улы Мирхажи ҙа Кәшан ҡалаһында береһе мөҙәрис, икенсеһе имам булып тора. Вафаты - ул замандың Башҡорт йортона ҡараған Зәй тамағында.

Ҡол Ғәлиҙән Тажетдин Ялсығоловҡа тиклемге быуындар:

Ҡол Ғәли. Уның улы Мирғәли ("Үргәнестә мөҙәрис булмыш, шунда вафат"), Мирғәлиҙең улы Миршәриф ("Үргәнестә үә Хиуала алтмыш йыл мөҙәрис булып, Хиуала вафат булды").

Уның улы Мирсәйет ("дәүерендә унан ғалим һәм фазил әҙәм булманы, һис бер фән ҡалманы, һәр берenә бер хашийә әйтте").

Уның улы Нурсәйет ("Үргәнес, Хиуа үә Ҡонғратҡа егерме өс йыл хан булып, ҡыҙылбаштар шаһы Надир шаһтың улдары үлтерҙеләр").

...Сәйҙәш ибн Нурсәйет ("Әй һыуының башында, Сәйҙәш тигән түбәлә, йорт яһап, ханлыҡ тотто, башҡорт хандары үлтерҙеләр").

"Сәйҙәштең бер улы Ҡоштаймаҫ. Бынан Ҡоштаймаҫ әйләһе булалыр.

Тенеш (Тыныш). Бының ике улы: Көҙәй, Ҡошсо. Былар дәхи башҡорт хандары.

Көҙәй. Бынан Өфө өйәҙе көҙәй әйле башҡорттары".

Артабан: Яныш - Бабыш - Үлмәҫ хажи ибн Бабыш - Ғәбдерахман хажи - Ялынбай мулла - Ҡотлобулат мулла - Ейәнсура - Йәнтимер - Мәмәтҡол - Ялсығол хажи.

Ҡол Ғәли, тимәк, башҡорттоң кешелек донъяһында меңәрләгән йыллыҡ тарих төпкөлдәренән килгән ырыу тармағының затлы уҡымышлылар һәм арҙаҡлы хандар династияһының бөйөк бер вәкиле. "Кисса-и Йософ" дастаны 1212-1233 йылдар эсендә яҙылып, Урал-Волга буйҙарын татар-монголдар баҫып алыр алдынан (1236 йыл) тамамланған, тип фараз ителә. Авторҙың 45 йыл Харәзмдә мөҙәрис булып тороуы, яу ваҡытында ҡырғыҙҙарға ҡасып, аҙаҡ ата йортона - Зәй тамағына ҡайтыуы тураһындағы мәғлүмәттәрҙә, ул йәшәгән дәүерҙәге башҡа ҡайһы бер исемдәр, ваҡиғалар менән сағыштырып ҡарағанда, уның тыуған ваҡыты 1174 йылдан алдараҡ булырға мөмкин, тигән фаразлау ышаныслыраҡ күренә.

**Рәшит ШӘКҮР.**

**"Арҙаҡлы башҡорттар" китабынан.**

# ҠАРАҢҒЫ

## ЯҠТЫ КӨН

**Эскелеккә ҡаршы көрәшергә кәрәкме, әллә айыҡ йәшәргә өйрәнергәме? Градуслы эсемлек беҙҙең генетик ризыҡ була аламы? Һыра алкоголизмының ҡурҡынысы нимәлә? Эскелеккә ҡаршы көрәштә дин ниндәй урынды биләй? Бөгөнгө ҡорҙа Бөтә Рәсәй "Айыҡ Рәсәй өсөн" ойошмаһы рәйестәше Марат АБДУЛЛИН, "Айыҡ Башҡортостан" ойошмаһы рәйестәше Роберт ДӘҮЛӘТШИН һәм Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты рәйесе урынбаҫары Фәнзил ӘХМӘТШИН менән ошо һәм башҡа һорауҙарға яуап эҙләнек.**

**▸ Беҙҙең илдә, ғәҙәттә, ниндәйҙер кампания иғлан ителһә, һөҙөмтәһе киреһенсә килеп сығыусан. Коррупцияға ҡаршы көрәш башланһа, ул, киреһенсә, шашына, штрафтарҙың хаҡы артһа, ришүәт хаҡы ла күтәрелә. 1985 йылдың 1 июленән "ҡоро закон" көсөнә ингәйне. Уға тиклем ауылдарҙа сәмәй ҡоя белмәйҙәр ине, халыҡ сәмәй ҡойорға өйрәнде. Эсеүенән туҡтай алмағандар төрлө химикаттар эсеп үлеп бөттө, иҫенә килгәндәр эсеүен ташланы, иҡтисад көрсөккә терәлде, ил тарҡалды. Ил эскелеккә ҡаршы кампания башланғас тарҡалды, тип раҫламайым. Әммә бында ниндәйҙер хикмәт бар һымаҡ...**

**Марат:** Мин был фекер менән 20 процентҡа килешәм. 1985 йылда иғлан ителгән "ҡоро закон"дың төп етешһеҙлеге халыҡты алдан әҙерләмәүҙә булғандыр. Ул ваҡытта партияның йоғонтоһо көслө булған, киң мәғлүмәт саралары аша халыҡты алдан әҙерләп, бер-нисә йыл пропаганда алып барылһа, һөҙөмтә икенсерәк булыр ине. Беҙҙә, ғәҙәттә, тота һалып закон йәки указ сығаралар ҙа, кампания башлайҙар, халыҡ шаңҡып ҡала. Бәлки, закон, указ ярҙамында түгел, ә тәүҙә мәғлүмәт саралары ярҙамында өгөт, аңлатыу эше үткәрергә кәрәктер.

Беҙ әле "Айыҡ Башҡортостан" йәмғиәте төҙөп йөрөйбөҙ. Үҙебеҙҙең алға тәү сиратта йәштәрҙе һәм балаларҙы тәрбиәләргә тигән маҡсат ҡуйғанбыҙ. Әлбиттә, бер-ике йыл эсендә генә ниндәйҙер үҙгәрештәр булыр тип өмөтләнмәйбеҙ. Төп маҡсат киләсәккә йүнәлтелгән. Рәсәйҙең патриот ғалимдары 1985 йылда иғлан ителгән "ҡоро закон"дың зыянына ҡарағанда файҙаһы күберәк булыуын раҫлай. Мәҫәлән, үлем осраҡтары кәмемәһә лә, кинәт күтәрелгән тыуым демографияны бер кимәлдә тотоп тора. Тап 1985-1988 йылдарҙа тыуған балаларҙың ғаилә ҡороп, үҙҙәренең балалары тыуыуы арҡаһында барлыҡҡа килде был тотороҡлоҡ. Икенсенән, "ҡоро закон" йылдарында суицид яҡынса 40 процентҡа, кеше үлтереүҙәр - яҡынса 55 процентҡа, көсләүҙәр яҡынса 70 процентҡа кәмегән. Шулай уҡ юл фажиғәләренең дә кәмеүе күҙәтелгән. Иҡтисади яҡтан ҡарағанда файҙа күберәк булған. Әммә федераль мәғлүмәт саралары был мәғлүмәтте халыҡҡа еткереүҙе кәрәкле тип тапмай. Ул мәғлүмәттәрҙе халыҡтың күпселеге файҙалана алмаған Интернет сайттарҙан алырға, радио, телевидение тапшырыуҙарында ғына ишетергә була.

**Роберт:** Мин айыҡ атай-әсәйҙән тыуған балаларҙың береһемен. Силәбе өлкәһендә, Татарстан Республикаһында тап шул осорҙа тыуған балалар хәҙер килеп айыҡлыҡ хәрәкәте башлай. Рәсәйҙә бындай айыҡлыҡ кампаниялары элек тә булған. Тарихтан белеүебеҙсә, уның тәүгеһе - 1861 йылда, крепостнойлыҡ бөтөрөлгәс, икенсеһе - революция йылдарында, өсөнсөһө - Бөйөк Ватан һуғышы алдынан була, дүртенсеһе иһә - 1985 йылда. 1985 йылғы "ҡоро закон" бары тик эскелеккә ҡаршы булған, ә наркотиктар проблемаһы күтәрелмәгән. Хәҙер иһә беҙ наркотик менән алкоголь бер үк төрлө яуызлыҡ икәнен беләбеҙ, балаларҙы, йәштәрҙе уларҙың икеһенән дә ҡурсырға кәрәк. Иң тәүҙә аңлатыу юлы менән.

**Фәнзил:** Айыҡлыҡ кампанияһының иң ҙурын Мөхәммәт ғ.с.с. үткәргән инде: хәмер - харам, тигәндән һуң бөтә ғәрәптәр өйҙәрендә ултырған мискә-мискә шараптарҙы сығарып түгә һәм ошо түгелгән шарап һөҙөмтәһендә урамдарҙа батҡаҡ барлыҡҡа килеп, бысрап ята. Был - тарихтағы алкоголь ҡулланыуға ҡаршы иң ҙур кампания.

**▸ Беҙ гел нимәгәләр ҡаршы көрәшергә өйрәнгәнбеҙ. Психологтар алкоголизмға ҡаршы көрәшергә кәрәкмәй, айыҡ тормош төҙөргә кәрәк, тиһә, философтар, ҡараңғы төндө әрләгәнсе, яҡты көн тураһында хыяллан, ти...**

**Марат:** Көрәш тигән һүҙҙе ҡулланмай булдыра алмайбыҙ барыбер. Мәҫәлән, айыҡлыҡ өсөн көрәшмәй булмай. Сөнки беҙҙе эсерергә, беҙгә көсләп араҡы ҡойорға маташалар, беҙ ул кешеләр, ул йәмһеҙ ғәҙәттәргә ҡаршы торорға тейешбеҙ. Беҙ үҙебеҙҙең милләттәштәребеҙҙе, киләсәгебеҙҙе эскелеккә ҡаршы һәм айыҡлыҡ өсөн көрәшеп яҡларға тейешбеҙ.

**Фәнзил:** 1985 йылдағы "ҡоро закон"дың һөҙөмтәһен беҙ 1990 йылда күрҙек. Халыҡ айыҡты һәм әкренләп суверенлы республикалар барлыҡҡа килде. Сөнки айыҡ кеше генә үҙенең киләсәге тураһында уйлай ала. Ысын мәғәнәһендә ҙур үҙгәрештәр, һынылыш мәле булды ул йылдар. Тыйыу - совет ҡоролошоноң бер кире яғы ине. Рәсәйлеләр кирегә бөткән халыҡ. Ул мотлаҡ тыйғандың киреһен эшләйәсәк. Яҡшылап һөйләшеп, яҡшы эште аңлатып бирһәң, ул идеяны күтәреп алырға шулай уҡ әҙер тора. Шуға халыҡтың үҙенә мөрәжәғәт итергә, лидерҙарҙы табырға, уларҙы дәртләндерергә кәрәк. Әлегә ундай лидерҙар дөйөм Рәсәй кимәлендә яҡлау тапмай. Әммә был яңы ойошторолған айыҡлыҡ өсөн хәрәкәт халыҡта яҡлау табасаҡ, тәжрибә уртаҡлашыу майҙанына әйләнеп, билдәле бер кимәлдә административ кәртәләрҙе емереүгә лә өлгәшәсәк, тип уйлайым. Мәҫәлән, ауылдарҙа сәмәй һаталар. Участка милиционерҙары уларҙы белә, әммә өндәшмәй. Халыҡ хоҡуҡ һаҡсыларының хәбәрҙар булып та, тыймауын күргәс, аптырап ҡала. Артабан был хәлгә битараф булмаған кеше кемгә мөрәжәғәт итергә тейеш? Айыҡлыҡ өсөн көрәшселәр ойошмаһына, әлбиттә.

**▸ Элек-электән башҡорттар ит ашаған, аш һеңдереү өсөн ҡымыҙ, бал, буҙа эскән. Балды, ҡымыҙҙы, буҙаны беҙ генетик аҙыҡ төрөнә индерәбеҙ. Бөгөн дә, организмға әсе нәмә кәрәк, шуға эсәбеҙ, тиеүселәр бар. Был мәсьәләгә нисек ҡарайһығыҙ. Беҙ ни өсөн эсәбеҙ?**

**Марат:** Эсеүҙең ике генә сәбәбе бар. Беренсеһе - аҙым һайын һатып алыу мөмкинлеге. Мәҫәлән, Норвегия менән Швецияла 30 мең кешегә бер генә магазин тура килә. Унда магазиндар ауыл йә ҡала эсендә түгел, ә бер нисә саҡрым ситтә урынлашҡан. Алкоголле эсемлектәр паспорт буйынса һәм билдәле ваҡытта ғына һатыла.

***Рәсәйҙең патриот ғалимдары 1985 йылда иғлан ителгән "ҡоро закон"дың зыянына ҡарағанда файҙаһы күберәк булыуын раҫлай. Мәҫәлән, үлем осраҡтары кәмемәһә лә, кинәт күтәрелгән тыуым демографияны бер кимәлдә тотоп тора. Тап 1985-1988 йылдарҙа тыуған балаларҙың ғаилә ҡороп, үҙҙәренең балалары тыуыуы арҡаһында барлыҡҡа килде был тотороҡлоҡ. Икенсенән, "ҡоро закон" йылдарында суицид яҡынса 40 процентҡа, кеше үлтереүҙәр - яҡынса 55 процентҡа, көсләүҙәр яҡынса 70 процентҡа кәмегән.***

Хаҡтары ла иҫ китмәле юғары. Беҙҙең хаҡтар менән 450 һум. Ә беҙҙә бер ауылда әллә нисәмә магазин-киоск.

Икенсе сәбәбе: беҙҙә тыуғандан алып үлеп киткәнсе киң мәғлүмәт саралары, бөтә йәмғиәт, мәҙәниәт баланы эсергә, тартырға өйрәтә. Бала күҙҙәре нимә күрә, шуны аңына һеңдерә. Әбйәлилдә йәшәгәндә ҡатыным бала менән өйҙә ултырҙы. Малайыма йәш тә 4 ай ине. Телевизор ҡарамай, гәзит уҡымай әле. Аҙнаһына бер тапҡыр ҡатынымдың ағаһы килә лә, бала алдында тәмәке тарта. Һуңынан малай урам буйлап йүгереп йөрөп төпсөк эҙләп, ауыҙына тултыра. Һөйләшә белмәй, нимә насар, нимә яҡшы икәнен аңламай, нимә күрә - шуны ҡабатлай, кире күренештәрҙе аңына һеңдереп үҫә.

Ә инде әсе аҙыҡ аш һеңдереү өсөн кәрәк, тигән һүҙҙәр - уйҙырма, алкоголиктарҙың демагогияһы. Үҙҙәренең ғәйебен аҡлар өсөн демагогия уйлап сығаралар. Бындай аҡланыуҙар берәү генә түгел, бик күп.

**Фәнзил:** Яңы йыл байрамдары үтеп китте. Зәңгәр экрандан һәр сәйәсмән, һәр артист ҡулына шампан шарабы тултырылған бокал тотоп, теләктәр теләне. Уларҙы ҡараған һәр бала, йәш кеше быны, әлбиттә, тормош хәҡиҡәте итеп ҡабул итә. Был аңһыҙ рәүештә эшләнгән ҙур сәйәсәт алкоголизмға тәүге аҙым булып тора ла инде. Яңы йылдың бөтә саралары кешеләрҙе алдан әҙерләнеп, ун көн буйы эсереүгә ҡоролған. Элек-электән кешеләрҙе эсереү өсөн сәбәптәр булдырылған, хәҙер эсермәү, алкоголдең зыянын аңлатыу өсөн кире сәбәптәрҙе табырға кәрәк беҙгә.

**Марат:** Мин шулай уҡ балалар баҡсаһында балаларға кефир эсереүгә ҡаршымын. Сөнки Япония ғалимдары раҫлауынса, бала көнөнә бер стакан кефир эсһә, ул ололарҙың 100 грамм хәмер эсеүенә тиң. Кефирҙағы 2-3 градуслыҡ спирт - бала организмын ағыулау өсөн етерлек кимәл. Тимәк, бик кескенә йәштән үк беҙҙе махсус рәүештә көсләп эсергә өйрәтәләр. Организм аҡрынлап алкоголгә өйрәнә. Бындай күренеш башҡа илдәрҙә юҡ, беҙҙә генә. Кефирҙы айран, ойотҡан, ҡатыҡ менән алыштырып була бит.

**▸ "Һыра алкоголизмы" тигән термин бар. Бөгөн һыра эскән йәштәр киләсәктә потенциаль араҡы эсеүселәр. Һыра организмға яйлап инә, кеше уға яйлап өйрәнә. Тамсы тама-тама, таш тишкән кеүек. Һөҙөмтәлә кеше араҡыға күсә һәм уны бер ваҡытта ла ташлай алмай. Бөгөнгө йәштәрҙе һыра эсеүҙән нисек туҡтатып була?**

**Роберт:** Һыра ғына түгел, бөтә төр энергетик эсемлектәр ҙә хәүефле. Уларҙы нисек кенә тәҡдим итмәйҙәр: төрлө-төрлө тәмләткестәр ҡушалар, төрлө-төрлө һауыттарҙа бирәләр. Һауыттары ла ылыҡтырғыс.

**Марат:** Һыра буйынса ике генә миҫал килтерергә була: рәсәйлеләр эсергә өйрәнгән "Шихан", "Балтика" һ.б. һыраларҙың 90 процентына сит ил компаниялары хужа. Йәғни беҙҙең йәштәр Өфө, Стәрлетамаҡ һыраһын эсә, ә аҡсаһы сит илгә китә. Тимәк, һыра ла Рәсәйгә ҡаршы ҡулланылған геноцид ҡоралы. 1985 йылда алкоголгә ҡаршы федераль законға һыраны иҫерткес исемлек тип индерәләр. Законды беренсе уҡыуҙа ҡабул иткәндә был статья шул көйө үтеп китә. Шунан һыра заводтары хужалары сумаҙан-сумаҙан долларҙар менән Дәүләт Думаһындағы бер нисә кабинетты урап сыға һәм икенсе уҡыуҙа законда "һыранан тыш" тигән ике генә һүҙ өҫтәлә. Ошо ике һүҙ арҡаһында ғына Рәсәйҙә һуңғы 15 йылда ҡот осҡос ваҡиғалар бара.

Күптән түгел генә беренсе уҡыуҙа һыраны иҫерткес эсемлектәр исемлегенә индереү тураһында закон ҡабул ителде. Ләкин унда ла, һыралағы спирт күләме 5 проценттан күберәк булған осраҡта, тигән һүҙҙәр һыҙыҡ өҫтөнә алына. Ә әлеге ваҡытта һыраның күп төрҙәрендә спирт 5 процентҡа етмәй. Тимәк, тағы ла һыра етештереүселәр тирмәненә һыу ҡойола.

**▸ Ҡөрьән-Кәримдә, араҡыны әҙ генә миҡдарҙа эскәндә, ул файҙалы, тигән аят бар. Уны нисек аңлатырға һуң?**

**Фәнзил:** Ҡөрьән-Кәримдә хәмер тураһында өс аят килтерелә. Беренсеһендә, хәмерҙең аҙ ғына миҡдарҙа файҙаһы бар, әммә зыяны күберәк, тиелә. Икенсеһендә, эскән килеш намаҙға баҫмағыҙ, тиелә. Шунан өсөнсө аят килтерелә, унда аныҡ итеп, хәмер - харам, тиелә, ул ҡомарлы уйындар менән бер рәттән тыйылған ғәмәлгә индерелә. Ислам, әгәр ҙур нәмәлә харам бар икән, ул бәләкәй миҡдарҙа ла харам, ти. Тағы хәҙистәр бар. Мәҫәлән, хәмергә ҡағылышлы ун кеше язаһын алыр, тиелә бер хәҙистә. Улар - йөҙөм үҫтереүсе, йөҙөм ағастарын тәрбиәләүсе, шарап эшләүсе, ҡулланыусы, ҡойоусы, ташыусы, йөктө алыусы, һатып алыусы, һатыусы, шараптан килем алыусы. Беҙ, башҡорттар, әлхәмдуллилаһ, үҙебеҙҙе мосолман тип һанайбыҙ һәм белергә тейешбеҙ: әҙерләүсе, ҡыуыусы, ҡойоусы, шәкәрҙе самогон өсөн һатып алыусы - бөтәһе-бөтәһе лә Аллаһы Тәғәлә алдында яуап бирәсәк.

"Айыҡ Башҡортостан" ойошмаһының беренсе бурысы: айыҡлыҡ өсөн көрәшеүсе, хәмерҙең зыянын аңлаған кешеләрҙең берләшеүе. Берҙәмлектә - көс, тип юҡҡа ғына әйтмәгәндәр. Йәштәр был йүнәлештә бер нисә йыл эшләп килеп, ниһәйәт, республика кимәлендә

✓ ***Беҙҙең наркологтар, алкоголизм - ул сир, сирҙе дауаларға кәрәк, ти. Эскән кешене һәм ауырығын кешене берәй утрауға алып барып ташлағыҙ. Эскән кеше тере ҡаласаҡ, ә аныҡ сир менән сирләүсе, дарыу ҡабул итмәһә, үләсәк.***



берләшеүгә өлгәште. Һәм берләшеүҙең матур һөҙөмтәләре лә күренә башланы. "Иң айыҡ ауыл" конкурсы шул сараларҙың, иншалла, береһе буласаҡ. Ул конкурстың положениеһы буйынса, эскелектең сәбәптәрен бөтөрөүҙең бер юлы - эш урындарын булдырыу. "Иң айыҡ ауыл" тигәс тә, уның маҡсаты ҡайһы магазинда араҡы әҙерәк һатылыуын асыҡлау түгел. Унда демография мәсьәләһе лә, мәктәптәге эскелеккә ҡаршы ойошторолған саралар һаны ла, сәмәй һатыусылар менән көрәш мәсьәләһе лә сағылыш табырға тейеш. Исмаһам, йәштәребеҙҙең туйҙарын эскеһеҙ үткәреүҙе ғәҙәткә әйләндереүгә өлгәшергә тейешбеҙ. Юҡһа, бөгөн туйҙар иҫеректәр шашынған йәмһеҙ бер сараға әйләнде. Халҡыбыҙҙың матур туй йолалары онотолдо. Берҙән-бер һаҡланып ҡалған йола - киленде һыуға алып барыу.

**Халҡыбыҙҙы айыҡ милләткә әйләндереүҙең ниндәй юлдары бар? Доктрина булырға тейешме ул?**

**Роберт:** Хәҙерге ваҡытта беҙҙә "Уйлама, һатып ал, аша, эс", тигән көнбайыш идеологияһы өҫтөнлөк итә. Беҙ кешеләр аңына ошо уйланыуҙы еткерергә тейешбеҙ: "Киләсәктә балаларың, Башҡортостан, тотош ҙың да зыяны тураһында һөйләп һеңдерергә кәрәк. Ә беҙҙә әлегә ошо ағыуҙар менән ҡыҙыҡтырыуҙар ғына бар.

**Фәнзил:** Мин дингә килгәс, шуны аңланым: кеше үҙе айыҡ була икән, уның эргәһендәге кешеләр ҙә айыға башлай. Әммә һинән ҡәтғилек һәм ныҡлыҡ та талап ителә. Ҡайһы берҙә үҙебеҙҙең алкоголь "дуҫыбыҙға" белә тора миһырбанлыҡ күрһәтәбеҙ. Ул беҙҙе үлтерә, аҫа, милләтебеҙҙе бөтөрөп бара. Ә беҙ уны сығарып түгергә ояламыҙ, туғандарыбыҙҙың алдында ултырһа, уларға: "Эсмәгеҙ", - тиергә ҡыймайбыҙ. Алкоголгә дошманға ҡараған һымаҡ ҡарарға өйрәнергә кәрәк беҙгә башта.

**килеп тыуһа, йәғни ғаилә ағзалары: "Йә беҙ, йә араҡы", - тигән һайлау алдына ҡуйһа. Өсөнсөһө - эшен яратһа, йәғни коллектив етәксеһе: "Йә эсеүҙе ташлайһың, йә беҙҙең менән эшләмәйһең", тигән һайлау алдына ҡуйһа. Эскене ташларға мәжбүр иткән тағы ниндәй ысулдар бар?**

**Марат:** 1978 йылда Украинала төшөрөлгән фәнни фильмда бер миҫал килтерелә. Унда төрлө инәнән тыуған берәр айлыҡ 10 суҫҡа бәрәсен алалар. Бер нисә **ғына һауылған һөттө эсә, ә ике сәғәт ултырғанын эсмәй. Һөт ике сәғәт ултырһа, унда ағыу барлыҡҡа килә башлай икән. Ә беҙ шуны эсәбеҙ. Бесәйгә эҫ, тәм аша, ярамай, тигән тыйыу һалынған, һәм ул шул инстинктҡа эйәрә. Бесәй тәбиғәттән айырылмаған. Беҙҙең эскелек - тәбиғәттән айырылыуыбыҙҙан киләлер, тип уйланыла…**

**Роберт:** Кешеләр ҙә араҡыны, һыраны беренсе тапҡыр эскәс, организмы ҡабул итмәй, күңеле болғанып, ауырып йөрөй. Әммә ул баяғы суҫҡа балалары кеүек тә була белмәй - икенсе тапҡырҙа ла, ауырыясағын белә-күрә тороп, үҙенә ҡойғанды ҡабул итә. Өсөнсө тапҡырында ла баш тартмай. Шулай яйлап тәбиғәткә ҡаршы барып, организмы алкоголгә өйрәнә. Алкоголде тәмләп ҡарамайынса ла реклама аша аңға һеңдерәләр. Башта оҡшамай ул реклама, көн дә күрһәтә башла-



# ТӨНДӘ ӘРЛӘГӘНСЕ, тураһында хыяллан…

Ғаиләне, ячейканы барлыҡҡа килтереүҙең нигеҙендә эскелек ята. Эскелек беҙҙең йолаларыбыҙға, йәшәйешебеҙгә килеп инеп, тамырланырға итә, беҙ уны йолҡоп ташларға тейешбеҙ.

**Роберт:** Кеше ниндәйҙер этәргес көс, әйҙәүселәр, өлгө күрһәтеүселәр булмайынса, нисек айыҡ йәшәп китһен! Бына беҙ конкурс тураһында саҡырыу ташлайбыҙ, ойошма ағзалары урындарҙа лекция-семинарҙар үткәрәсәк, мәғлүмәттәр бирәсәк, ни өсөн айығырға кәрәк икәнлеген нигеҙләп аңлатасаҡ. Конкурста ҡатнашырға теләк белдергән бөтә ауылдарға ла был йүнәлештә саралар үткәреүгә ярҙам ителәсәк. Йыл йомғаҡтары буйынса еңеүсе ауылға ҙур бүләк тапшырыу ҙа ҡарала. Һәр хәлдә, стимул төрлөсә булыуы мөмкин, мәҫәлән, еңеүсе ауылдың 11-се синыфын тамамлаған балаларға уҡырға инеүгә квота рәүешендә лә.

**Тағы бер бәлә бар бит, ул - тәмәке. Тәмәкене ташлау араҡыны ташлауға ҡарағанда йөҙ тапҡырға ауырыраҡ.**

**Марат:** Ысынлап та, тәмәке ташлау бик ҙур ихтыяр көсө талап итә, тиҙәр. Хатта донъялағы күслө дини имамдар ҙа тәмәке тарта. Төп мәсьәлә - никотиндан ҡотолоу сараһын таба алмау. Тәмәке тартыусы һәм эсеүселәрҙең ни бары 5 проценты ғына үҙендә был насар ғәҙәттәрҙән арыныу көсө таба. 95 проценты иһә был бәләләрҙән ҡотола алмай һәм ғүмерен фажиғәле тамамлай. Шуға ла берҙән-бер сара - башламау. Ә бит ҡулына тәүге тапҡыр тәмәке алған йәшүҫмер был ағыуҙың эҙемтәләрен белмәй. Бик иртә йәштән уның аңына тәмәкенең дә, алкоголдең дә, наркотиктар-

Рәсәй менән нимә буласаҡ? Рәсәй йәмғиәте тороп ҡалырмы, әллә уның халҡы үлеп бөтөрмө, илде кем яулап алыр?" Бер кемгә лә сер түгел, бөгөн Ҡытай ҙа, Америка ла беҙгә сеймал сығанағы тип ҡарай. Беҙҙе көрәш менән еңә алмайҙар, сөнки 1941-1945 йылдарҙа беҙ үҙебеҙҙе еңелмәҫ ил тип танытты инде. Әммә еңеүҙең, буйһондороуҙың икенсе юлдары ла бар. Бер ниндәй ҡорал ҡулланмайынса, араҡы, тәмәке, нарко-

Бына ауылда сәмәй һаталар. Йәштәргә: "Нишләп көрәшмәйһегеҙ?"- тиһәң, "Ауылдаштарға ҡаршы нисек көрәшәһең?", тиҙәр. Эйе, ауылдаштар, туғандар, күрше-күлән өҫтөнән ялыу итеү оят һымаҡ. Әммә шул уҡ сәмәй һатыусылар бер ҙә уларҙың ғаиләләрен уйламай бит. Ирҙәрҙе эсерәләр. Ирҙәр өйөнә ҡайтып, ҡатындарын туҡмай. Ә беҙ миһырбанлыбыҙ. Хатта дошманыбыҙға ла яҡшы мөнәсәбәттәбеҙ. Дошманыңа ҡарата дошман була белергә кәрәк. Эскелек - ул беҙҙең дошманыбыҙ, ауылдарҙа сәмәй һатыусылар - беҙҙең дошманыбыҙ, халҡыбыҙҙың, ки-

көн эсендә бер бәрәс лидер булып өлгөрә һәм башҡалар ул нимә эшләһә, шуны эшләй. Шунан суҫҡа бәрәстәренә ашатҡан аҙыҡҡа өс литр һыра килтереп ҡоялар. Лидер бәрәс аҙыҡты ашай. Ул ашағас, башҡалар ҙа ауыҙ итә. Һөҙөмтәлә улар иҫерешеп, һуғыша башлай. Береһенең ҡолағын ҡанаталар, башҡалары ҡурҡышып, төрлө мөйөшкә һарлыға. Икенсе көн аҙыҡҡа тағы һыра ҡоялар. Лидер бәрәс килеп еҫкәп ҡарай ҙа, һауытты түңкәрә. Һауытҡа яңынан аҙыҡ һалып, тағы һыра ҡоялар. Суҫҡа бәрәсе ҡабат килә лә, уйлап та тормай, һауытты тағы

ғас, күнегелә. Магазинға бара ла кеше, рекламала сағылдырылған шешәне ҡыҙыҡ өсөн һатып ала.

**Марат:** Донъяла өс кешенең икеһе эсмәй. Яҡынса 600 милләт эсмәй, 41 дәүләттә "ҡоро закон" индерелгән. Ислам илдәрендә "ҡоро закон" булмаһа ла, дини яҡтан тыйыу бар. 6 млрд ярым халыҡтың яҡынса 4 млрд 200 млн самаһы эсмәй. Тимәк, үҙ тәбиғәтенә ҡаршы барыусылар күберәк беҙҙә, Рәсәйҙә йәшәй. Әйтәйек, Башҡортостанда бер кешегә 28-30 литр эселгән араҡы тура килә. Силәбелә, Себерҙә был күрһәткес 50-70 литрға етә.

**Фәнзил:** Беҙгә Аллаһы Тәғәләнән халҡыбыҙҙы айыҡтырыуҙы һорарға, үҙебеҙгә был эштә Уға ярҙам итергә кәрәк. Халыҡтың үҙенең дә айығырға теләге булырға тейеш. Әлхәмдуллиллаһ, ике-өс йыл элек кенә эсмәүсе йәштәрҙе көндөҙ сыра яндырып эҙләһәң дә табып булмай ине, хәҙер улар һәр ауылда бар.Барыбер ҡайтабыҙ тәбиғи асылыбыҙға. "Беҙҙән булмай", тигән зарарлы өмөтһөҙлөктө ситкә бырағтырайыҡ та, "Булдырабыҙ уны!" тип, ең һыҙғанайыҡ!

***Кеше үҙе айыҡ була икән, уның эргәһендәге кешеләр ҙә айыға башлай. Әммә һинән ҡәтғилек һәм ныҡлыҡ та талап ителә. Ҡайһы берҙә үҙебеҙҙең алкоголь "дуҫыбыҙға" белә тора миһырбанлыҡ күрһәтәбеҙ. Ул беҙҙе үлтерә, аҫа, милләтебеҙҙе бөтөрөп бара. Ә беҙ уны сығарып түгергә оялабыҙ, туғандарыбыҙҙың алдында ултырһа, уларға: "Эсмәгеҙ", - тиергә ҡыймайбыҙ. Алкоголгә дошманға ҡараған һымаҡ ҡарарға өйрәнергә кәрәк беҙгә башта.***

тик ярҙамында кешеләр үҙ-үҙҙәрен үлтерә. Геноцид ҡоралы үҙ эшен башҡара: матди яҡтан зыян юҡ, бөтә завод-фабрикалар, предприятиелар, биналар тороп ҡала үҙ урынында. Кешеләр генә юҡҡа сыға.

**Марат:** Халыҡты айыҡтырыуҙың төп механизмы, әлбиттә, дингә килеү. Икенсе юл бар: закон ҡулланыу. Мин уны ҡыҫым законы, тип ҡарайым. Ҡыҫым ике яҡтан да - аҫтан да, өҫтән дә булырға тейеш. Йәғни ябай халыҡ, йәмәғәтселек, төрлө ижтимағи хәрәкәттәр етәкселәрҙе, закон сығарыусыларҙы айыҡлыҡ яҡлы булырға өндәргә тейеш. Һәм киләсәктә сыҡҡан закондарҙа һыра йәки башҡа алкоголле эсемлектәр ҡулланыуға сик ҡуйылырға тейеш. Ул закондарҙы ҡабул итер алдынан, әлбиттә, ололарҙы ла, балаларҙы ла, йәштәрҙе лә алкоголдең ағыу икәненә инандырыу кәрәк.

ләсәгебеҙҙең, балаларыбыҙҙың, туғандарыбыҙҙың дошманы. Шулай тип ҡараған саҡта ғына айыҡлыҡ юлында ниндәйҙер кимәлдә уңышҡа өлгәшәсәкбеҙ. Шуға ауылдарҙа үҙебеҙҙең фекерҙәштәрҙе, көрәштәштәрҙе табайыҡ, дошмандарҙы асыҡлайыҡ һәм эскелеккә ҡаршы һуғыш башлайыҡ.

**Эсеүҙе бер тапҡыр ташлап, ҡабат башлаған кешеләр менән аралашып, шундай һығымтаға киләһең: эсеүҙән ҡотолоу - ул үҙеңдәге тәкәбберлекте еңеү. Күңел кирелеген еңә алмаһаң, ул һине еңә. Үҙ теләге менән эсеүен ташлау кимәленә еткән кешеләр өс осраҡта быға бара. Беренсеһе, ныҡ эсеп, үлер сиккә етеүселәр алдында йә йәшәйем, йә үләм тигән дилемма торһа. Икенсе осраҡ - ғаиләһен юғалтыу ҡурҡынысы**

түңкәрә. Шулай бер нисә тапҡыр ҡабатлана. Был кешеләр араһындағы лидерҙарға ла өлгө. Беҙҙең ауылдарҙа ла айыҡ кешеләр башҡаларҙы үҙ өлгөһөнә эйәртергә тейеш.

Беҙҙең наркологтар, алкоголизм - ул сир, сирҙе дауаларға кәрәк, ти. Эскән кешене һәм ауырығын кешене берәй утрауға алып барып ташлағыҙ. Эскән кеше тере ҡаласаҡ, ә аныҡ сир менән сирләүсе, дарыу ҡабул итмәһә, үләсәк. Шуға ла алкоголизмды сир менән тигеҙләп, эскесене врачтан ярҙам көттөрөп ултыртып ҡуйырға ярамай. Үҙенең яман ғәҙәте менән үҙе көрәшергә тейеш икәнде уның башына һеңдереү фарыз.

**Суҫҡа балаһы тураһында һөйләгәс, бер тапшырыу иҫкә төштө. Һөт эсеп ағыуланыусылар тураһында ине ул тапшырыу. Баҡтиһәң, бесәй яңы**

## ӘЙТКӘНДӘЙ...

**"Иң айыҡ ижади коллектив" тигән даны сыҡҡан "Киске Өфө" редакцияһы коллективы әңгәмәлә ҡатнашыусы егеттәрҙең эшлекле тәҡдимдәрен хуплай һәм гәзит уҡыусылар араһында яңы 2011 йылды "Айыҡлыҡ өсөн көрәш йылы" итеп иғлан итә. Ул йылды нисек үткәреү хаҡында кемдә ниндәй тәҡдимдәр булыр?**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ менән Зәйтүнә ӘЙЛЕ әңгәмә ҡорҙо.**

**(Теманың дауамын 15-се биттә уҡығыҙ).**

***✓ Я Рабби, нимә һуң ул тормош? Ҡаза эсендә яралған һөйөүме? Мөхәббәт сәскәһенең һутынан ҡеүәтләнгән ҡөһөрмө? Уҡ осона ҡунып һайраған таң һандуғасымы? Бәхеттең эсенә төрөнгән ҡайғымы?***





Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА

# ТЫУМАҒАН УЛЫМ

**Повесть**

**(Гәзит варианты)**

Хөсәйендең башын тубығына һалды ла битен һыпырырға кереште. Бына уның ҡаршыһына киң яурынлы урта буйлы ир килеп баҫты.

- Бала йәл, шулай бит, бей?

Ишҡар бей һиҫкәнде. Әкрен генә урынынан тороп баҫты.

- Һин...

- Мине ҡәбер эсенә тыҡҡайныңмы ни, бей?

- Ас бүре...

- Ас. Бына бит ҡаршымда иң татлы ризыҡ.

- Янғол, бөтә байлығым, малым һинеке!..

- Малың да, ерең дә кәрәкмәй. Улың ғүмерен һатып ала алмайһың.

Янғолдоң көлөүенән урман яңғыраны.

- Ал минең йәнде!

- Һинең арзан, бахыр йәнендеме?

- Бала үлем хәлендә. Уға ярҙам кәрәк!

- Юҡ. Һин ошонда уның үлгәнен күтәсәкһең. Унан балаңдың йәнһеҙ кәүҙәһе менән ҡайтырға рөхсәт булыр...

Ишҡар бей Янғолға ташланды. Кемдер уның ҡаршыһына баҫты.

- Гәрәй!

- Һин ҡыуып, мыҫҡыл итеп ебәргән Гәрәй. Улыңды аулап килтереүсе лә мин. Дөрөҫөн әйтергә кәрәк, улың батырҙарса алышты.

- Ер йотҡоро! - Ишҡар бей Янғолға ҡысҡырҙы. - Беләһең бит ул минең берҙән-бер улым!

Янғол уға ҡараған килеш тора бирҙе.

- Өлкән улым яуҙа һәләк булды. Уртансыһы туңып үлде.

Янғол йылмайғандай итте.

- Шулай тип уйлайһыңмы?

Ишҡар бейҙең күҙҙәре ҙур асылды, унан - ауыҙы. Һүҙ ҡата алмайынса ирене дерелдәне.

- Һин хәҙер дөрөҫ уйлайһың, Ишҡар бей.

- Әҙәм йәнен ҡыйыусылар!

- Үҙең тураһында әйтеүеңме?

- Нимә өсөн мине әҙәрлекләйһең, ас бүре?

- Быны һин бик яҡшы беләһең, бей. Ҡыланма, һин бит оло кеше.

- Ике улыңдың ҡонон ҡайтарҙың бит инде! Быныһы нимә өсөн?

- Тыумаған улым өсөн.

Ишҡар бейҙең күҙҙәре һүҙылып китте. Ул бар көсөнә аҡыра башланы.

- Тыу... Һин аҡылдан яҙған! - Бей тубыҡланды. - Теймә, ҡағылма балама.

- Бына бала хаҡын, ниһәйәт, һин дә аңланың.

Янғол ситкә атланы.

- Апарып бикләргәме? - тип һораны Гәрәй.

- Нимәһен бикләргә? Үҙен-үҙе бикләне бит бына. Ул яҡшы эт, көсөгө янынан бер ҡайҙа ла китмәйәсәк.

- Кешеләре эҙләргә сығыр...

- Сыҡһындар. Бей тиклем бейҙең юғалыуы өлкән ҡаза бит...

* * *

Бүребай аталарының ниндәй эш менән киткәнен белмәһә лә, етдилеген аңланы. Уны үҙҙәре менән алып китмәҫкә һылтауын да таптылар. Ҡышҡылыҡҡа әҙерләнергә, йәнәһе. Йылға буйлап үтте, үҙәнгә төштө, байтаҡ ара йөрөп әйләнде. Күҙ бәйләнә башлағанда яр буйында Көһәпҡол ҡартты тап иткәс, аптырап китте.

- Олатай, һин был яҡтарға нисек?..

- Бей улының юҡҡа сығыуы хафаға һалды. Һин зирәк бала...

- Нисек юҡҡа сығыуы?.. Булмаҫ, - тип ҡабатланы әкрен генә Бүребай. Ҡапыл бөтә тәненең һыуып киткәнен тойҙо. Ниндәйҙер һиҙемләү килде күңелгә. Аҡбүре ҡарт күҙҙән юғалғансы ҡарап ҡалды. Ул атаһының ҡай тирәлә икәнен белә. Ҡараташ юлына төштө. Янғолдоң кешеләре Бүребайға иғтибар бирмәне. Атаһы арҡаһы менән баҫҡан. Ҡаршыһында кемдер тубыҡланған. Ҡорбашының баҫып, бүтәндәрҙең теҙләнеп гәпләшкәнен күргәне юҡ ине лә...

- Алып ҡал атаһын, ебәр улын! Атаҡайым...

- Алып китегеҙ, күҙемә күренмәһен!

Бүребайҙы шундуҡ эләктереп алдылар. Тын алырға ла ирек бирмәйенсә, атҡа мендерҙеләр. Кире Уйылғыға алып киттеләр. Бикләп тә ҡуйҙылар. Аҡбүренең әсәһен, ағаларын юҡ итеүҙә ҡатнашлығы булған кеше язаһын алырға тейеш. Хөсәйендең бит ул фажиғәлә һис ҡатышы юҡ. Юҡ! Ғәйеплеләр генә хөкөм ителергә тейеш. Әмәлен табырға, ҡотҡарырға кәрәк. Янғол балаһын ғәфү итер. Уның ҡарауы, Бүребай Хөсәйендән ваз кисәсәк. Бүребай Ишҡар бей улын бүтәнсә бер ҡасан да күрмәйәсәк. Ул - Бүребай, яугир антынан һушына килеүе, йылмайыуы... Бына нисек! Ҡот осҡос хәл!

Янғол усаҡ янына килде, торомбаш алып, күлдәкте тоҡандырҙы. Янып бөткәнсе бер нәмә лә өндәшмәне. Шунан көл араһынан көмөш тәңкәләрҙе йыйып алды ла Ишҡар бейгә һондо.

- Бына беҙ һинең менән был эш буйынса ла хисаплаштыҡ.

Бей нәфрәтле ҡарашын уға төбәне. Янғол тәңкәләрҙе уның алдына һипте.

- Әҙ булһа, үҙемдән өҫтәй алам...

- Минең баланың йәнен ҡыяһы урынға үҙеңдекен харап итәсәкһең! - Бей шулай тине лә тәңкәләрҙе ҡулы менән һыпырып алып Янғолға бәрҙе. Янғол

Бүребай һаҡ ҡына уларға яҡынлашты.

- Улымдың ни ғәйебе бар?

- Ә минең улдарымдың ни ғәйебе бар ине, Ишҡар бей?

- Һуң... Батша һалдаттары эше бит был! Улар тик һине эҙләй ине!

- Байлыҡ етмәне шул һиңә, Ишҡар бей. Ҡомһоҙлоғоң, көнсөллөгөң харап итте. Минең башты ашарға иткәйнең, ә! Хәҙер улың ҡаршыһында ул үлгәнсегә ҡәҙәр теҙләнеп торасаҡһың. Балаң йәнен сыҡҡанын күҙәтеүе анһат түгел. Йәлләйем һине. Йәлләйем дә, ерәнәм дә.

Ҡайҙа һуң Хөсәйен? Ҡыҙ йыуан имән төбөндә танымаҫлыҡ итеп туҡмалған, иҫһеҙ кәүҙәне күре ҡалды. Аҡбүре үҙе лә һиҙмәйенсә, атаһына барып йәбеште.

- Атаҡайым!

Янғол бүре йылғырлығы менән ҡыҙын ситкә һелтәне.

- Кем ҡушты һиңә бында килергә! Юғал күҙ алдымдан!..

- Былай бит дөрөҫ түгел!

- Ыҙалап үлеүен теләмәһәң, бына уҡ-ян! Ана хәнйәр! Атаһының күҙ алдында юҡ ит!

Һаҡсылар уяу, таһыллы. Аҡбүре хәнйәрен алды. Был Хөсәйенгә яҡын килер өсөн берҙән-бер мөмкинлек ине. Аҡбүре егеткә табан эйелде.

- Хөсәйен...

Шул саҡ егеттең күҙ ҡабағы дерелдәне. Ул ыңғырашты. Әкрен генә күҙен асты. Улының иҫенә килгәнен күргән Ишҡар бей ҡысҡырып ебәрҙе. Хөсәйен нимәләр бышылдарға итте. Көсө етмәне. Һыҙланыу ҡатыш йылмайҙы. Аҡбүре лә йылмайҙы. Янғол яман итеп аҡырып ебәрҙе.

- Был тирәлә эҙең булмаһын! Ысҡын йәһәтерәк!

Күҙҙәрен ҙур асҡан Аҡбүре берсә атаһына, берсә Хөсәйенгә ҡараны.

тайпылғаны юҡ. Яугир алышта үлә. Уға бүтән төрлө үлем кәрәмәй. Бүтән төрлө яҙмыш та. Ә Хөсәйен үҙ ғаиләһен ҡорор, күп итеп балалар үҫтерер. Балаларының балаларын бағыр. Уның булмышы шулай. Был егеттә яуызлыҡ юҡ. Ләкин ул язалана. Яза. Кисереү... Үлем. Ярлыҡау. Бөтәһе лә бергә буталды. Яратыу. Күралмау. Ҡон ҡайтарыу. Ғәфү итеү. Әсәһе. Ағалары. Атаһы. Ишҡар бей. Йәшәү. Ләғнәт. Өмөт. Ҡарғыш. Я Рабби, нимә һуң ул тормош? Ҡаза эсендә яралған һөйөүме? Мөхәббәт сәскәһенең һутынан ҡеүәтләнгән ҡөһөрмө? Именлекте ҡороҡлаған һуғыш-орошмо? Уҡ осона ҡунып һайраған таң һандуғасымы? Бәхеттең эсенә төрөнгән ҡайғымы?

* * *

Ишҡар бей алдына ялпылдап килеп ятҡан күлдәкте ҡул осо менән генә тотоп ҡалҡытты. Аптыраны, ситкә этте.

- Был нәмәне беренсе мәртәбә күреүеңме, бей? Улыңдың бүләге был.

Ишҡар бей ышанмағанын белдереп, асыу менән бер ҡарап алды ла тәкәббер ҡарашын икенсе яҡҡа төбәне. Янғол мыҫҡыллы көлөмһөрәне.

- Минең ҡыҙҙы кәләш итеп алырға ниәтләгәнен белмәй инеңме ни?

- Нимә? - Бей яңылыш ишетмәнемме тигәндәй, Янғол тарафына уң ҡолағын ҡуйҙы. - Ҡыҙыңды?!

- Эйе, ҡулында ҡорал уйнатҡан бик шәп ҡыҙым бар. Һин уны күрҙең...

- Ҡыҙыңды? Минең улым?..

Янғол яуап ҡайтармаһа ла унан үткер ҡарашын алманы. Шул саҡ күҙ алдына ут бөрсәһе шикелле теге яугир бала килеп баҫты, бей тертләне. Хөсәйендең уға утлы күҙҙәре менән бер генә ҡарап алды ла, ары атланы.

Уйылғыға ҡайтҡас, Янғол иң элек Аҡбүре янына инеп сыҡты. Яугир ул ишектән күренеү менән аяғүрә тороп баҫты. Тыныс йөҙ, янып торған күҙҙәр. Тимәк, ярһыуы баҫылған, үҙен ҡулға алған.

- Сыҡ. Егеттәргә әйтәһе һүҙ бар, - тине атаһы тышҡа ымлап.

Улар сыҡҡанда яугирҙәре бер урынға тупланғайны инде.

- Хәлдәр бер аҙ үҙгәреп тора. Нығытманы емермәй торабыҙ. Уларға бихисап һалдат һәм ҡорал-монаят килде, - тине яубатыр. - Кемдәр теләй, өйҙәренә ҡайтһын. Ҡышлауҙы ла уйларға кәрәк. Сәғәте һуҡһа, минән саҡырыу килеп етер.

Кемдер асыу менән өндәште.

- Беҙҙең ғаиләне, ырыу-затты ҡырғандарға хөрриәтме? Түрәләрен дарға аҫмайынса ҡуҙғалмайбыҙ!

Бүребай алғараҡ ынтылды.

- Уның башын Ишҡар бей улына алмаштыра алабыҙ...

"Уның" тигәндең кем икәнен яҡшы белә ата кеше. Янғолдың уҫал күҙҙәре ҡыҙына төбәлде. Һалҡын тауыш менән ашыҡмай ғына әйтте.

- Мин бойорғанды ишеттегеҙме? - Янғолға яуап ҡайтарыусы булманы. - Һәммәгеҙ ҙәме? - Шунан тауышын йомшартыбыраҡ дауам итте.- Беҙ ут менән шаярмайбыҙ. Әлегә бынан китәбеҙ.

- Мин ҡәлғәнең эсен дә, тышын да яҡшы беләм бит.

- Ҡорбашының бойороғо бер ҡасан да үҙгәрмәй. Ҡәлғәне белеүең бик яҡшы, белемеңде файҙаланасаҡбыҙ. Аҙ ғына сабырлыҡ кәрәк.

Бүребай ағас төбөнә барып ултырҙы, һикереп торҙо, тегеләйбылай йөрөргә тотондо, ҡәтғи ҡарарға килеп, йәнә атаһына табан атланы. Уның был ҡыйыулығын күргән ҡорбашы йән асыуы менән ҡулын һелтәне.

- Бар!

Юҡ, Бүребай ҡарашын үҙгәртмәйәсәк, сигенмәйәсәк. Кемдең башы ҡыйбатыраҡ тороуы тураһында ул атаһына дөрөҫөн әйтте. Шуның өсөн бит атаһы яуап бирә алмайынса, ярһыуынан аҡырып ебәрҙе. Тимәк, Хөсәйенде ҡотҡарырға мөмкин!

- Ағай, Хөсәйенде ҡотҡарыш!

Арҡан ишеп ултырған Гәрәй уға күтәрелеп ҡараманы, турайып ултырҙы, эшенән туҡталып торғандай булды.

- Уны мин һеҙгә ҡарағанда яҡшыраҡ беләм! Уның эсендә бер әҙәмгә ҡарата ла насарлыҡ юҡ.

- Атайың ҡон алырға ант иткән. Усына ҡатынының ҡаны буялған килеш! Беҙ ҙә Алла исеменән ант иткән даусылдар.

- Атайымдың ҡан дошманы - Пушкарев! Бей шулай уҡ оло гонаһ эйәһе, ләкин улы түгел.

Гәрәй бер нәмә лә өндәшмәне.

- Һин... Бей улын һин тотоп килтерҙеңме?..

- Беҙ яубатырҙың фарманын үтәүселәр, сөнки бындағы тәртипте нығытыусы - бер ул ғына. Юғиһә, һәләкәт киләсәк.

- Гәрәй ағай, шуның өсөн дә бит һиңә мөрәжәғәт итәм. Әгәр ҙә мин Пушкаревты тотоп килтерһәм, атайым Хөсәйенде ҡотҡарырмы?

- Мин - атайыңдың тоғро юлдашы. Иҫеңдән сығарма!

Бүребай йылмайҙы, уның менән ризалашҡанын белгертеп, баш ҡаҡты.

Гәрәй иртәнсәк ашарға алып ингәндә өйҙә берәү ҙә юҡ ине. Ул ары ташланды, бире ташланды. Бүребайҙың уҡ-яны бында, ә үҙе күренмәй, ҡайҙа булырға тейеш һуң? Унан Янғолға табан сапты.

- Аҡбүре юҡ!

Янғол сәбәләнмәне. Ҡашын төйгән килеш алыҫҡа ҡарап торҙо.

- Бейҙең көсөгөн ҡотҡарыу уның хәленән килмәй. Нимә тураһындалыр һорашҡандыр-белешкәндер бит?

Пушкарев тураһында ишеткәс, Янғолдың йөҙө ҡарайҙы.

- Табығыҙ Аҡбүрене! Ҡыймылдағыҙ йәһәтерәк!

Үҙе шундуҡ туратына атланды.

* * *

- Әфәндем, унда башҡорттар килгән...

- Башҡорттар? - тип ышанмағандай ҡабатлап һораны Пушкарев. - Нимә эшләп йөрөйҙәр? Ни өсөн килгәндәр тием, болван?

- Теге ҡарт. Хәтерләйһегеҙҙер, аттарыбыҙҙы дағалап биреүсе...

- Ә-ә-ә, яҡшы ҡарт ул!

- Тағы ла теге малай бар. Ишҡар бейҙең улы менән йәнлек тиреләре, болан мөгөҙө килтергәйне.

- Ҡарт менән икәүҙәрме?

- Икәү генә, ғали йәнәптәре. Бер өйөр ат ҡыуып килтергәндәр. Һеҙгә теге малайҙан айырым бүләк бар. Үҙем тапшырам, тине.

Пушкаревтың хәйләкәр күҙҙәре ҡыҫылды.

- Малай? Ул нимә... Ҡара юртаҡтымы әллә? - Полковниктың ҡашы өҫкә менде. Күҙендә аптырау менән бергә ҡәнәғәтлек сағылды. Ул хатта ҡолаҡ артын ҡашып ҡуйҙы. - Теге ваҡыт аңғарҡайным. Башһыҙ түгел!

Пушкарев нығытманың ҡапҡаһын асырға бойорҙо. "Мине бер ҡатлы тип уйлаһа, бик үкенәсәк..." Бер нисә ҡарауыл сығып,

***✓ Пушкаревтың һәр хәрәкәтен күҙәтеп торған Бүребай кирелгән һымаҡ хәрәкәт яһаны ла, ике хәнйәр килтереп сығарып, ике һалдатҡа һелтәне, Пушкаревҡа йәһәт кенә ҡороҡ ташлап, атын йәнтәслим урман яғына ҡыуҙы.***



тирә-яҡты байҡаны, шунан өс һалдаты ҡамауында Пушкарев күренде.

- О-о-о, йылҡы өйөрө! Күп кенә! Бөтәһе лә беҙгәме?

- Юҡ, күңелегеҙгә ятҡанын һайлап алырға, ғәли йәнәптәре.

- Күнел... Хәҙер ҡарарбыҙ! Бөтә аттарын да эскә ҡыуығыҙ!

- Хужалары ҡаршы килмәҫме?..

- Ә кем һорап тора уларҙан! Теге ҡырағай малайҙы ла ҡуша алырға була. Уны тәрбиәләп, батшаға тоғро һалдат итеп үҫтерергә мөмкин. Ул бит төҙөүсе, ҡороусы булырға хыяллана. Ҡәлгәне ҡалай ҡыҙыҡһынып ҡарап сыҡҡайны...

- Эй, ҡартлас, һиңә ниндәй бүләк кәрәк? Һора, нимә теләйһең?

Ҡарт ҡулы менән ишараланы. Эргәһендәге һалдатты Пушкарев уға табан ебәрҙе. Үҙе эргәһендә уйнап торған юртаҡҡа ҡулын һуҙҙы.

- Шул! Тап үҙе!.. Алдамаған мелюзга!

Ике һалдат йәнәшәһенә килеп баҫты. Пушкаревтың һәр хәрәкәтен күҙәтеп торған Бүребай кирелгән һымаҡ хәрәкәт яһаны ла, күҙ асып йомғансы ике хәнйәр килтереп сығарып, ике һалдатҡа һелтәне, Пушкаревҡа йәһәт кенә ҡороҡ ташлап, атын йәнтәслим урман яғына ҡыуҙы. Быларҙы өсөнсө һалдат күрмәне, диҡҡәте йылҡы өйөрөндә ине. Ул ҡарт янына килеп етте. Шул саҡ ҡарттың аты үрәпсене. Һалдат ситкә ҡайҡайҙы. Аттар геүләп сабырға кереште. Һалдат Пушкарев торған яҡҡа ҡараны. Хужалары урынында юҡ ине. Һалдат яман итеп аҡырып ебәрҙе. Ҡайҙандыр килеп сыҡҡан икенсе һалдатҡа Көһәнҡол ҡарт һәрпәген ырғытты. Ҡапҡанан һалдаттар йүгерешеп килеп сыҡты. Кемеһеләр ҡартҡа атты. Көһәнҡол уҙаман эйелеп төштө. Йылҡылар урман яғына ҡайрылды. Һалдаттар кемуҙарҙан урман яғына ташланды. Атыш тауыштары ишетелде. Урман ауыҙына яҡынлашҡан Бүребай артҡа сайҡалып ҡуйҙы. Ләкин туҡтаманы. Һыҙғырҙы. Ҡаршыһына тағы бер ат килеп сыҡты, үсмер шул атҡа һикерҙе һәм шырлыҡ эсенә инеп тә китте. Яралы аты кешнәне лә бер яҡҡа ауа башланы. Йәнә һикереп торҙо, аҡтыҡ көсөн туплап урманға тартылды, хужаһы артынан ҡалырға теләмәй ине ул. Һалдаттар ҙа шул тарафҡа уҡталды. Ҡапҡа төбөндә телһеҙ ҡатып ҡалған Әләксәй тылмас һәрәйеп баҫып торһа, ерҙә Көһәнҡол ҡарттың һәм бер нисә һалдаттың йәнһеҙ кәүҙәһе генә ҡалды.

Аҡбүре атаһының ҡосағына ауҙы. Янғол ҡыҙын һаҡ ҡына ергә һалды.

- Нишләнең, тыңлауһыҙ бала?..

- Атай... Бына ул... Бына...

Пушкаревты саҡ-саҡ иҫенә килтерҙеләр. Ул ҡаршыһындағы әҙәмдәрҙе күргәс, күҙе маңлайына менде, ауыҙын бер асты, бер япты, ҡысҡырып ебәрҙе, һикереп торорға итте, унан һыңғырашып кире салҡан ҡоланы. Бер аҙҙан ул үгеҙ шикелле үкерә ине. Пушкарев төркисә ҡысҡыра башланы.

- Минә ҡағылырға ярамай. Батша һеҙҙе аямаясаҡ! Был яҡтарҙа мин үҙ иркем менән йөрөмәйем. Государь кешеһе, уның бурыстарын атҡарыусы. Мин булмаһам, бүтән кеше киләсәк!

- Ҡатындарҙы, ҡарт-ҡороно, бала-сағаны үлтерергә бүтән кеше киләсәкме? - Янғол Пушкаревтың муйынындағы тоҡанды тартты. Пушкарев балыҡ шикелле ауыҙ асып өҙөк-өҙөк оҙаҡ ваҡыт тын алды. Яубатыр уға йәнә яҡынлашҡас, Пушкарев ултырған еренән артҡа шыуыша башланы. Өҙөк-өҙөк тын алды. Нисек тә ваҡытты һуҙырға! Һалдаттарының пыр туҙҙырып эҙләүенә шик юҡ. Былар берәй нәмә уйлап сығарғансы, ихтимал, килеп табырҙар... Ул тубыҡланды.

лашырбыҙ. Тыуған ерҙе ташлап булмай.

- Атай, азат ит уны. Хөсәйен насар кеше түгел.

Янғол ҡыҙына ҡараған килеш ултыра бирҙе.

- Атай, һин униң бүләге өсөн асыуланғайның. Асыуланма. Минән бүләк алһаң ғына нығытманы бурҙәтәм, тине. Юғиһә, һинең фарманды үтәй алмаҫ инем. Ә күлмәктә ул өйләнгәс, кәләшенә бүләк итермен, тинем... Мин һиңә лә, сәнжәр антына ла хыянат итмәнем. Тик уны азат итә күр. Һүҙ бирәһеңме, атай?

Аҡбүре һүҙен дауам итә алманы. Янғол уны ҡулынан тотоп алды.

- Һүҙ бирәм, балам.

- Көһәнҡол олатай килеп етһә, һауығырмын, атай.

Ул ҡарттың үлтерелгәнен белмәй ине. Ни әйтергә белмәгән ата баш ҡаҡты. Ҡыҙы йылмайҙы. Күҙе йәнә йомолдо.

- Бөтөн үлән серен белә бит ул. - Бер аҙҙан өҫтәне. - Хәлем арыуланған һымаҡ. Шәбәйермен...

Аҡбүре берсә һушына килеп, берсә аңын юғалтып, оҙаҡ ыҙаланды. Төҙ, ғорур һынлы атаһының кәүҙәһе эргәһендә бөкөрәйеп, бәләкәсәйеп ҡалғайны. Таң һыҙылғанда тағы ла ул күҙен асты. Кипкән ирен нимәләр бышылданы. Атаһы уға яҡынайраҡ эйелде.

Хөсәйенде үлтереүен әйтә алманы.

Бер аҙҙаң Аҡбүре йәнә иҫенә килде. Ҙур асҡан күҙҙәрен атаһына төбәне. Күҙен йомдо, тертләгәндәй, ҡапыл ҙур итеп асып ҡараны һәм ҡулдары аҫҡа һәләнде.

- Балаҡайым... Балаҡайым, ашыҡма!..

Эргәһендәге яраны униң яурынына ҡулын һалды.

- Ҡорбашы, үтте ул. Үтте.

Янғол әкрен генә тороп баҫты. Төпкә батҡан күҙҙәрен яранына төбәне.

- Аттарҙы эйәрләгеҙ. Аҡбүрене алып китергә кәрәк.

- Ҡайҙа?

- Әсәһе янына. Баланы әсәһе көтә, тыумаған улым көтә...

* * *

Пушкарев иҫенә килгәндә янында берәү ҙә юҡ ине. Ул ятҡан урынын һәрмәштерҙе. Ишекте этте. Тыштан бикле, ә нишләп был ыҙманың түбәнәнән күк күренә? Ботаҡ-һатаҡ менән генә япҡандар, ул үҙ күҙҙәренә үҙе ышанманы. Ботаҡтарҙы этте, шыуышып ҡына ыҙма артына төштө, тирә-яғын байҡаштырҙы. Нисек былай? Ысынлап та ул биктән ҡотолдомо? Ныҡлы зиндан да яһай белмәгән ниндәй халыҡ һуң был? Әллә һалдаттары килеп пыр туҙҙырғанмы бандиттар ояһын? Ул саҡта нишләп

ИҒТИБАР!

# КОНКУРС ДАУАМ ИТӘ!




*Сәғит Агиш исемендәге хикәйәләр конкурсын 2005 йылда күренекле башҡорт яҙыусыһы, хикәйәләр оҫтаһы Сәғит Агиштың тыуыуына 100 йыл тулыу айҡанлы башлап ебәргәйнек. Әйтергә кәрәк, ошо конкурсты иғлан итеү менән күп кенә гәзит уҡыусыларыбыҙ тәүгә тапҡыр хикәйә яҙып ҡараны һәм, әйтергә кәрәк, уңышҡа ла өлгәште. Уларҙың күбеһе конкурста еңеүсе булып китмәнә лә, тәүге әҙәби һынауын үтте, ижадҡа йөҙ борҙо. Ошо рәүешле гәзит үҙенең даими авторҙарын барлыҡҡа килтерҙе. "Киске Өфө"лә ойошторолған әҙәби ижадҡа ҡағылмаған башҡа конкурстар һәм рубрикалар юҫығында ла редакция үҙенең штаттан тыш хәбәрселәре исемлеген тулыландырҙы.*

*Ә инде Сәғит Агиш исемендәге хикәйәләр конкурсына килгәндә, уның төрлө йылдарҙа лауреат булған авторҙары ошолар: Мирсәйет Ҡылысов "Атыңа рәхмәт әйт!" хикәйәһе өсөн, Хәлил Һөйөндөков - "Теҙләнә!", Иҙрис Ноғоманов- "Рәнйемә, Аҡтырнаҡ!", Заһир Дәүләтбирҙин - "Котолдо", Зифа Искужина-Фәҙелшина - "Өрем бәйләме", Әмир Сәйфуллин - "Инә бүре", Рәмилә Торомтаева - "Ялбыр", Миләүшә Ҡаһарманова "Ҡыҫыр" хикәйәһе өсөн.*

***Шулай итеп, Сәғит Агиш исемендәге хикәйәләр конкурсын дауам итәбеҙ. Конкурстың шарттары шул килеш ҡала: иң мөһиме - яҙған әҫәрегеҙ юғары зауыҡлы, уҡымлы, ҡыҙыҡлы булһын һәм 5-8 биттән артмаһын. Конкурсҡа йомғаҡ 2011 йылдың аҙағында яһаласаҡ. Еңеүселәрҙе иҫтәлекле бүләктәр көтә!***

- Аллаһ исеменән ялбарам, хөкөмөңдө сығармай тор. Миндә ҡорал да, дары ла етерлек. Кәрәгенсә алырһың, унан үҙ юлың менән китерһең, ә минең үҙ юлым.

Янғол көрәктәй ҡулы менән килтереп һуҡты.

- Ух-х... - Янғол тешен шығырлатты. - Улдарымды ҡайтар, ҡарт сусҡа!

Шул саҡ өй яғынан уға өндәшкәндәре ишетелде.

- Аҡбүре...

Янғол өйгә табан йүгерҙе. Аҡбүре иҫенә килгәйне. Ап-аҡ йөҙөндә моңһоу йылмайыу сағылды. Янғолдоң йөрәгенән нимәләр бик ҡаты семетеп алды. Ул ҡулын ҡыҙының маңлайына ҡуйҙы.

- Балаҡайым...

- Оҙаҡламай ҡуҙғалабыҙмы?..

- Ҡуҙғалырбыҙ. Беҙ һинең менән күп ер-һыу гиҙербеҙ. Унан тыуған ергә кире ҡайтып урын-

- Һин уны ебәрерһеңме, атай?

- Ебәрермен.

Бер аҙҙан Иркәбай атлы егет атылып килеп инде.

- Ҡорбашы, Ишҡар бей Гәрәйҙе үлтерҙе!

- Нисек үлтерҙе?

- Байрамғолдоң бысағын нисектер алған. Өлгөрмәй ҡалдыҡ...

Яубатырҙың бит тиреһе тартышты. Йоҙроғон йомарланы. Ҡыҙының тыныс йөҙөнә ҡарағас, ашыҡмай ғына әйтте.

- Ебәрегеҙ. Улы менән ҡуша.

- Ҡорбашы!

- Улы менән. Дүрт яғы ҡибла. - Ата кеше Аҡбүренән күҙен алманы.

- Был ысынмы?..

- Төп дошманым бында биктә ултыра. Артыҡ ҡан көһәмәйбеҙ.

- Ҡорбашы...

Янғол ҡул һелтәне. Иркәбай асҡан ауыҙын япты ла сығып китте. Ул Янғолға Байрамғолдоң

ҡотҡарыусылар күренмәй? Юҡ, һаҡ ҡыланырға кәрәк. Ана бит бер түбәтәй ағас төбөндә нимә менәндер булыша. Ҡәһәр төшкөрө, уға ҡаҙаласаҡ хәнйәрҙе үткерләйме? Ҡайҙа икән теге баш бурҙары? Пушкарев иплөп кенә артҡа табан осаһы менән шыуыша башланы. Һарҡыуға китте. Бында боҫһа, тиҙ генә тапмаҫтар. Үлән дә ҡуйы. Тик иҫтәренә әле генә төшөрә күрмәһендәр... Бара торғас, ул ҡуйы урман эсенә барып инде. Юҡ, ошонда аҙашыу хәйерлерәк. Бер нисә көн йөрөнә ул ҡарурман эсендә. Аслыҡ та, һыуһау ҙа үҙәккә үтте. Тик Янғол бандитҡа барып ҡапмаҫ өсөн бөтәһенә лә риза ине ул. Йөрөй торғас, йылғаға барып төштө. Саҡ-саҡ унда батманы. Ана шунда уны һалдаттары һөйрәп килтереп сығарҙы.

- Мин үлемһеҙ, ха-ха-ха! Бандиттарҙың ояһынан имен сыҡҡан кеше үлмәй ул! Бынан ары үҙем тарихты яҙыусы, ха-ха-ха!..

Китәм мин был ҡәһәрле ерҙән. Бөтөнләйгә!

* * *

Янғол Аҡбүрене ҡәбергә һалыр алдынан аҙаҡҡы мәртәбә ҡосаҡланы.

- Ғәзиз балам, беҙҙең ауырлыҡ һинең иңгә төштө. Беҙ күтәрә алмағанды һин күтәрҙең. Бер яугир ҙә үҙенең күпме йәшәрен белмәй. Ул мәңге йәшәрҙәй алыша һәм һәр бер яуҙың үҙе өсөн аҙаҡҡыһы икәнен дә белә... Мин, балам, алыҫ яҡҡа юлланам. Ҡайта алырмынмы-юҡмы, белмәйем, ләкин тыуған илемә ҡайтырыма өмөт менән ҡуҙғалам...

Ишҡар бейҙе улының үле кәүҙәһен ҡосаҡлаған килеш таптылар. Ул бер нәмә лә өндәшмәйенсә, Хөсәйендең башын түбығына һалған килеш сәсен һыпыра ине.

- Арыған, аҙ ғына йоҡлаһын...

Бейҙе, еңеләйгән, тип уйланылар. Ләкин ул ҡайғылы күҙҙәре менән ырыуҙаштарын байҡағандан һуң, шулай тине:

- Мин үҙемдә йыуатам. Мин үҙемдә алдайым. Үҙеңдә алдап булмай, ә минең алдайым. Артабан нисек йәшәргә? Нисек?

* * *

- Табындар яғына китәбеҙ. Унда ут-дау ҡупҡан. Беҙҙең ярҙам кәрәк.

Янғол яугирҙәренә һөҙөп ҡарап алды. - Ете ҡат үлсәгеҙ. Бөтәбеҙ ҙә әйләнеп ҡайтмаясаҡ.

Берәү ҙә урынынан ситкә китмәне. Урман юлы буйлап ҡуҙғалдылар. Шул саҡ Иркәбай тигән йәш егет ҡысҡырып ебәрҙе.

- Унда... юл ситендә бүре балаһы!..

Кемдер һаҡ ҡына өндәште.

- Аҡбүре!

Янғол тертләне. Әрнеү һәм һағыш тулы ҡарашын офоҡҡа төбәне.

- Бүре күк төҫтә генә була, - тине Янғол. - Ә был һорбүре.

Егеттәр бер-береһенә ҡараштылар.

- Ә Аҡбүре... Аҡбүре беҙҙе мәңгегә ҡалдырып китте. - Бөтә ҡайғыһын, әсенеүен эсенә йәшереп, тоноҡ тауыш менән өҫтәне ҡорбашы.

- Мин уйламайыраҡ әйттем, - тине хәҙер үҙен бик ғәйепле тойған Иркәбай. - Был бер бүре балаһы ғына...

- Юҡ, улай ғына ла түгел. Ул беҙҙе арттан оҙата бирерәк ҡалыр. Маңлайына ҡара, уның башы салланған булыр.

- Һин бит әле уға бер тапҡыр ҙа боролоп ҡараманың! Ҡайҙан беләһең, ағай? - Иркәбәйҙең тауышында аптырау ҙа, хәүеф тә ҡуша яңғыраны.

Янғолдоң тәрән кисерештәрҙе сағылдырған көсөргәнешле күҙҙәре ярым ҡыҫылды. Ул ҡарашын офоҡтан, сикһеҙлектән алманы, алыҫҡа, үткәнгә төбәлгәйне яубатырҙың ҡарашы. Иркәбай һиҫкәнде.

- Кем һуң ул?..

Янғол ашыҡмай ғына яуап бирҙе.

- Минең тыумаған улым.

...Башҡорттарҙың Рәсәйгә ҡушылғандан һуң башланған ҡанлы-шанлы, фажиғәле биттәренең был башы ғына ине. Билдәһеҙ биттәре.

**(Аҙағы).**

✓ *Айыу тигәндәре бышҡырып ебәрә лә, гөрһөлдәп ергә ауа. Улар күрше ауылдағы олатайҙың тышаулы атын айыу тип уйлаған икән. Ат, бахыр, ҡайҙан белһен инде һунарсыларҙың ағас баштарында айыуҙы көтөп ултырғанын?*



ИНТЕРНЕТТАН



# САҒЫУ ТӨШТӘР...

## аҡыллылар өлөшө

■ Сағыу төштәрҙе йыш күрәһегеҙме? Тимәк, һеҙҙең интеллект кимәлегеҙ бик юғары. Америка ғалимдары фекеренсә, төҫлө төштәр күрергә һәм уларҙы иҫтә ҡалдырырға интеллекты юғары булған кешеләр генә һәләтле. Ғалимдар үткәргән тикшеренеүҙәрҙә ике меңдән ашыу кеше ҡатнаша. Уларҙың ҡайһы берҙәре йоҡлаған саҡта төш күрһә лә, уянғас та уны иҫкә төшөрә алмауы тураһында белдергән. Тикшереүҙә ҡатнашыусыларҙың бер өлөшө бөтөнләй төш күрмәүен әйткән. Тик аҙҙар ғына даими рәүештә төш күргән һәм уларҙы ентекләп һөйләй алған. Был һынауҙар үткәс, тикшеренеүселәр уларҙың интеллект һәләтен тикшергән һәм ошондай һығымтаға килгән дә инде.

■ Канада тикшеренеүселәре белдереүенсә, ыңғай фекер йөрөтөүселәр тормошта килеп тыуған көтөлмәгән хәлдәрҙе тиҙерәк һәм уңышлыраҡ хәл итә. Тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусы студенттарҙы бер нисә төркөмгә бүлеп, төрлө эмоциональ характерҙағы видеороликтар күрһәткәндәр. Күңелле сюжеттар ҡараусылар классификацион һурәттәрҙе лә тиҙерәк аңлаған, башҡа мәсьәләләрҙе лә күберәк сисеүгә өлгәшкән. Шуға ла яуаплы йәки ижади эшкә тотонор алдынан эксперттар кәйефте күтәреп алырға тәҡдим итә.

■ Америка ғалимдары белдереүенсә, тәмәке тартмаған, әммә йыш ҡына тәмәке төтөнө һуларға мәжбүр булыусыларға ишетеү һәләтен юғалтыу ҡурҡынысы янай. Табиптар ҡан өлгөләрендә котинин юғары булған 20 йәштән 69 йәшкә тиклемге өс мең сиреннең медицина мәғлүмәттәрен сағыштырып, уларҙың ишетеү һәләтен дә тикшерә. Һөҙөмтәлә, бындай кешеләрҙең 10 процентында түбән тауыштарҙы ишетеү һәләте түбәнәйгән була, ә һәр дүртенсе кеше бөтөнләй насар ишетә. Эксперттар фекеренсә, сараһыҙҙан тәмәке тартыусылар араһында эшләргә, йәшәргә тейеш булған кешеләрҙең һаулығына тап тәмәке төтөнө зыян килтерә лә инде. Шуға ла донъяның ҡайһы бер илдәрендә йәмәғәт урындарында тәмәке тартыу бөтөнләй тыйылған.

■ Белгестәр әйтеүенсә, үсмер саҡта тоҙ ҡулланыуҙы көнөнә 1 грамға ғына кәметеү ҙа киләсәктә ҡан баҫымы менән бәйле проблемаларҙы булдырмаҫҡа ярҙам итә. Тикшеренеү барышында Америка ғалимдары шуны асыҡлаған: был йәштә көнөнә тоҙҙо 3 грамдан аҙыраҡ ҡулланыу ҡан баҫымы, йөрәк сирҙәре һәм инсульт осраҡтарын 44-63 процентҡа түбәнәйтергә ярҙам итә. Белгестәр билдәләүенсә, үсмерҙәр тоҙҙо һәр саҡ артығыраҡ ҡуллана, етмәһә, улар яратҡан тоҙло аҙыҡтарҙа, фаст-фудта тоҙ кәрәгенән артығыраҡ була. Шулай уҡ һәр йәштә лә тоҙҙо аҙыраҡ ҡулланыу сәләмәтлек нигеҙе булып тора, ти табиптар.

■ Америка тикшеренеүселәре Яңы йыл байрамдарының бәхетле минуттар менән бергә көслө стресс та бүләк итеүе ихтимал, тип иҫкәртә. Был осор бигерәк тә ҡатын-ҡыҙҙарға ауырға тура килә, сөнки байрам танталарын ойоштороу, өҫтәл әҙерләү кеүек эштәр менән улар шөғөлләнә. Байрам алдынан бүләктәр һатып алыу ҙа ярайһы ғына көсөргәнешле күренеш. Оҙайлы каникулдарҙа артығын ашау, алкоголле эсемлектәр ҡулланыу, көнө буйы өйҙә диванда телевизор ҡарап ятыу ҙа сәләмәтлеккә зыян килтерә.

КЕШЕ ҺӘМ ТӘБИҒӘТ

**Һуңғы ваҡытта аҡыллы, зиһенле йәндең - кешенең ҡылған ҡылыҡтары, тәбиғәткә, тере йән эйәләренә, бер-береһенә мөнәсәбәте хаҡында күп уйланам, ләкин уйҙарымдың осо-башына сыға алғаным юҡ әлегә. Шуға бәйләп, айыуға һунар итеү, уның барышы, аҙағы нимә менән бөткәне тураһында күреп-белгәндәремде, ишеткәндәремде, ысынбарлыҡты һеҙгә лә бәйән иткем килә. Һығымтаһын инде үҙегеҙ эшләгеҙ. Был үткән ваҡиғаларҙа көлкөһө лә, аяныслыһы ла бар, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, аяныслыһы күберәк шул.**



# АЙЫУҒА АҒАЙЫҢ МЕНӘН БАР,

## йәки Һәр ир-егет күңеле менән һунарсылыр...

Яҙмамды иһә бер хикмәтле һүҙҙән башлағым килә: кеше бүре кеүек батыр, арыҫлан кеүек көслө, төлкө кеүек хәйләкәр. Айыу иһә рыяһыҙ йыртҡыс иҫәпләнә. Һәр халҡә, әкиәттәрҙә, балалар яратып ҡараған мультфильмдарҙа ул шулай һүрәтләнә.

Берҙән-бер көндө айыу йылға аша ҡара урманға ҡарай сығып барғанда, уны күреп ҡалған суртан:

- Ҡайҙан киләһең? - тип һораған.

- Аҡыллыны һайлаған ерҙән, даланан, - тип яуаплаған айыу.

- Кемде һайланығыҙ инде?

- Кешене, тағы кемде булһын...

- Эй, айыу, айыу, кешенән хәҙер һинә үҙ урманыңда, ә минә үҙ йылғамда тынғылыҡ булмаясаҡ. Аҡыллы зат итеп һайлағанығыҙ өсөн ул һеҙгә, исмаһам, берәй нәмә вәғәҙә иттеме һуң?

- Унан нимә талап итәһең инде? Уны бит беҙҙең арабыҙҙа зиһенгә эйә берҙән-бер йән эйәһе булған өсөн һайланылар. Өҫтәүенә, уның йыртҡыс хайуандарҙыҡы кеүек үткер тештәре, имәнес тырнаҡтары юҡ. Әйткәндәй, ялағас, нәфис тәнле һәм затлы нәҫелдән. Алла кемде яҡын күрһә, халыҡ та шуны үҙ итә. Шуға ла кешегә хөрмәт күрһәткәндәрҙер инде. Ҡалай итәһең...

- Шулай ҙа, теге ни... - тип яңынан һүҙ башлаған суртан.

- Һиңә тағы нәмә кәрәк, - тип екергән уға айыу, - үҙ кәрҙәштәреңде әҙәрлекләгәнең, үткер тештәрең менән ҡырғаның да еткән.

- Юҡ, мин бит ул хаҡта һүҙ йөрөтмәйем. Аҡыллы итеп һайланған кешенән беҙгә ниндәй яҡшылыҡ булыр икән, бына шул ҡыҙыҡһындыра мине.

- Ярай, улай бик белергә теләгәс, әйтәйем инде һиңә дөрөҫөн. "Һеҙ мине аҡыллы тиген тәхеткә күтәреп ултырттығыҙ. Бының өсөн мин һеҙҙең ҡайһы берегеҙҙе яурындарыма һалырмын, ә ҡайһы берегеҙҙе өҫтәл өҫтөнә ҡуйырмын", - тип вәғәҙә бирҙе ул кеше тигәнең үҙенең һайлаусыларына.

- Эй, туған, - тип, бошонҡо ғына аңлата башлаған суртан, - был бит кеше һинең туныңды һалдырып, үҙенең ялағас яурындарына ҡаплай, ә мине үҙенең аш өҫтәленә ҡуя, тиген һүҙ...

### Беренсе һунар

Колхоз-совхоздарҙың көслө, малтыуарҙың ишле, айыуҙарҙың күп саҡы. Йәй урталарында ауылдан алыҫ түгел ерҙә колхоз һыйырын айыу йыға. Ике ағай емтеккә айыу киләсәген белеп, уны атып алырға һөйләшкәндәр. Беҙҙең яҡта мәрәкәсел, йор һүҙле, әсе телле, әҙерәк кенә арттырыбыраҡ һөйләй торған, күңеле көр кешеләр йәшәй. Халыҡ һөйләүе буйынса, был ағайҙар ҙа ҡыйыулыҡ, төнгө һалҡында өшөмәҫ өсөн әҙерәк кенә "төшөрөп" алған, ләкин улар тәмәке тартмай ине. Шулай булғанмылыр, юҡмылыр, мин белмәйем. Нисек булғанын улар үҙҙәре генә белә инде. Алдан әҙерләп ҡуйған урындарына менеп урынлашҡас, айыуҙың килгәнен көтә башлайҙар. Таңға ҡарай емтеккә табан бер ҙур "айыу" яҡынлаша. Берене икенсеһенә "Ат!" тип ҡысҡырып ебәрә... Төнгө тынлыҡты боҙоп, бер-бер артлы ике атыу тауышы яңғырай. Мин һиңә "Ат!" тип әйтмәнем бит, ә "лошадь" тип әйттем, тип ҡысҡырыу һуңлай. Айыу тигәндәре бышҡырып ебәрә лә, гөрһөлдәп ергә ауа. Улар күрше ауылдағы олатайҙың үлән утлап йөрөгән тышаулы атын айыу тип уйлаған икән. Ат, бахыр, ҡайҙан белһен инде һунарсыларҙың ағас баштарында айыуҙы көтөп ултырғанын? Аҙағы нимә менән бөттөмө? "Үткән эш - бөткән эш", тигәндәй. Ағайҙар ауылдар буйлап йөрөп, халыҡҡа һата алғансы ат ите һатты, арзанығраҡ хаҡҡа, әлбиттә. Бер-нисә көн үткәс, һунарсыларҙың аттың хужаһына икенсе ат һатып алып биреүе тураһында ишетелде. Бушҡа ғына халыҡ: "Айыуға ағаң менән бар", - тип әйтмәй шул.

### Икенсе һунар

Үҙен ихтирам иткән һәр ир-егет күңеле менән һунарсылыр ул. Әммә бөтәһе лә был мөмкинлеккә эйә була алмай. Ҡышҡы ғинуар айында арҡаға рюкзак аҫып, саңғы менән ҡар ярып, урманға барыу һәр кемдең ихтыярынан килә торған ғәмәл түгел. Тап шулай иткәндәр генә ысын һунарсы була инде. Юғиһә, һунар һылтауы менән урманға сығып, кәйеф-сафа ҡороп, шешәләрҙе яра атып ҡайтыусылар хәҙер бигерәк күбәйеп китте. Улар ҙа үҙҙәрен һунарсы һанайҙар. Кейгән кейемдәрен, мылтыҡтарын, боеприпастарын ҡарағыҙ әле: һуғышҡа барабармы ни? Ауылда эшһеҙ ҡалған ир-егеттәр нисек тә көн итер өсөн, ғаиләнә ҡарар өсөн төрлө ерҙәрҙә яллап эшләп йөрөп ҡаранылар, ләкин байып, хәлләнеп китеүселәр бармаҡ менән генә һанарлыҡ ине. Байҙарҙа иһә ата-бабаларыбыҙҙың боронғо кәсебе - һунарсылыҡ менән шөғөлләнеү теләге, һунарсы ҡомары уянды. Ҡышҡы йоҡоға ятҡан айыуҙың өңөн табып, алып барып күрһәтеү, әлбиттә, атып алыуҙа ҡатнашыуҙың хаҡы ла билдәләнде. Өң эсендә нисә айыу булыуына ҡарамаҫтан, хаҡы - 50 мең һум.

Айыу өңөн табыу күпме ваҡыт, ниндәй көс талап иткәнен һунарсы үҙе генә белә. Ундай бәхет һәр кемгә тәтемәй шул! Өң эсендә нисә айыу булыуы ихтимал һуң? Был турала төрлө фекерҙәр бар, төрлөсә һандар килтерелә. Бынан бер-нисә йыл элек ҡышҡы йоҡонан уянған айыуҙарҙың өңөнән сыҡҡанын бинокль аша күҙәтеү бәхете тейҙе миңә. Ауылыбыҙҙы ҡалҡан шикелле һаҡлап, күҙәтеп торған пирамида рәүешле Ослотауҙың бейек итеген төйәк итеп, айыуҙар ҡыш үткәреп сыҡҡан, тип берәү ҙә уйламаҫ. Апрелдең баштары ине. Өйҙә күмәкләшеп сәй эсеп ултырабыҙ. Ҡустым торба кеүек бинокль тотоп, тәбиғәтте күҙәтергә тип тышҡа сығып китте. Күтәрмәнән тирә-яҡты ҡарап торғанда күреп ҡала ул айыуҙарҙы. Тамаша күрергә тип беҙҙе лә саҡырып сығарҙы. Ике айыу ике балаһы менән өң эргәһендә аунай башланылар, эргәһендә үҫеп ултырған имән ағастарын тырнаштырып, хатта ике балаһы ағас башына үрмәләргә лә маташып ҡараны. Тау башына ҡарай менергә уйлағайнылар, ҡар ҡалын булып сыҡты, айыуҙарға кире өңөнә инеп китеүҙән башҡаса сара ҡалманы. Һирәк осрай торған иҫ киткес матур, һоҡланғыс күренеш оҙаҡ булмай шул.

Күрше ауылдағы һунарсы ағай ҙа айыу өңөн эҙләп, байтаҡ көндәр үткәрә, ләкин өмөтөн өҙмәй. Иртәнсәк сығып китә, кис ҡайта. Көн һайын 20-30 саҡрым ерҙе саңғы менән гиҙеп ҡайта. Ҡырҙа, ҡар өҫтөндә, сәйнүге менән сәй ҡайнатып эскәндә уйлаған уйҙарын, хыялдарын беҙ бер ҡасан да белмәйәсәкбеҙ, Хоҙай үҙе генә белә. Ғаиләһен хафаға һалып, ул бер көндө ҡайтмай. Икенсе көнөнә лә юҡ. Күрше ауылдарҙағы туғандарынан да һораштырып, белешеп ҡарайҙар. Юҡ... Шунан инде эҙләй башлайҙар. Бәлки, айыу ашағандыр? Булмаҫ.

Ир-егеттәр күмәкләп эҙләргә тотона. Көн дә 20-25 саҡрым ерҙе саңғыла йөрөп эҙләйҙәр, ләкин һөҙөмтә юҡ. Бер-нисә көн үткәс, тау битенән ҡар шыуғанын белеп ҡалалар һәм тауҙағы ҡарҙы ҡаҙып, эҙләргә тотоналар. График буйынса эҙләү, шыуған ҡарҙы ҡаҙыу ойоштороло. Ҡарҙың ҡалынлығы урыны менән 6 метрға саҡлы барып

етә. Ҡаҙа торғас, ағайҙың бейәләйен, саңғыһын табалар. Шик юҡ, ҡар аҫтында ҡалған. Бер айҙан ашыу ваҡыт үткәс кенә ҡаршы тауҙың битләүенән, ҡар ҡатламы аҫтынан табып алалар уны. Шул көйөнә генә ятҡан бит әле, бисара. Ир-егеттәрҙең, малайҙарының берҙәмлеге, ныҡышмалылығы, өмөттәрен өҙмәүе, ҡышҡы һалҡынға ла, буранға ла бирешмәүҙәре йәлләтә лә, һоҡландыра ла. Ҡалай итәһең инде, яҙмыштыр...

### Өсөнсө һунар

Ни өсөн бигерәк тә әҙәм затын айыуға һунар итеү ымһындыра, ҡыҙыҡһындыра һуң? Минеңсә, айыуҙың тиреһе, ите, майы, үте, тырнаҡтары ғына ҡыҙыҡһындырмай кешене. Минең дә аяҡтарым менән байыраҡ кешеләрҙең өйҙәрендә, дачаларында айыу тиреһенә баҫып йөрөгәнем, ҡулым менән һыйпап ҡарағаным булды. Тәндәрем әллә нисек итеп зымбырлап, күңелемә ҡыйын булып китә торғайны. Былтыр йәй көнө: "Тоҙаҡҡа эләккән айыу һыу ҡырында үлеп ята..." - тигән хәбәр бөтә ауылға йәшен тиҙлегендәй таралды. Кем ҡыҙыҡһына, шулар бөтәһе лә тамаша ҡылды үлгән айыуға, фотоға төшөрөп алыусылар ҙа күп булды. Был айыуҙан айыу тигән исеме генә ҡалғайны. Ер тырнап, ҡортлап, һыуланып, ғазапланып, ябығып, быуылып үлгәйне урман хужаһы. Бер аҙнанан барып ҡараһаҡ - башын, үтен, тырнаҡтарын ҡырҡып, йолҡоп алып киткәйнеләр. Япониянан айыуҙың үтенә өп-өр яңы "Тойота" машинаһы бирәләр, тигән һүҙ дөрөҫмө икән әллә, тип уйлап ҡуйҙым мин. Үҙенән физик яҡтан ғына түгел, ә рухи яҡтан да көслөрәк йыртҡысты үлтереү - кешегә үҙенең өҫтөнлөгән иҫбат итеү, ләззәтләнеү, йыуаныс кисереү, әҙ генә булһа ла тынысланыу, тантана итеү өсөн кәрәктер. Әллә ҡорбан килтереүме икән, тип тә уйлап ҡуям.

Ырымбур өлкәһенең Ҡыуандыҡ районында була был күңелдә әрнеткес хәл. Себер тарафтарынан ҡайтып төшкән ике ирҙең ҡапыл ғына айыу атып алғылары килә һәм улар ҡиммәтле машинаға кәрәк-яраҡтарын тейәп алып, Шайтантауға һунарға, бер аҙ ял итергә, хозур тәбиғәт менән һоҡланырға сығып китәләр. Шул уҡ көндә мәктәптә военрук булып эшләп йөрөгән ағай ҙа һунарға юллана. Энер төшә. Маңлайына аҫмалы фонаригын ҡуйып, юлды яҡтырта-яҡтырта урмандан сығып килгәндә, яңылышмы, әллә яҙмыш ҡушыуы буйынсамы инде, теге ике "һунарсыға" тап була. Әгәр уларҙы һунарсы тип атап булһа. Теге икәүҙең күҙҙәренә ботаҡ үҫкәнме, әллә зиһендәрен Шайтантауҙың шайтаны томалағанмы, яҡтыртҡыслы кешене айыу урынына ҡабул итәләр. Икенсе төрлө әйткәндә, кеше менән айыуҙы бутайҙар. Атыу тауыштары яңғырай, үлемесле яраланған һунарсы ергә ауа. Тәүге ярҙам күрһәтергә маташып, машиналарында дауаханаға табан юл тоталар, ләкин бер ғәйебе булмаған кеше дауаханаға барып етмәйенсә, юлда уҡ яҡты донъя менән хушлаша.

"Тегеләр менән нимә булды? Нисек хөкөм иттеләр?" - тип һорарығыҙ һеҙ. Бер нәмә лә булманы. Хөкөм дә итмәнеләр. Аҡса, аҡсаһыҙлыҡ заманы бит. Ирһеҙ ҡалған ҡатынына, атайһыҙ балаларына, тағы әллә кемдәргә аҡса түләп ҡотолоп ҡалдылар. Хәҙерге көндә лә яҡты донъяның рәхәтләреген тойоп, тәмен белеп йәшәп яталар.

Шуны шәйләгәнем бар: үҙен ысын һунарсы тип һанаған кеше бер ҡасан да һунары тураһында бөтәһенә дә түкмәй-сәсмәй һөйләп бирмәй, ә ниндәйҙер өлөшөн, серен үҙендә ҡалдыра. Бер йәй, көҙ эсендә 7-8 айыу алған ысын һунарсы ир-егетте беләм. Унан бер һунарын ғына һөйләтер өсөн күңелен күреп көнө буйына эргәһендә йөрөргә тура килә, ул шунда ла тулыһынса асылмай. Ҡатынына ла дөрөҫөн һөйләмәй.

Ғөмүмән, айыу, уға һунар итеү тураһында күп һөйләргә, китап яҙырға булыр ине, ә хәҙергә ошоноң менән сикләнеп торайыҡ. Бәлки, дауамы булыр...

**Ғайса ИШМӨХӘМӘТОВ.**
**Ейәнсура районы.**

*ДОНЪЯ -ҠУЛАСА*

# ТИМЕР ИШЕК АРТЫНДА...

## битарафлыҡ йәшәй

**Элегерәк тимер ишектәр һирәктәрҙә генә ине. Ҡыйбат булыуынан йәки эшләтергә сират ҙурлыҡтан түгел, ә ихтыяж юҡ ине. Хәҙер иһә тимер ишекһеҙ фатирҙар һирәк. Ишеге көпләнмәгәндәргә ҡараш та икенсерәк кеүек хатта. "Эй-й, уның эшләп йөрөүенән ни файҙа, ишеген дә алмаштыра алмай", - тигәнерәк фекерҙәр ишетергә тура килгәне лә бар.**

Шул тимер ишек артында хәҙер ут күршеһен дә белмәй йәшәй ҡала халҡы. Эштән ҡайтҡас, ишеген бер түгел, ике-өс келәгә элә лә, психологтар әйтеүенсә, үҙенең шәхси донъяһында көн итә бирә.

Яңыраҡ бер танышыма эштән ҡайтып килгәндә үҙе йәшәгән йорттоң подъезында берәү һөжүм итә. Ҡатын ярҙам һорап ҡысҡыра-ҡысҡыра енәйәтсе менән алыша. Уның ҡулынан ысҡынып, бер-ике фатирҙың ишегенә лә шаҡып өлгөрә. Юлбаҫарҙы был да ҡурҡытмай. Бер кем дә ишек асмауын, яҡлашмауын яҡшы белгән ул, күрәһең.

Иртәгәһенә иһә бер ҡат түбәндә йәшәгән күршеләре, ирең менән һуғышаһыңдыр тип сыҡманыҡ, тип аҡлана. Шул ваҡытта кем дә булһа ишек асһа, енәйәтсе ҡатынды ебәрер ине, ғәҙәттә, ундайҙар ҡурҡаҡ була, шаһиттарҙы яратмай.

Шаһит тигәндән, беҙҙең кемебеҙ шаһит булырға ярата һуң? Тимер ишек артында күршебеҙҙең көмөшкә һатҡанын да күрмәйбеҙ. Икенсеһенең наркотиктар менән мауығыуы тураһында ишеткебеҙ ҙә, күргебеҙ ҙә килмәй, өҫкөмө-аҫҡымы ҡатта көн дә балаһын, ҡатынын йәберләгән ирҙе лә ишетмәйбеҙ. Буш шешә, ҡанлы шприцҡа юлыҡҡанда ла күрмәмеш булып үтәбеҙ.

Күптән түгел Рәсәй ҡалаларының береһендәге бер фатирҙа һигеҙ йәшлек малайҙы педофил язалап үлтергән, тигән хәбәр бөтә илде тетрәндерҙе. Үҫмерҙең үҙәк өҙгөс тауышын ишетеүселәр булған, шулай булыуға ҡарамаҫтан, бер кем дә ярҙам итергә ашыҡмаған. Һөҙөмтәлә малай яуызлыҡ ҡорбаны була. Яуызлыҡ ҡына түгел, ә битарафлыҡ ҡорбаны ла ул.

Былтыр бөтә илде тетрәндергән тағы бер хәлде иҫләйһегеҙҙер. Метрола рельсҡа ҡолап, студент ҡыҙ һәләк булды. Видеокүҙәтеү камераһы яҙмаларынан күренеүенсә, был хәл тиҫтәләгән кешенең күҙ алдында була. Бер нисәүһе хатта ҡыҙҙың ҡолаған урынын барып ҡарап та тора, әммә береһе лә ярҙам ҡулы һуҙмай. Кеше ғүмере - иң ҙур ҡиммәт. Ана шул ҡиммәткә битарафлыҡты раҫланы инде был хәл. Ваҡыт - аҡса, тиеп, һәр кем үҙ юлында булды. Кеше мөнәсәбәтенең дә баҙар иҡтисадына күсә барыуының ҡырағай бер күренеше ине ул.

Поликлиникала сират көткәндә яҡты донъя менән хушлашыусылар ҙа - эргә-тирәһендәгеләрҙең ғәмһеҙлеге сағылышы. Беҙҙең беребеҙ ҙә оҙаҡ көтөргә яратмай. Сиратһыҙ үтеү өсөн ниндәй генә сәбәп тапмайбыҙ. Танышыбыҙҙы, әҡрәбәләребеҙҙе эҙләйбеҙ, алдайбыҙ, әрләшәбеҙ, хатта һуғышыуға тиклем барып етәбеҙ. Ошо мәлдә медицина ярҙамына ысынлап та мохтаж кеше сиратта тыныс ҡына көтә лә көтә...

Ғөмүмән, беҙ бөтә нәмәгә битараф була барабыҙ. Кеше ҡайғыһына ғына түгел, шатлыҡ-ҡыуанысына ла ғәмһеҙбеҙ. Көнсөлбеҙ. Тыуған көн, туй йәки башҡа төрлө һөйөнөслө ваҡиғаны ысын күңелдән уртаҡлашып, шул тантаналар уртаһында булыр урынға, кеше аша бүләк ебәрәбеҙ. Был - ихласлыҡ түгел, был битарафлыҡтың бер төрө.

Күпер төбөндә йәшенеп тәмәке тоҡандырырға тырышҡан башланғыс класс уҡыусылары янынан өндәшмәйенсә, күрмәмешкә һалышып китеүҙе лә, һәр һүҙе аша һүгенгән үҫмер ҡыҙҙы ишетмәмеш булып һүҙ ҡатмау ҙа - битарафлыҡ.

Беҙ бала саҡта урамда берәй оло кеше осраһа, ул беҙҙең кем балаһы булыуыбыҙ, нисәнселә уҡыуыбыҙ, бер ниндәй сәбәп булмаһа ла маҡтап, сәсебеҙҙән һыйпап, арҡабыҙҙан һөйөп, күңелебеҙҙе үҫтереп китер ине. Эйе, ауыл менән ҡаланы сағыштырып булмай. Ауылда бөтәһе лә таныш, яҡын. Шул уҡ ваҡытта ниндәйҙер ярамаған эш ҡылған үҫмер янынан күрмәмешкә һалышып үтеү ҙә ярамай. Философ Борис Ясенский әйтмешләй, "Дошманыңдан ҡурҡма, иң насары - ул һине үлтерә генә ала, дуҫыңдан да ҡурҡма, иң насар осраҡта ул һине һата ғына ала. Битарафтарҙан ҡурҡ, тап уларҙың өндәшмәүе, килешеп йәшәүе арҡаһында донъялағы күп насарлыҡтар эшләнә". Эйе, һаҡһыҙлыҡ менән кеше ғүмеренә йәки һаулығына зыян килтергән өсөн Енәйәт кодексында яза бар, ә битарафтарға, ғәмһеҙҙәргә ҡаршы берәй ҡасан яза булырмы икән? Нәҡ уларҙың битарафлығы арҡаһында күп ғәҙелһеҙлектәргә, енәйәттәргә юл ҡуйыла бит...

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Һүҙеңде үлсәп һөйлә

Һәр ваҡыт бер үк төрлө төштәге өңгә мөрәжәғәт итегеҙ. Тәүҙә һеҙгә үҙегеҙҙе эшегеҙҙә бәхетле итеп "күреү" кәрәктер. Шунан һуң үҙегеҙҙе эш һуңына тиклем барлыҡ эшегеҙҙең дә осона сыҡҡан итеп күҙаллағыҙ. Артабан инде етәксегеҙҙең йылмайыуын, яңы индерелгән үҙгәрештәргә яраҡлашҡан итеп күрегеҙ. Шундай юҫыкта күҙаллауҙарҙан ҡәнәғәтлек алығыҙ. Теләк, өмөт, ышаныс менән эшләгеҙ һәм өңдәге төшөгөҙ тормошҡа ашыр.

Ниһәйәт, үҙ-үҙегеҙ менән һөйләшеүҙәрегеҙҙе анализлағыҙ. Һөйләшеү - ул ғәҙәт. Беҙ сираттағы һүҙҙе әйтер алдынан сираттағы аҙымды баҫыр алдынан уйланған кеүек уйланабыҙ. Сикләүсе һәм кире энергия тартыусы һүҙҙәрҙән ҡотолоу өсөн көсөргәнешле йомшартып, уйҙар һәм ыңғай аффирмация ярҙамында ҡайтанан программалашыуға мөрәжәғәт итергә кәрәк.

Мәғлүм булыуынса, тәүҙә һүҙ ижади ҡеүәткә эйә булған. Был Илаһтың матди йәшәйеш булдырыуы буйынса эшмәкәрлегенең башы булып тора. Мәҫәлән, "тырышырмын" тигән һүҙҙе генә алып ҡарайыҡ. Беҙ уны йыш ишетәбеҙ. Русса ул "попытаюсь" тип әйтелә. Кем тырыша, йәғни "пытается" (попытаюсь - пытка, интектереү һүҙенән алынған), бер ваҡытта ла бер нәмәгә лә өлгәшә алмаясаҡ. Иң яҡшыһы - "Мин эшләйәсәкмен", "Мин унда буласаҡмын", "Мин еңәсәкмен" тиергә. Раҫлау һүҙҙәрен ҡулланып, һеҙ аңығыҙға тейешле күрһәтмә бирәһегеҙ. Ул үҙе өҫтөнлөктәрҙе билдәләй һәм ижади һәләтегеҙҙе әүҙемләштереп, һеҙ еңеп сығаһығыҙ.

Күптәр "булдыра алмайым" тигән һүҙҙе ҡуллана. Шулай тип һеҙ үҙенән-үҙе тормошҡа ашасаҡ фараз ҡылаһығыҙ. "Булдыра алмайым" тип әйтәһегеҙ икән, ысынлап та, уңыш ҡаҙаныу мөмкинлегегеҙ була тороп та быны булдыра алмаясаҡһығыҙ.

Күреүегеҙсә, көндәлек һөйләшеүҙәрегеҙҙе ҡайтанан программалаштырыу - уйығыҙҙа таҙарыныуға ҙур аҙым.

**Программалаштырыуҙы ошолайыраҡ атҡарығыҙ:**

● Уңайлы итеп ултырығыҙ һәм тәнегеҙҙе көсөргәнештә арындырығыҙ. Күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ. Өс тапҡыр тәрән итеп тын алығыҙ һәм бер нисә тыныс күренештәрҙе күҙ алдығыҙға килтерегеҙ.

● Бер нисә тапҡыр уйығыҙҙан ғына: "Мине сикләүсе һүҙҙәрҙе ҡулланыуым тураһында үҙ-үҙемә отчет бирәм. Мин уларҙың тормошома кире йоғонто яһауын аңлайым. Әммә мин яҡшыраҡ йәшәргә теләйем һәм шуға күрә бынан һуң ыңғай һәм ижад энергияһы йөрөтөүсе һүҙҙәрҙе генә ҡулланасаҡмын", - тиегеҙ.

● Уйығыҙҙа ғына: "Мин үҙ анымда һәм хәҙер ыңғай әһәмиәте булған һүҙҙәрҙе ҡулланам", - тип, күҙҙәрегеҙҙе асығыҙ.

Һүҙҙәр беҙҙең телмәребеҙҙә шул тиклем ныҡлы урын ала, әгәр ҙә берәй ваҡыт үҙегеҙҙе сикләүсе һүҙҙәр йәки "булдыра алмайым" тиһегеҙ икән, әлеге күнегеүҙе ҡабат-ҡабат ҡабатлағыҙ.

Артабан беҙ көсһөҙлөк һәм ғазапланыуға килтереүсе һүҙҙәр тураһында һөйләшербеҙ. Аңыбыҙ тормошобоҙ, бигерәк тә тәнебеҙҙең тормошо менән идара итә. Тормошобоҙ сығанағы Илаһ булғанлыҡтан, уның менән мейебеҙҙең уң яҡ ярымшары ярҙамында бәйләнеш булдырыу өсөн эшләнгән һәр ғәмәлебеҙ һәр көнөбөҙҙә идеаль итеүгә бер аҙым булып тора.

**Роберт СТОУН.**



## 17 ЯНВАРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

**Уважаемые телезрители! Телеканал приносит свои извинения за перерыв в работе в связи с профилактикой до 14.00**

14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Жди меня"
21.00 "Время"
21.30 "Доктор Тырса", 9-я серия
22.20 "Спецрасследование"
23.30 "Ночные новости"
23.50 "Подпольная империя", 10-я серия. Криминальная драма
00.50 "Только она - единственная". Комедия
02.40, 03.05 "Микс"
03.00 Новости

### РОССИЯ 1

**Уважаемые телезрители! Телеканал приносит свои извинения за перерыв в работе в связи с профилактикой до 14.00**

14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Ефросинья", 231-я серия
17.55 "Все к лучшему", 1-я серия
18.55 "Институт благородных девиц", 72-я серия
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Пятая группа крови", 1-я, 2-я и 3-я серии
23.45 "Городок"
00.50 "Вести+"
01.10 "Письма с Иводзимы". Драма
04.00 "Артист забытого жанра. Владимир Шубарин"

### НТВ

04.55 "НТВ утром"
08.30 "Таксистка"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Ментовские войны". "Недетские игры". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Эра стрельца-3". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Паутина-4". Сериал
21.30 "Зверобой. Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Бальзаковский возраст, или все мужики - сво..." Комедийный сериал
01.25 "Главная дорога"
02.00 "До суда"
03.00 "Суд присяжных"
04.00 "Мертвые до востребования". Сериал

### БСТ

**Уважаемые телезрители! Телеканал приносит свои извинения за перерыв в работе в связи с профилактикой до 14.00**

**14.00 "Эдера"**
**15.00 "Гора новостей"**
**15.15 "Царь горы"**
**15.30 "Приключения в стране эльфов"**
**16.00 "Развод и семеро детей"**
**17.45 "Полезные новости"**
**18.00 Новости (на башк. яз.)**
**18.15 "Специальный репортаж"**
**18.30 Новости (на русск. яз.)**
**18.55 Открытый Чемпионат России по хоккею - Чемпионат КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Торпедо" (Нижний Новгород)**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Неслучайные люди"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 "Специальный репортаж"**
**23.15 "Развод и семеро детей"**
**01.00 "Ночные новости"**

## 18 ЯНВАРЯ ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.10 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы". Сериал
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Доктор Тырса", 10-я серия
22.20 "Спасти любой ценой"
23.30 "Ночные новости"
23.50 "На ночь глядя"
00.40 "Дерево Джошуа"
00.40 "Светлячки в саду"
02.40, 03.05 "Фактотум"
04.25 "Хочу знать"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "От всей души"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Маршрут милосердия"
12.50 "Настоящая жизнь"
13.45 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50"Ефросинья", 232-я серия
17.55 "Все к лучшему", 2-я серия
18.55 "Институт благородных девиц", 73-я серия
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Пятая группа крови". Сериал
23.50 "Вести+"
00.10 "В последний раз". Комедия
01.55 "Честный детектив"
02.30 "Предсказание". Драма

### НТВ

04.55 "НТВ утром"
08.30 "Таксистка"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Чистосердечное признание"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Ментовские войны". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Эра стрельца-3". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Паутина-4". Сериал
21.30 "Зверобой. Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Бальзаковский возраст, или все мужики - сво..." Сериал
01.40 "Кулинарный поединок"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на русск. яз.)**
**09.15 "Неслучайные люди"**
**09.45 "Эдера"**
**11.00 "Тамыр. "Гора новостей" и др.**
**12.00 Новости (на башк. яз.)**
**12.15 "Истории"**
**12.30 "Орнамент"**
**12.45 "Хочу знать"**
**13.00 "Хорошее настроение"**
**14.00 "Эдера"**
**15.00 "Гора новостей" (на русск. яз.)**
**15.30 "Приключения в стране эльфов"**
**16.00 "Миллионы"**
**17.45 "Полезные новости"**
**18.00 Новости (на башк. яз.)**
**18.15 "Криминальный спектр"**
**18.30 Новости (на русс. яз.)**
**19.00 "Истории"**
**19.15 "На самом деле"**
**19.45 "Надо знать"**
**20.00 "Учим башкирский язык"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.30 "Орнамент"**
**20.45 "Полезные новости"**
**21.00 "Деньги к деньгами"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Неслучайные люди"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 "Криминальный спектр"**
**23.15 "Миллионы"**
**01.00 "Ночные новости"**

## 19 ЯНВАРЯ СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.10 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы". Сериал
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Доктор Тырса", 11-я серия
22.20 "Среда обитания"
23.30 "Ночные новости"
23.50 "Обмани меня". Сериал
00.40 "Доктор Дулиттл-2"
02.15, 03.05 "И у холмов есть глаза"
03.00 Новости
04.20 "Хочу знать"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Разбитые мечты актрисы Никищихиной"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Маршрут милосердия"
12.50 "Настоящая жизнь"
13.45 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50"Ефросинья", 233-я серия
17.55 "Все к лучшему", 3-я серия
18.55 "Институт благородных девиц", 74-я серия
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Пятая группа крови". Сериал
23.50 "Вести+"
00.10 "Ужин в четыре руки", 2 серии
02.00 "Горячая десятка"
03.10 "Закон и порядок"

### НТВ

**Уважаемые телезрители! Телеканал приносит свои извинения за перерыв в работе в связи с профилактикой до 12.00**

12.00 "Суд присяжных"
13.00 "Сегодня"
13.30 "Ментовские войны". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Эра стрельца-3". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Паутина-4". Сериал
21.30 "Зверобой. Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Бальзаковский возраст, или все мужики - сво..." Сериал
01.35 "Квартирный вопрос"
02.40 "Суд присяжных"
03.40 "Особо опасен!"
04.10 "Мертвые до востребованяи"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на русск. яз.)**
**09.15 "Неслучайные люди"**
**09.45 "Эдера"**
**10.45 "Учим башкирский язык"**
**12.00 Новости (на башк. яз.)**
**12.15 "Истории"**
**12.30 "Орнамент"**
**12.45 "Надо знать"**
**13.00 "Хорошее настроение"**
**14.00 "Эдера"**
**15.00 "Гора новостей"**
**15.15 "Цирк"**
**15.30 "Приключения в стране эльфов"**
**16.00 "Миннесота"**
**17.45 "Полезные новости"**
**18.00 Новости (на башк. яз.)**
**18.15 "Специальный репортаж"**
**18.30 Новости (на русс. яз.)**
**18.55 Открытый Чемпионат России по хоккею - Чемпионат КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Сибирь" (Новосибирск)**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Неслучайные люди"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 "Специальный репортаж"**
**23.15 "Миннесота"**
**01.00 "Ночные новости"**

## 20 ЯНВАРЯ ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.10 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы". Сериал
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Доктор Тырса", 12-я серия
22.20 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым"
23.30 "Ночные новости"
23.50 "Судите сами" с Максимом Шевченко"
00.40 "Максимальное ускорение"
02.40, 03.05 "Тихий омут"
03.00 Новости
04.25 "Хочу знать"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "От всей души"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Маршрут милосердия"
12.50 "Настоящая жизнь"
13.45 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50"Ефросинья", 234-я серия
17.55 "Все к лучшему", 4-я серия
18.55 "Институт благородных девиц", 75-я серия
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Пятая группа крови". Сериал
22.50 "Поединок"
23.50 "Вести+"
00.10 "Морфий". Драма
02.35 "Дельцы". Драма
04.25 "Городок"

### НТВ

04.55 "НТВ утром"
08.30 "Таксистка"
09.30 "Обзор. Чрезвычайные происшествия"
10.00 "Сегодня"
10.20 "В зоне особого риска"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.00 "Сегодня"
13.30 "Ментовские войны". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Эра стрельца-3". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Паутина-4". Сериал
21.30 "Зверобой. Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Бальзаковский возраст, или все мужики - сво..." Сериал
01.25 "Дачный ответ"
02.25 "Суд присяжных"
03.30 "Особо опасен!"
04.05 "Мертвые до востребованяи"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на русск. яз.)**
**09.15 "Неслучайные люди"**
**09.45 "Эдера"**
**10.45 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Тамыр. "Гора новостей" и др."**
**12.00 Новости (на башк. яз.)**
**12.15 "Истории"**
**12.30 "Орнамент"**
**12.45 "Надо знать!"**
**13.00 "Хорошее настроение"**
**14.00 "Эдера"**
**15.00 "Гора новостей"**
**15.15 "Экиэт китабы"**
**15.30 "Приключения в стране эльфов"**
**16.00 "Плетеный человек"**
**17.55 Открытый Чемпионат России по хоккею - Чемпионат ВХЛ. "Торос" (Нефтекамск) - "Ижсталь" (Ижевск)**
**20.30 "Орнамент"**
**20.45 "Пора разобраться"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Неслучайные люди"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 "Специальный репортаж"**
**23.15 "Плетеный человек"**
**01.00 "Ночные новости"**

## 21 ЯНВАРЯ ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.10 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "Поле чудес"
19.10 "Давай поженимся!"
20.00 "20 лучших песен 2010 года"
21.00 "Время"
21.30 "20 лучших песен 2010 года. Продолжение"
23.20 "Закрытый показ". "Какраки" Драма
02.35 "К Северу от Аляски". Комедия
04.50 "Хочу знать"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Мусульмане"
09.15, 04.05 "Мой серебряный шар"
10.10 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Маршрут милосердия". Сериал
12.50 "Настоящая жизнь"
13.45 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Ефросинья", 235-я серия
17.55 "Все к лучшему", 5-я серия
18.55 "Институт благородных девиц", 76-я серия
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Пятая группа крови". Сериал
22.55 "Девчата"
23.45 "Враг № 1". Мелодрама
01.50 "Террорист". Криминальная драма

### НТВ

04.55 "НТВ утром"
08.30 "Таксистка"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Спасатели"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Суд присяжных: главное дело"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Эра стрельца-3". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Следствие вели..."
20.30 "Чрезвычайное происшествие. Расследование"
20.55 "НТВшники"
22.00 "Егорушка". Драма
23.55 "Бальзаковский возраст, или все мужики - сво..." Сериал
01.50 "Залезь на Луну". Криминальная драма
03.35 "Суд присяжных"
04.40 "Мертвые до востребования"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на русск. яз.)**
**09.15 "Неслучайные люди"**
**09.45 "Эдера"**
**10.45 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Гора новостей"**
**11.15 "Зеркальце"**
**11.30 "Йома"**
**12.00 Новости (на башк. яз.)**
**12.15 "Истории"**
**12.30 "Орнамент"**
**12.45 "Надо знать!"**
**13.00 "Хорошее настроение"**
**14.00 "Эдера"**
**15.00 "Гора новостей"**
**15.15 "Зеркальце"**
**15.30 "Приключения в стране эльфов"**
**16.00 Женщины"**
**16.00 Новости (на башк. яз.)**
**18.15 "Криминальный спектр"**
**18.30 Новости (на русск. яз.)**
**19.00 "Истории"**
**19.15 "На самом деле"**
**19.45 "Надо знать"**
**20.00 "Учим башкирский язык"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.30 "Орнамент"**
**20.45 "Полезные новости"**
**21.00 "Спортивная кухня"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**21.45 Открытый Чемпионат России по хоккею - Чемпионат КХЛ. "Спартак" (Москва) - "Салават Юлаев" (Уфа)**
**00.15 "Свидание с джазом"**
**01.00 "Ночные новости"**

## 22 ЯНВАРЯ СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.30, 06.10 "Обочина"
06.00 Новости
07.20 "Играй, гармонь любимая!"
08.10 "Дисней-клуб"
09.00 "Умницы и умники"
09.40 "Слово пастыря"
10.00, 12.00 Новости
10.10 "Смак"
10.50 "Кумиры. Евгения Ханаева. С антрактом на любовь"
12.10 "Восстание чайников"
13.10 "Моя родословная"
14.00 "Мадагаскар. Побег в Африку". Полнометражный приключенческий мультфильм
15.30 "Китайская бабушка". Комедия
17.10 "Кто хочет стать миллионером?!"
18.10 "Прогулка по Парижу". Мелодрама
19.50 "Минута славы"
21.00 "Время"
21.15 "Минута славы. Продолжение"
22.00 "Олег Табаков. Юбилей среди друзей"
23.30 "Красавчик-2". Мелодрама
01.50 "Французский связной-2"
04.10 "Моя ужасная няня"

### РОССИЯ 1

05.05 "Тайна записной книжки"
06.45 "Вся Россия"
06.55 "Сельское утро"
07.25 "Диалоги о животных"
08.00 "Вести"
08.10 "Местное время. Вести-Башкортостан"
08.20 "Военная программа"
08.50 "Субботник"
09.30 "Городок"
10.05 "Качество жизни"
10.25 "Уфимское "Времечко"
11.00 "Вести"
11.10 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.20 "Вести. Дежурная часть"
11.55 "Честный детектив"
12.20 "Точка кипения". Сериал
14.00 "Вести"
14.20 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.30 "Точка кипения". Сериал
16.20 "Субботний вечер"
18.15 "Шоу "Десять миллионов"
19.20 "Когда на юг улетят журавли..." Драма
20.00 "Вести в субботу"
20.40 "Когда на юг улетят журавли..." Продолжение
23.45 IX Торжественная церемония вручения Национальной кинопремии "Золотой орел"
02.10 "Вальгалла: сага о Викинге". Приключения
04.05 "Комната смеха"
04.50 "Городок"

### НТВ

06.05 "Воскресенье в женской бане"
07.05 "Вовка в тридевятом царстве"
07.25 "Смотр"
08.00 "Сегодня"
08.20 "Золотой ключ". Лотерея
08.45 "Их нравы"
09.25 "Живут же люди!"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Главная дорога"
10.55 "Кулинарный поединок"
12.00 "Квартирный вопрос"
13.20 "Особо опасен!"
14.00 "Таинственная Россия"
15.05 "Своя игра"
16.00 "Сегодня"
16.20 "Последнее слово"
17.30 "Очная ставка"
18.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.00 "Сегодня"
19.25 "Профессия - репортер"
19.55 "Программа "Максимум". Расследования, которые касаются каждого"
21.00 "Русские сенсации"
21.55 "Ты не поверишь!"
22.55 "Правосудие волков". Криминальная драма
00.35 "Ретроград". Фантастический боевик
02.25 "Советские биографии. Владимир Ленин"
03.25 "Женщина цвета танго"
04.15 "Мертвые до востребования"

### БСТ

**07.00 "Новости" (на русск. яз.)**
**07.15 "Салям"**
**08.00 "Дарю песню"**
**10.00 "Рубин Гуд и непобедимый рыцарь"**
**11.45 "Учим башкирский язык"**
**12.00 Новости (на башк. яз.)**
**12.15 "Следопыт"**
**12.30 "Тэмле"**
**13.00 "Надо знать!"**
**14.00 "Моя жизнь"**
**16.15 "Народная музыка"**
**16.30 "Орнамент"**
**17.30 "Третий звонок"**
**18.00 Новости (на башк. яз.)**
**18.15 "Третий звонок". Р. Киплинг. "Мы с тобой одной крови". Спектакль национального молодежного театра им. М. Карима**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.30 "Историческая среда"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Нескучное кино"**
**22.15 "Мои черничные ночи"**
**00.00 "Йондоззар"**
**01.45 "Ночные новости"**

## 23 ЯНВАРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости
06.10 "Орел и решка"
07.50 "Служу Отчизне!"
08.20 "Дисней-клуб"
09.10 "Здоровье"
10.00, 12.00 Новости
10.10 "Непутевые заметки"
10.30 "Пока все дома"
11.30 "Фазенда"
12.20 "Вкус жизни. Ягоды и фрукты"
13.20 "КВН. 50 виртуальных игр"
14.20 "Привет, Киндер!" Мелодрама
16.20 "Вечер музыки Микаэла Таривердиева"
17.50 "Пираты Карибского моря: на краю света". Приключения
21.00 "Воскресное "Время"
22.00 "Большая разница"
23.00 "Шоу Нибенименехило"
23.40 "Познер"
00.40 "Он, я и его друзья"
02.40 "Фейерверк"

### РОССИЯ 1

05.35 "Один из нас". Приключения
07.30 "Смехопанорама" Евгения Петросяна"
08.00 "Сам себе режиссер"
08.55 "Утренняя почта"
09.35 "Сто к одному"
10.20 "Местное время. Вести-Башкортостан". События недели"
10.40 "Уфимское "Времечко"
11.00 "Вести"
11.10 "Носика знает каждый. Памяти короля эпизода"
12.05 "Точка кипения". Сериал
14.00 "Вести"
14.20 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.30 "Точка кипения". Сериал
16.10 "Смеяться разрешается"
18.05 "Ищу тебя". Драма
20.00 "Вести недели"
21.05 "Белое платье". Мелодрама
23.05 "Специальный корреспондент"
00.05 "Два веселых гуся"
00.35 "Черная смерть". Приключения
02.40 "Из вечности". Драма

### НТВ

05.50 "Воскресенье в женской бане"
06.50 Мультфильмы
08.00 "Сегодня"
08.20 "Русское лото"
08.45 "Их нравы"
09.25 "Едим дома!"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Первая передача"
11.00 "Дело темное"
12.00 "Дачный ответ"
13.00 "Сегодня"
13.20 "Шпильки". Криминальная драма
15.05 "Своя игра"
16.00 "Сегодня"
16.20 "Развод по-русски"
17.20 "И снова здравствуйте!"
18.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.00 "Сегодня. Итоговая программа"
20.00 "Чистосердечное признание"
20.50 "Центральное телевидение"
21.55 "Гражданка начальница". Криминальная драма
23.55 "Интуиция". Фантастический боевик
01.35 "Авиаторы"
02.05 "Советские биографии. Лаврентий Берия"
03.05 "Гибель "Адмирала Нахимова"
04.00 "Мертвые до востребования". Сериал

### БСТ

**08.00 Новости (на русск. яз.)**
**07.15 "Салям"**
**08.00 "Дарю песню"**
**10.00 "Тамыр представляет..."**
**11.45 "Учим башкирский язык"**
**12.00 Новости (на башк. яз.)**
**12.15 "Следопыт"**
**12.30 "Тэмле"**
**13.00 "Истории"**
**14.00 "Серьезный человек"**
**16.00 "Дорога к храму"**
**16.30 "Народная музыка"**
**17.00 "Королева Болливуда". Романтическая комедия**
**18.30 "Автолегенды"**
**18.55 Открытый Чемпионат России по хоккею - Чемпионат КХЛ. "СКА" (Санкт-Петербург) - "Салават Юлаев" (Уфа)**
**21.30 "Новости недели"**
**22.15 "Урал Лото 6 из 40"**
**22.45 "Вечер.com"**
**23.30 "Серьезный человек"**
**01.30 Прогноз погоды**

**✓ 50-се йылдарҙа алкоголь баҙары монополистары Мәскәүҙә һәм Ленинградта бер төркөм ғалимдарға аҡса түләп, махсус теория уйлап сығарттыра - нисек итеп халыҡты, тәү сиратта, балаларҙы эскегә күндереү.**

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

# МӘҒЛҮМӘТҺЕҘЛЕК ТӘ...

## "йәшел йылан"ға "йәшел урам" аса

**18 декабрҙән 22 декабргә тиклем Красноярск ҡалаһының Себер федераль университеты профессоры, тарих фәндәре докторы, Рәсәйҙә айыҡлыҡ хәрәкәте лидерҙарының береһе, 30 йыл эскелек темаһын фәнни нигеҙҙә өйрәнеүсе ғалим Виктор Павлович Кривоногов Аҡъярҙа, Сибайҙа, Баймаҡта уҡытыусылар, медицина хеҙмәткәрҙәре, уҡыусылар, студенттар, оло быуын вәкилдәре менән осрашыуҙар уҙғарҙы. Биш көн эсендә 12 урында 1500 самаһы кешегә уҡылды был лекциялар. Бөтә Рәсәй "Айыҡ Рәсәй өсөн" ойошмаһы рәйестәше Марат Абдуллин ошо осрашыуҙарҙа ишеткәндәре һәм үҙенең һығымталары менән уртаҡлашты.**

Рәсәй халҡы XX быуаттың 50-се йылдарына тиклем, ғөмүмән, эсмәгән. 50-се йылдарға тиклем йән башына йылына 2-3 литр саф спирт тура килгән. 50-се йылдарҙан 70-се йылдарға тиклем арауыҡта ул ҡапыл 11 литрға күтәрелеп киткән. Брежнев хакимлыҡ иткән осорҙан Горбачев хакимлығына тиклем 16 литрға еткән, бөгөн иһә 18 литр тәшкил итә. Үҙенән-үҙе шундай һорау тыуа: ни өсөн 50-се йылдарҙан һуң был эскелек күрһәткесе нык күтәрелгән? В.П. Кривоногов быны сәбәптәрен тапҡан. 50-се йылдарҙа алкоголь баҙары монополистары Мәскәүҙә һәм Ленинградта бер төркөм ғалимдарға аҡса түләп, махсус теория уйлап сығарттыра - нисек итеп халыҡты, тәү сиратта, балаларҙы эскегә күндереү. Сөнки балалар - алкоголь заводтарының, олигархтарҙың төп дошманы. 60-сы йылдарҙа СССР-ҙа хәмерҙән йылына 3 млн кеше үлгән, шул уҡ ваҡытта 5 млн бала тыуып торған. Ун йыл эсендә яҡынса 30 млн эскән кеше яҡты донъя менән хушлашһа, 50 млн эсмәүсе бала тыуған. Шуға күрә алкоголь мафияһы ниндәйҙер махсус сара уйлап тапмаһа, 10-20 йыл эсендә уларҙың килеме лә юҡҡа сығыр ине. Шуға уларҙың төп маҡсаты ошо балаларҙы нисек тә булһа эсергә өйрәтеү була. Ул теорияның беренсе исеме - эскелеккә һәм алкоголизмға ҡаршы көрәш. Икенсе исеме - байрамдарҙа мәҙәни эсеү теорияһы. Профессор Кривоногов был теорияның файҙаһын, йәғни КПД-һын иҫәпләп ҡараған. Ошо теория барлыҡҡа килгәнсе СССР-ҙа алкоголиктарҙың һаны 500 мең булған, теория барлыҡҡа килгәндән һуң 10 йыл үткәс, уларҙың һаны 5 млн-ға еткән. Йәғни теория алкоголизмға ҡаршы булдырылған, ә алкоголиктар һаны ун тапҡырға арттан. Ә бөгөнгө көндә был һан бер нисә тиҫтә миллионға етә. Ғөмүмән, был теория алкоголизмға ҡаршы эшләмәй, сөнки алкоголиктар байрамдарҙа ғына һәм самаһын белеп эсә белмәй.

Бер кеше лә эскесе булып тыумай. Беренсе синыфҡа барғанда ла улар айыҡ, ә мәктәпте тамамлағанда ул балаларҙың 99 проценты алкоголле эсемлек эсеп ҡараған була. Уларҙың 50 процентына ата-әсәләр үҙҙәре һона рюмканы. Ни өсөн? Сөнки ата-әсәләргә, уҡытыусыларға, табиптарға, зыялыларға йәмғиәтебеҙ был теорияны һеңдергән: байрамдарҙа аҙ ғына алкоголле эсемлек эсеү хилаф түгел, тәмләп ҡарап, урамда эсеп йөрөгәнсе, өйҙә эсһен, һ.б. Ә 100 процент айыҡ тормош алып барырға тигәндә беҙҙең ата-әсәләр хупламай.

Тағы бер миҫал. Мәҫәлән, балалар баҡсаһындағы 4-5 йәшлек 25 баланан торған төркөмдә тәрбиәсе урамда йөрөргә алып сыға. Юлда китеп барышлай балалар сүп урналарында ҡаҙынған, йәки алам-һаламға төрөнөп йоҡлап ятҡан асарбаҡты, уның эргәһендә ултырған араҡы шешәһен күрә. Тәрбиәсенең, ул яҡҡа ҡарамағыҙ, унда бармағыҙ, тип иҫкәртеүе аша балалар эскелектең ни тиклем насар икәнен аңына һеңдерә. Шул уҡ ваҡытта ул балалар балалар баҡсаһында йә мәктәптә ниндәйҙер байрам ваҡытында тәрбиәселәр, уҡытыусыларҙың матур өҫтәл артында эсеп, күңел асыуына ла шаһит була бит. Был хәл өйҙәрендә ата-әсәләр тарафынан да ҡабатлана. Бала аңында ҡапма-ҡаршылыҡ көрәшә. Эскеселәр алкоголгә антиреклама эшләһә, ата-әсәләр, уҡытыусылар, тәрбиәселәр реклама яһай.

Кривоногов залдағыларға шундай һорау бирҙе: айыҡлыҡ, айыҡ йәшәү тураһында берәй йыр беләһегеҙме? Берәү ҙә яуап бирә алмай, сөнки поп-культура беҙҙең аңыбыҙға эсеү культын һеңдерә. Яңы йыл булһынмы, Еңеү көнөмө, башҡа берәй байраммы, мөхәббәт, ҡайғы кисереләме, ғөмүмән, һәр ваҡиға айҡанлы беҙҙә рюмка күтәрелә һәм ундай табындарҙа берәү ҙә "Әйҙә, эсмәйек!" тигән йыр йырламай.

Тағы бер факт - иҫерек килеш ауырға ҡалыу. Был беҙҙең гүзәл заттарға ҡағыла. XIX быуат уртаһында Швейцарияла бер төркөм ғалимдар байрамдарҙа ғына берике тапҡыр эсеү ҙә ҡатын-ҡыҙ организмына ни тиклем зыян килтереүен асыҡлай. Мәғлүм булыуынса, ҡатын-ҡыҙға бала яралыу күҙәнәктәре 15-40 йылға бер тапҡыр һәм дауамлы бирелә. Берәй ҡыҙ мәктәптә уҡығанда, һуңынан да байрамдарҙа ғына эсһә лә, уның бала яралыу күҙәнәктәре формацияға бирелеп, зарар күреүе ихтимал. Статистика күрһәтеүенсә, эсмәгән ҡатын-ҡыҙҙар араһында 100 кешенең береһенең генә балаһы сирле булыуы ихтимал. Байрамдарҙа ғына эсеүсе 100 кешенең ете проценты, ә даими эсеүселәрҙең 70 проценты балаһын ауырыуҙарға дусар итә. Профессор Кривоногов Сибайҙағы медучилище студенттарына, был хаҡта беләһегеҙме, ошондай мәғлүмәттәрҙе ишеткәнегеҙ бармы, тигән һорау биргәс, бер генә студент та ҡул күтәрмәне. Тимәк... Виктор Павловичтың лекцияларын тыңлағандан һуң йәмғиәтебеҙҙең эскелек һаҙлығына бата барыуына мәғлүмәтһеҙлек, эскелектең зыяны тураһында хәбәрҙар булмау ҙа сәбәпсе икәненә тағы бер тапҡыр инандыҡ.

Шуға ла "Айыҡ Башҡортостан" хәрәкәтенең бер эше, әлбиттә, халыҡ араһында йөрөп, сәләмәт йәшәү рәүешен пропагандалаусы лекциялар уҡыу, әңгәмәләр үткәреү буласаҡ. Февраль башында республикаға Рәсәйҙәге айыҡлыҡ хәрәкәтенең төп лидеры Владимир Георгиевич Жданов киләсәк. Ул Нефтекама ҡалаһында, Белорет районында һәм Өфөлә лекциялар уҡыясаҡ.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

*Ҙур сәхнә*

**15 ғинуар "Әй әттәгенәһе, ирем ҡайтты!"** (Н. Ғәйетбай), комедия.
**16 ғинуар "Һөйәм, һағынам..."** (М. Ғиләжев), комедия
**18 ғинуар "Ҡатынымдың исеме Морис"** (Р. Шарт), комедия
**19 ғинуар "Хыялый"** (С. Әбүзәр), лирик комедия.
**20 ғинуар "Туй"** (А. Чехов), шаярыу
**21 ғинуар "Йәшлектәргә ҡайтайыҡ әле..."** театраль концерт

*Бәләкәй сәхнә*

**19 ғинуар "Эскәмйә"** (А. Гельман), 1 бүлектә пьеса

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**21 ғинуар "Ун икенсе төн"** (У. Шекспир), комедия

ИҒЛАН
**Шамонино, Жуково ауылдарында ер участкаларын теркәргә ярҙам итәм.
Тел.: 266-17-31, 8-927-34-04-815**

БУЛМАҪ, ТИМӘ!

# ИРҘӘР ХАФАҒА ТӨШТӨ:

## уларҙың кәрәге бөтәсәкме?

**Футурологтар киләһе ун йылға ҡыҙыҡлы ғына яңылыҡтар һәм үҙгәрештәр вәғәҙә итә.**

**2011-2012 йылдар.** 2011 йылда Ер йөҙөнөң 7 миллиардсы кешеһе донъяға киләсәк. Ул ҡыҙ бала булыр, тип фаразлайҙар. Ҡайһы бер иҫәпләүҙәр буйынса, ул Египетта тыуырға тейеш.

▸ Киләһе ике йылда Массачусетстағы Terrafugia америка компанияһы һатыуға оса торған автомобилдәр сығарырға йыйына. Был хаҡта ул 2009 йылда уҡ вәғәҙә биргәйне, тик был алданыраҡ ҡыҫҡырып булып сыҡты. Бөгөн иһә "юлдарҙа йөрөү өсөн дә файҙаланып була торған" был осоусы аппараттарҙың (Roadable Aircraft) хаҡы 200-250 мең доллар торасаҡ. Сағыштырыу өсөн: ике урынлы винтлы еңел самолетты АҠШ-та 110 мең долларға һатып алырға була, тик уның менән автомобиль юлдарында йөрөп булмай, әлбиттә. Ә ҡанатлы авто менән теләһә ниндәй яландан һауаға күтәрелеп, осорға һәм шоссеға еңел генә килеп төшкәс, махсус бүлеккә ҡанаттарын йыйып, осҡа ғына өй янына килеп туҡтарға мөмкин.

**2013-2014 йылдар.** Туристар әүҙем рәүештә йыһанға оса башлаясаҡ. Инглиз бизнесмены Ричард Брэнсон нигеҙ һалған Vivgin galactic компанияһы, ихтимал, тәүге туроператор булыр. Ул Американың Нью-Мексикола космопорт төҙөй - уның күҙаллауынса, йыһанға тәүге шәхси "маршрутка"лар тап шунан ҡуҙғалып китәсәк. Ләкин голланд компаниялары ла - KLM һәм Space Expexrience Curacao (SXC) уның "үксәһенә баҫып" килә. Улар ҙа әле төҙөлөп ятҡан XCOR Lynx суборбиталь корабльдәрендә даими рәүештә йыһанға йөк һәм пассажирҙар ташырға ниәтләй. Кюрасао утрауындағы космопорт уларҙың базаһы буласаҡ. Был суборбиталь самолеттар атмосфераны ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә үтеп китергә һәләтле: ауырлыҡты юғалтыу хәле ни бары 4 минутҡа һуҙыласаҡ. Йыһан мөғжизәһен татып ҡарау өсөн шул да етәсәк. Турпутевкалар әле үк һатыла башлаған да инде - 200 мең доллар. Мәскәүҙә уны, мәҫәлән, "Элегант Резортс" инглиз турфирмаһы офисында һатып алырға була. Путевкалар ҡиммәт булыуға ҡарамаҫтан, йыһанға сәйәхәт итергә теләүселәр күп. Рәсәйҙән ете кеше путевка һатып алған һәм улар тәүге 300 кеше араһында сират алып ҡуйған. Әйткәндәй, йыһан ләззәтен оҙайтырға теләүселәр өсөн Bigelow Aerospace Америка компанияһы 2012 йыл аҙағына Nautilus орбитаһында ҡунаҡхана төҙөргә йыйына. Дөрөҫ, бында ла хаҡтар һушты алырлыҡ: дүрт аҙна өсөн 15 миллион түләргә кәрәк. Тимәк, йыһанда үткәргән бер төн миллион доллар самаһына төшәсәк!

**2015-2016 йылдар.** АҠШ-тың бөтә һалдаттары ла нанотехнологиялар ярҙамында эшләнгән экзоһөлдәләр менән ҡоралландырыласаҡ. Улар Массачусетс технология институтында эшләнә. Атыу ҡоралдарынан һаҡланыу өсөн был яңы униформа пуля килеп тейгән урында үҙенең тығыҙлығын арттырыу үҙенсәлегенә эйә. Ә нанокостюм тегеләсәк туҡыманың сүстәренә органик полимерҙар ҡушып үрәсәктәр, был иһә әҙләп табыуҙың стандарт системалары өсөн әлеге костюмдағы һалдатты күренмәслек итә ала.

**2017-2018 йылдар.** Ғалимдар тарафынан мускул күҙәнәктәре нигеҙендә лабораторияла яһалған яһалма ит һатыла башлаясаҡ. Тәме буйынса ул тауыҡ итенә оҡшаш. Бындай тәжрибәләрҙе Голландия ғалимдары үткәрә башлаған. 2010 йылдың яҙында улар пробиркала сусҡа ите үҫтереп алыуға өлгөштө.

▸ Биологтар тере сусҡа итенән йәрәхәтләнгән урындарҙы бөтәштереүсе миобласт алды.

▸ Ошо йылдарҙа шулай уҡ Австралияла ирҙәр ҡатнашлығынан тыш ауырға ҡалыуҙың тәүге тәжрибәһе үткәреләсәк. Аталандырыу өсөн материал булып әсәнең ствол күҙәнәктәренән алынған яһалма орлоҡ шыйыҡсаһы хеҙмәт итә. Ирҙәр хафаға төштө: уларҙың кәрәге бөтәсәкме ни шулай итеп?

**2019-2020 йылдар.** Нейрохирургтар арсеналында күҙгә күренмәгән нанороботтар пәйҙә буласаҡ. Уларҙы кеше организмына ебәреп, яман шеш күҙәнәктәре эҙләп табыласаҡ һәм юҡ ителәсәк.

▸ Shimizu япон фирмаһы тәүге йөҙөп йөрөүсе ҡала төҙөйәсәк. Ҙур лилиә сәскәләренә оҡшаған ҡала экватор буйлап Тымыҡ океанда йөҙөп йөрөйәсәк.

▸ 2020 йылда кеҫә телефондары ҡул сәғәтенән дә ҙур булмаясаҡ. Ә кеше тәне... ҡабул итеүсе-тапшырғыс станцияға әүереләсәк. Шулай итеп, тәндән тәнгә тапшырылыусы яңы юғары тиҙлектәге тоташтырғыс сымдарһыҙ селтәр хасил буласаҡ. Был проекттың авторҙары - Белфастағы Королев университетының Электроника, элемтә һәм мәғлүмәт технологиялары институты.

▸ 20-се йылдар ахырына Intel корпорацияһы ғәриптәрҙе генә түгел, бөтә кешеләрҙе лә компьютерҙар менән "фекер көсө" ярҙамында идара итергә өйрәтәсәк. Ул компьютерҙарға, мобиль гаджеттарға һәм көнкүреш техникаһына уй менән бойороҡ бирә торған микрочиптарҙы мейегә ҡуйыу технологияһын да эшләргә ниәтләй.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА әҙерләне.**

✔ *Камиллашыуға ынтылыш еңеүгә ынтылыштан мөһимерәк. Сөнки еңелгәндә лә камиллашыу теләге ҡаласаҡ бит.*

*(Джон Апдайк).*



АТЫҢ КЕМ?

# ӘРТИС ТӘ ҺУҢ ҮҪҘӘРЕ!

**Һүрәттәге шат йөҙлө, мөләйем, һөйкөмлө сабыйҙар менән таныштырып үтмәксемен һеҙҙе: улар Айһылыу, Алтынай, Айгүзәл һәм Салауат булыр.**



Айһылыу менән Алтынай - Сибай ҡалаһында, ә Айгүзәл менән Салауат Яҡтыкүл ҡасабаһында йәшәй. Уларға шундай матур, күркәм, оло мәғәнәгә эйә исемдәрҙе ата-әсәләре һайлаған. Башҡорт мөхитендә тәрбиәләнгән, рухлы ата-әсәнең һәм олатай-өләсәйҙәрҙең өлгөһөн күреп үҫеп килеүсе был сабыйҙар зирәклектәре, сослоҡтары, һәләтле булыуҙары менән айырылып тора. Улар Әбйәлил районы Ҡырҙас ауылында йәшәүсе олатаһы менән өләсәләре Мәүзиға һәм Мәүлит Баймөхәмәтовтарға һәр ял һайын ҡайтып, уларҙы ҡыуандырып китә. Өләсәй менән олатай ейән-ейәнсәрҙәрен һағынып көтөп ала. Шулай булмай ни: был сабыйҙар йортҡа инеү менән байрам башлана бит. Йыр-бейеүгә һәләк оҫта балалар концерт ҡуйып шатландыра: өләсәләре баянда уйнай, олаталары ҡул саба, ә Айһылыу, Алтынай һәм Айгүзәл тыпырҙатып башҡорт бейеүҙәрен бейей, уларға дүрт йәшлек Салауат та ҡушыла. Йырларға ла, шиғырҙар һөйләргә лә аптырап тормайҙар, торғаны менән артист инде үҫҙәре. Ғаилә ағзалары ултырып тыпыш ҡуйып, төрлө спектаклдәр ҡуя улар. Ана шулай, олатай менән өләсәһен үҫҙәренең тамашалары менән ҡыуандырып, көлдөрөп ҡайтып китә улар. Күнелдәре тулған олатай менән өләсәй: "Бәхет-тәүфиҡтарығыҙ ғына булһын, балаҡайҙарым", - тип теләктәрен теләп ҡала.

**Гөлнәзирә АЙЫТБАЕВА.**

ҺЫЙЛАМАҒА ҺЫЙЫҢ БУЛҺЫН!

# АШ-ҺЫУ ТӘМЛЕ

## дуҫтар менән бергә...

### Кейәү ҡоймағы

**Он, йомортҡа, һары май, тоҙ, әҙерәк аш содаһы.**

Йомортҡа, тоҙ, сода, май йылымыс һыуҙа болғатҡас, он ҡушып туҡыйһын. Ҡоймаҡ йоҡа ғына, ваҡ түңәрәктәр итеп ҡойола. Һары майҙа майлап, ҡоймаҡлы табаны кейәү алдына ҡуяһын. Һыйлау ғына түгел, ҡоймаҡ кейәүҙе һынау өсөн дә атҡарылыусы йола. Йомарт кейәү табаны ҡөләше алдына этәреп, тәүгә ҡоймаҡты уға ашатҡас ҡына үҙе ашай башлай. Ә һаран кейәү, үҙенә генә тәғәйенләнгән икән, тип, ҡоймаҡты бер үҙе йыпыра ғына. Уның ҡараыу, ҡайтып киткән саҡтарында шул ҡылыҡтарына ҡарап, йомарт йәки һыҡмыр тигән ҡушаматтар тағыла. Йәл, хәҙер был йола юҡ.

### Шәүлә

**Һимеҙ ит һәм дөгөнән былауҙы һәр кем бешерә белә.** Ит бөтөп киткән саҡта был аҙыҡты ҡырғыстан ҡырылған кишер йәки йыуып ебетелгән күрәгә менән генә әҙерләргә була. Һуған мул ғына майҙа ҡыҙҙырылып ҡушыла. Үҙе былау, тик ите юҡ, шуға ла аҙыҡ "шәүлә" тип атала.

### Кәбеҫтә турамаһы

**1 баш кәбеҫтә, 1 һары төҫтәге татлы борос, 1 услам йәшел һуған, ярты балғалаҡ тәмләткестәр, 2 ҡалаҡ үҫемлек майы.**

Кәбеҫтә менән борос һалмалап турала, һуғанды ла ваҡлағыҙ. Бөтәһен бергә ҡушып, тәмләткестәр һибергә һәм үҫемлек майы менән болғатырға.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

# ҠУРАЙ ЕЛӘГЕ МЕНӘН БИСКВИТЛЫ ТОРТ

**Дүрт йомортҡаны (улар һыуыҡ булмаһын) ярты стакан шәкәр ҡомо менән өҫтөндә еңелсә күбек барлыҡҡа килгәнсе туҡыра (миксерҙа яҡшыраҡ). Күбекте әләктереп, кире төшөргәндә ул таралмайынса әҙерәк ваҡыт торһа, туҡыу еткән була.**

100 грамм онды иләп, 50 грамм мәк орлоғо менән болғатырға ла бисквит ҡамырына өҫтәп, бер яҡҡа табан ғына болғатырға (он менән мәкте айырым ҡушһаң, тигеҙ таралмай). Бейеклеге 5 см, диаметры 22 см самаһы булған табаға пергамент түшәп, өҫтөнә иплəп кенә ҡамырҙы ҡойып, 200 градусҡа ҡыҙған духовкала ярты сәғәт бешереп алырға. Бисквит һыуынғас, бысҡы тешле бысаҡ менән (ул тигеҙ ҡырҡа) ике өлөшкә бүлеп, аҫтағыһына ҡауырын йәки кондитер щеткаһы менән ситенән башлап уртаһына табан шәкәр сиробы һөртөп сығырға. Уның өҫтөнә ҡурай еләге ҡайнатмаһын һылап, тағы ла кондитер шприцы менән крем һығып сығырға. Артабан уның өҫтөнә икенсе өлөштө өҫтөн аҫҡа ҡарай әйләндереп һалырға, йәғни уның йомшаҡ яғы өҫтә булырға тейеш. Уның өҫтөнә лә тәүҙә сироп, аҙаҡ ҡурай еләге ҡайнатмаһын һыларға һәм ҡалған кремдың яртыһы менән биҙәргә. Биҙәктең өҫтөнә бер нисә ҡурай еләге (һыуыткыста туңдырылғаны ла ярай) ҡуйып сығырға ла, шәкәр онтағы һибергә.

Шәкәр сиробын 100 грамм шәкәр ҡомо менән һыуҙы болғатып, ҡайнатып эшләргә. Кремды 200 грамм һөт өҫтөн миксерҙа туҡып, аҙактан 50 грамм шәкәр ҡушып болғатып яһарға.

**Флора БИКЕМБӘТОВА.**

ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ

# АБАТА, ҠУТАРАС, ҺЕЛӘҮКӘШ...

Беҙҙең яҡта **"абата"** һүҙе эшлекһеҙ, әрпеш килендәргә ҡарата ҡулланылған. "Ул килен дә абата ғына инде", - тип һөйләгәндәр уның хаҡында. **"Ҡутарас"** һүҙе лә шул уҡ мәғәнәне аңлатҡан.

- Эй-й, уның бисәһе ҡутарас, абата, ни әйтһәң... - тигәндәр ундайҙар тураһында.

**"Һеләүкәш"** һүҙе лә яй, булдыҡһыҙ кешеләргә ҡарата әйтелгән.

- Эй, ҡуй инде, бисәһе лә һеләүкәш кенә уның", - тип әйткәндәр.

Яй ҡуҙғалған кешеләргә тағы "ығыш" тигән һүҙҙе лә ҡулланалар...

**Земфира АҠБУТИНА.**
**Ейәнсура районы Ибрай ауылы.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# КЕШЕЛӘРГӘ...

## бөйөктәргә ҡараған кеүек ҡара

Ахмаҡтың үҙенсәлекле үҙ еҫе бар. Өндәшмәй торғанда ла уны танып була.

**(Жюль Ренар).**

Камиллашыуға ынтылыш еңеүгә ынтылыштан мөһимерәк. Сөнки еңелгәндә лә камиллашыу теләге ҡаласаҡ бит.

**(Джон Апдайк).**

Кешеләргә ышан - улар һиңә тоғро ҡалыр; кешеләргә бөйөктәргә ҡараған кеүек ҡара - улар ысынлап та бөйөклөк күрһәтер.

**(Ралф Эмерсон).**

Ғаилә низән башлана? Егеттең ҡыҙға ғашиҡ булыуынан, әлбиттә. Ә башҡа ысулды уйлап тапмағандар әле.

**(Уинстон Черчилль).**

Алама хәбәр бик шәп йүгерә, ә яҡшыһы аҡһай-аҡһай көскә атлай.

**(Джон Мильтон).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Ярлы ғына ғаиләлә тыуа Фәйшә. Фәҡирлек өсөн кәмһетелеп үтә бала сағы. Үҫеп етеп, кейәүгә сыҡҡас та иренең ғаиләһендә атаәсәһенең фәҡирлеге өсөн кәмһетеүҙәр туҡталмай. Бала тапҡас ҡына уға хөрмәт күрһәтә башлайҙар. Әммә күп тә үтмәй, улы һәләк булып ҡуя. Быға саҡлы бер тапҡыр ҙа үлем менән осрашмаған Фәйшә улының мәйете эргәһенә береүҙе лә яҡын ебәрмәй. "Мин улымды терелтер дауа табасаҡмын", тигән уй менән, балаһының мәйетен күтәреп ала ла, өйҙән-өйгә дарыу һорашып йөрөй башлай. Кешеләр уны аҡылдан яҙған тип уйлай, мәйетте терелтер дарыу булмай, тип, төрлөсә ышандырырға тырышалар. Әммә Фәйшә юлын дауам итә. Бына уға бер аҡыл эйәһе осрай."Һин минең улымды терелтер дарыуҙы беләһеңме?"- тип һорай унан Фәйшә. "Эйе, мин ундай дарыуҙы беләм, - ти аҡыл эйәһе. - Һин хәҙер йорттан йортҡа йөрөп сыҡ, әгәр ҙә ҡайһылыр йортта бер ваҡытта ла бер кем дә үлмәһә, уларҙан бер семтем генә гәрсис орлоғо һорап ал..." Фәйшә ҡалалағы беренсе йортҡа инә, бер семтем гәрсис орлоғо һорай. Орлоҡто ҡулына алғас, Фәйшә: "Һеҙҙең йортта бер ваҡытта ла бер кем дә үлмәгән, шулай бит?"- тип һорай."Һин нимә!- тиҙәр йорт хужалары. -Беҙҙең йортта тереләргә ҡарағанда үлеләр күберәк..." Фәйшә гәрсис орлоғон кире ҡайтарып бирә лә, артабан китә. Бөтөн ҡаланы йөрөп сыға, әммә мәйет сыҡмаған бер генә йортто ла таба алмай. Шунан ғына ул үлем бер уға ғына килгән ҡайғы түгеллеген, тотош ҡалала тереләргә ҡарағанда үлеләр күберәк икәнен, үлем тереләр өсөн мәңгелек бер ҡанун икәнен аңлай..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Таһир ИШКИНИН,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 6206
Заказ 79